**✓ Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 25 сентябрҙән 4 октябргә тиклем Бөтә Рәсәй гәзит-журналдарға яҙылыу аҙналығы иғлан ителә. Был көндәрҙә "Киске Өфө"гә (50665 индекс) яҙылыу хаҡы - 471 һум 72 тин, инвалидтар һәм һуғыш ветерандары өсөн - 419 һум 34 тин тәшкил итәсәк. Уҡытыусыларҙы һәм карттарҙы байрамдары менән ҡотлап, "Киске Өфө" гәзитенә яҙҙырып бүләк итеү өсөн бик уңайлы мәл. Һуңлап ҡалмағыҙ!**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27 СЕНТЯБРЬ-3 ОКТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ - ҠАРАСАЙ)
2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru
2002 йылдан башлап сыға
Һатыуҙа хаҡы ирекле
№39 (613)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**"Алтын ямғыр" кемгә яуа,**

йәки Импорт тауарһыҙ йәшәй алабыҙмы?



3,12

**Сибай сәсән үҙ иленә ҡайтты...**



6-7

**Депутат менән бер сәғәт,**

йәки Ғаиләлә көс ҡулланыуҙы тыйып булырмы?



8-9

**Яҙмыштың һәр тәҡдименә...**

"Эйе" тип яуап бир!



11

14 ТВ-программа


КӨНАУАЗ

# ПРЕЗИДЕНТ ТОҒРОЛОҠҠА АНТ ИТТЕ



**25 сентябрь БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда үткән тантанала Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын ҡабул итте.**

Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбаçары Алексей Сухов, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары, Башҡортостан Хөкүмәте ағзалары, Конституция, Арбитраж һәм Юғары судтар судьялары, район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтары, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре алдында республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев Рөстәм Зәки улы Хәмитовҡа Башҡортостан Республикаһы Президенты таныҡлығын тапшырҙы. Бынан һуң Рөстәм Зәки улы башҡорт һәм рус телдәрендә ант бирҙе: "Башҡортостан Республикаһы Президенты вәкәләттәрен бойомға ашырғанда Башҡортостан Республикаһының күп милләтле халҡына тоғро хеҙмәт итергә, уның дәүләтселеген нығытырға һәм яҡларға, Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы Конституцияларын үтәргә, кешенең һәм граждандың хоҡуҡтарын, азатлыҡтарын гарантияларға ант итәм!"

Рөстәм Зәки улы артабанғы сығышында Башҡортостаныбыҙ алдында ҙур, әммә үтәлерлек бурыстар тороуын, ә бының өсөн халыҡтың берҙәм, ойошҡан булырға тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балалар һәм йәштәр тәрбиәһендә һеҙҙең күҙгә салынған етешһеҙлектәр ниндәй?

***Лиза ӘҺӘҘУЛЛИНА, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған, Башҡортостан Республикаһының халыҡ уҡытыусыһы, Өфө ҡалаһының почетлы гражданы:*** Мәктәптәрҙә тәрбиә эшенең торошона ҡарата төрлө фекер ишетергә тура килә. Был хаҡта һүҙ ҡуйыртып тормай, уҡытыусы шәхесенә ҡағылышлы бер нисә генә фекер әйтмәксемен, сөнки белем һәм тәрбиә биреү йәһәтенән ҡарағанда, уҡытыусы - мәктәптә төп фигура. Белем һәм тәрбиә эше бер-береһенән айырылғыһыҙ, тип ҡараным мин үҙем ғүмер буйы һәм яңылышманым, тип уйлайым. Бөгөн мине тәрбиә эшенең яһалма, эш күрһәтеү өсөн генә башҡарылыусы ғәмәлгә әйләнеүе ныҡ борсой. Планға индерелгән бындай сараларҙың бала күңеленә бер ниндәй йоғонтоһо юҡ. Уҡытыусы эш планындағы пункттарға ҡарап түгел, ә үҙ тәртибе менән тәрбиәләй уҡыусыларын, йәғни балаға ҡарата ниндәй мөғәмәлә ҡора, шундай уҡ "яуап" та ала. Мин бер ваҡытта ла балаларға тауыш күтәрмәнем, һәр береһенең яҡшы яҡтарын ғына күрергә тырыштым, уларҙа шәхес саҡҡыларын эҙләнем, һәр береһенең ғаилә хәлдәре менән хәбәрҙар булдым. Кеселеклелек, бәлки, ана шуны тойған бала күңелендә лә яралалыр.

Балалар йортонан йөрөп уҡыусы бер ҡыҙ бала булды класымда. Уларҙың күңел йылылығына ихтыяжы, тәртибе һәм белем кимәле үҙегеҙгә мәғлүмдер. Мин был балаға, башҡалар кеүек, ҡул һелтәп ҡуйманым, айырым иғтибар менән солғаным. Иң мөһиме, күңеленә яҡын һөнәр һайла, шул саҡ хур булмаçһың - теләгән бөтөн нәмәң дә булыр, тип өйрәттем. Өмөтөмдө аҡланы ҡыҙыҡайым: баш ҡалабыҙҙың парикмахер салондарының береһендә уңышлы эшләп йөрөй, уға эләгер өсөн бер ай алдан уҡ яҙылып ҡуялар икән, тип ишетеп ҡыуандым.

Бөгөн мәктәптә уҡыусыларға һөнәри йүнәлеш биреүҙең ни тиклем әһәмиәтле, көнүҙәк булыуы хаҡында һөйләп тороу кәрәкме икән? Һәр баланың ҡыҙыҡһыныуына, һәләтенә, кимәленә, булдыҡлылығына ҡарап, уны теге йәки был һөнәргә ылыҡтырыу, йүнәлеш биреү тормошта уларға үҙ урынын табырға ҙур ярҙам буласаҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

БАШ ЙОРТТА

# ҠОМАРТҠЫЛАР ҘА...

## заманға яраҡлаштырыла

**Өфө ҡалаһы үҙенең ҡабатланмаç архитектураһы менән ҡунаҡтарҙы ла, баш ҡала халҡын да һоҡландыра. Өфөнөң тарихи һәм мәҙәни ҡомартҡылары тигәндә, иң тәүҙә Ленин, Аксаков урамдарындағы биналар күҙ алдына килә. Өфө-2 ҡаласығы, 1890 йылда төҙөлгән Штехерҙар йорто, 1872-1874 йылдарҙа нигеҙ һалынған Уҡытыусылар йорто (бөгөн был йортта Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы урынлашҡан), Пушкин урамындағы Краевский ҡунаҡһарайы һәм башҡа ҡомартҡылар бөгөн ни хәлдә? Уларҙың ваҡыт һәм тәбиғи шарттар һынауын еңелерәк үтеүен ниндәй саралар ярҙамында тәьмин итергә була? Тарихи ҡомартҡыларҙың элекке хәлен тергеҙеү эшен ниндәй замамса технологиялар ярҙамында атҡарау отошлораҡ? Өфө ҡала округы хакимиәтенең Тарихи ҡомартҡыларҙы һәм архитектура һәйкәлдәрен һаҡлау буйынса Йәмәғәт советының сираттағы ултырышында ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап эҙләнде. Кәңәшмәлә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, уның урынбаçарҙары, республика һәм ҡала ведомстволары, төҙөлөш, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, крайҙы өйрәнеүселәр ҡатнашты.**



Пушкин урамындағы 110-сы йорт реставрациянан һуң ошондай күркәм бина төҫөн аласаҡ.

**(Дауамы 4-се биттә).**

*✓ Йәштәр араһындағы бөтөн тәртипһеҙлек ваҡытты бушҡа үткәреүҙән килеп сыға. Бөйөк педагог К. Ушинскийҙың шундай һүҙҙәре лә бар бит: боҙоҡлоҡтоң башы - елғыуарлыҡта.*



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Балалар һәм йәштәр тәрбиәһендә һеҙҙең күҙгә салынған етешһеҙлектәр ниндәй?

***Сабир ЙЫҺАНШИН, 1971-1983 йылдарҙағы республика мәғариф министры:*** Мәктәптәрҙә бөгөн хеҙмәт дәрестәренең булмауын бик ҙур етешһеҙлек, тип иҫәпләйем. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" яңы законда "хеҙмәт"тигән һүҙ бөтөнләй юҡ. Минеңсә, икенсе ҙур етешһеҙлек шул: элек дәрестәрҙән һуң балалар ҡыҙыҡһыныуҙары буйынса төрлө түңәрәктәргә йөрөй, үҙешмәкәр сәнғәт төрҙәре, спорт менән шөғөлләнә, ГТО нормалары тапшыра ине. Авиамоделселәр түңәрәктәре генә лә күпме ососоһы һәм конструкторҙар әҙерләне илебеҙгә! Әйткәндәй, балаларҙа илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү, уларҙың сынығып, сәләмәт үҫеүенә булышлыҡ итеүсе хәрби әҙерлек дәрестәре лә бөтөрөлдө. Унын ҡарауы, йәштәр бөгөн төнгө клубтарҙа күңел асыуҙы өҫтөнөрәк күрә, ә унда, үҙегеҙ белеүегеҙсә, спиртлы эсемлектәр, тәмәке генә түгел, башҡа төр тыйылған һәм шикле "шөғөл"дәргә лә йәлеп итеlә улар. Мин ана шул клубтарҙы ябыу кәрәклеге хаҡында бер нисә тапҡыр яҙҙым Мәскәүгә, ләкин ул саҡтағы мәҙәниәт министры Швыдкойҙан, әгәр уларҙы япһаҡ, тәртип боҙоуҙар артасаҡ ҡына, тигән яуап алдым. Ә бит йәштәр араһындағы бөтөн тәртипһеҙлек ваҡытты бушҡа үткәреүҙән килеп сыға. Бөйөк педагог К. Ушинскийҙың шундай һүҙҙәре лә бар бит: боҙоҡлоҡтоң башы - елғыуарлыҡта.

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Өлкәнәйгән һайын позитив булырға, тирә-йүнемдә күберәк яҡшыны күрергә тырышам, ләкин ошо көйләнешем ихтыярымдан тыш йыш ҡына боҙолоп та ҡуя: йәмғиәттә йәшәйбеҙ бит, ҡайһы саҡ уның көйөнә лә көйләнеп китергә тура килә. Гел генә үҙеңә бикләнеп, "ҡояшлы утрау"ында йәшәп булмай икән. Ә ана шул "утрау"ҙан сығырға мәжбүр иткән сәбәптәрҙең береһе - эргә-тирәләгеләрҙең тәрбиәһеҙлеге. Әйткәндәй, тәрбиә тигәндә, ни эшләптер күҙе-башы буялған, "эт талаған" йыртыҡ джинсы кейеп, шарҡылдашып көлә-һүгенә тәмәке көйрәтеүсе йә һыра һемереүсе ҡыҙҙар күҙ алдыма килә. Ҡыҙҙарҙы юғары идеалдарға, рухи юғарылыҡҡа ынтылышлы гүзәл заттар, саф һәм изгелекле күңелле, иманлы йән эйәләре - буласаҡ әсәләр, һөйөклө ҡатындар итеп тәрбиәләү етешмәй, тимәксемен бөгөн. Иң әрнеткәне - сафлыҡ бөркөлгән наҙлы йылмайыу юғалды ҡыҙҙарыбыҙ йөҙөнән. Йә булмаһа, ундайҙар бик һирәк күренә бөгөн. Балалар һәм үҫмерҙәр тарафынан олоно - оло, кесене кесе итеп күрә белеү ҙә күптән онотолдо. Өлкәндәргә ихтирам булмаған балала уның үҙ ата-әсәһенә, өләсәй-ҡартатаһына ла ихтирам юҡ, тимәк. Ата-әсәһен һанламаған, уларға ҡаршы екеренгән, ярҙам итеү урынына бәләкәй генә йомош үтәүҙән дә ҡасып, гел урам яғын ғына ҡарап торған бер ир бала үҫә әле күршелә лә, ундайҙарҙы алыҫтан эҙләйһе түгел. Әлбиттә, бындай күренештәрҙе ниндәйҙер кимәлдә замана ғибрәттәренә һылтап та ҡарарға була, ләкин матурлыҡ, изгелек, иман төшөнсәләре, минеңсә, мәңге үҙгәрмәй торған, ҡанға, гендарға һалыныр даими "дәүмәлдәр".Тәрбиә мәсьәләһендә күптән инде балалар баҡсаһы, мәктәпкә иҫәп тоторға ярамай икәне көн кеүек асыҡ. Унда хәҙер балаларҙы йүнле генә итеп БДИ тапшырырға әҙерләһәләр ҙә бик хуп. Үҙ балаһын заманының лайыҡлы граждананы, изгелекле, иманлы кеше итеп үҫтереү фәҡәт ғаиләләрҙең генә ҡулынан килә, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮҘЕҢДЕ ҮҘГӘРТ БАШТА!

**Зөһрә ФӘЙЗУЛЛИНА, шағирә, композитор:** "Имен булһын илебеҙ, аяҙ булһын күгебеҙ, көслө рухлы, берҙәм булайыҡ беҙ үҙебеҙ!" тип өндәшәм халҡыма. Шулай булғанда ғына беҙ маҡсатыбыҙға өлгәшәсәкбеҙ. Юғиһә, беҙгә татыулыҡ, берҙәмлек етмәй - тарҡауыраҡбыҙ. Кеше бер-береһен яратырға, ихтирам итергә тейеш. Был шулай уҡ милләт-ара мөнәсәбәттәргә лә ҡағыла. Башҡаларҙың яҡшы һыҙаттарын күреп, үҙебеҙгә һабаҡ, фәһем ала йөрөйөк. Мәҫәлән, ҡытайҙарҙың егәрле булыуы тураһында иҫең китеп һөйләгәнсе, үҙеңә: "Ә нишләп мин улай түгел?" - тигән һорау бирергә кәрәк. Үҙеңдең ғәйебеңде танырға, ниндәй сифаттар етмәүен билдәләргә тырышыу һәр саҡ хуплана. Йәки бына йәһүд халҡына ҡарап: "Улар ниндәй белемле, бер-береһен тарталар, ярҙам итәләр", - тип һоҡланабыҙ икән, беҙ ҙә улар кеүек булырға тырышайыҡ. Иң мөһиме, һәр кем эште үҙенән башларға, үҙен үҙгәртергә тейеш, унан дөйөм йәмғиәт тә үҙгәрер.

Бөгөн беҙгә тәү сиратта балаларыбыҙ тәрбиәһенә иғтибарҙы ныҡ бүлергә кәрәк. Ә беҙ ни эшләйбеҙ? Аяҡ аҫтында йә ҡул араһында буталһа, эткеләйбеҙ, төрткөләйбеҙ, уларҙан тиҙерәк ҡотолорға теләгәндәй, кит тә кит, теймә, бында йөрөмә, тип кенә торабыҙ. Киреһенсә, уларҙы яныбыҙҙа күберәк йөрөтһәк, яҡшыраҡ булыр ине, тип уйлайым. Төрлө байрамдарға үҙебеҙ менән бергә алып йөрөйөк. Мәҫәлән, ниндәйҙер йортҡа килен төшөрәләр икән, шул күренеште бәләкәй ҡыҙҙар мотлаҡ күреп торорға тейеш. Улар бит ошо киленгә ҡарап, буй еткергән ҡыҙҙың матурлығына, нәфислегенә һоҡланып, үҙҙәренә бер тормош һабағы үҙләштерә. Бер яҡтан, был тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булһа, икенсенән, балалар милли йолаларҙы белеп үҫә, уларҙа халыҡ ижадына, ҡомартҡыларға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяна. Ә егеттәргә тәрбиәне атай кеше бирергә тейеш, шул ваҡытта ғына улар ысын ир-уҙаман булып үҫеп етәсәк. Бөтәһе лә Кавказ халыҡтарының улдары тураһында, илһөйәр, рухлы, ҡыйыу, тип ауыҙ һыуы ҡоротоп һөйләй. Ә бына был халыҡтарҙың ир балаларын нисек тәрбиәләүенә иғтибар итегеҙ, уларҙың тәрбиә мәктәбе менән ҡыҙыҡһынығыҙ әле. Уларҙың ҡатын-ҡыҙҙары, беҙҙең әсәйҙәр кеүек, мәктәпте бөткәнсе улдарын итәгенә йәбештереп йөрөтәме икән һуң? Уйланайыҡ, ир-егет ҡорона еткәс тә әсәһе һүҙенән сыға алмаған улдарыбыҙ нисек ихтыярлы, ҡыйыу, рухлы булһын да, ундай "оло бәпес" ҡайһы ҡыҙға кәрәкһен? Шуға күрә, һәр нәмәлә сама беләйек, туғандар.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА яҙып алды.**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле башланды. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

• Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн сентябрҙән **50665** индексны "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән 50673 индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

• Сентябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.



**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

• Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урыныңыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.

• Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.

**Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (540 һум 78 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советын ойоштороу тәртибе тураһында"ғы Федераль законға ярашлы, Лилиә Ғүмәроваға Башҡортостан Республикаһы дәүләт власының башҡарма органынан Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советы ағзаһы вәкәләттәрен тапшырҙы. Указ ҡул ҡуйылған көндән көсөнә инде һәм Федерация Советына ебәрелде.

✓Башҡортостан Хөкүмәте республика Конституцияһының 93-сө һәм "Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте тураһында"ғы Закондың 30-сы статьялары нигеҙендә отставкаға китте. Был туралағы бойороҡҡа республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рәүеф Ноғоманов ҡул ҡуйҙы. Яңы Хөкүмәт 5 октябргә тиклем тупланасаҡ. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтен яңынан төҙөгәнгә тиклем әлегеһенең үҙ бурыстарын үтәүҙе дауам итеүе тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов РФ Хөкүмәте рәйесе урынбаҫары Дмитрий Козак етәкселегендә үткән "Сочи-2014" XIII Халыҡ-ара инвестицион форумда "Рәсәй торлаҡ-коммуналь хужалығы: шәхси инвесторҙар өсөн яңы шарттар" тигән дискуссияла ҡатнашты. Рәсәйҙә был йүнәлештә ышаныслы һәм килемле бизнес алып барыу мөмкинлеге биргән норматив хоҡуҡи база әҙерләнгән. 2016 йылға үҙ бурысын теүәл үтәмәгән предприятиеларҙы шәхси идаралыҡтарға биреү ҡаралған да инде. Рөстәм Хәмитов Торлаҡ-коммуналь хужалығы объекттарын шәхси ҡулдарға биреүҙең үҙенең хәүефле яҡтары булыуы тураһында билдәләне.

✓"Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһендә үткән һайлауҙарға һығымта яһалды. Бүлексәнең секретаре, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев билдәләүенсә, партияның һайлауҙарға сыҡҡан программаһы халыҡ мәнфәғәттәрен ҡайғыртып төҙөлгән. Һайлауҙарҙың һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, халыҡ был партияға ҙур ышаныс белдерҙе. Йыйылыш барышында "Рәсәй әсәләре" Бөтөн Рәсәй хәрәкәтенең төбәк бүлексәһе һәм шәкәр диабеты менән ауырыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлауусы йәмәғәт ойошмаһы менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү ҙә төҙөлдө.

КӨН ҠАҘАҒЫ

**Бөгөн магазин кәштәләре ризыҡтан һығылып тора, йәнең нимә теләй - бөтәһен дә табырға була унда. Араларында ер аяғы ер башынан килтерелгәндәре лә байтаҡ. Ташкент томаттары, Польша, Голландия алмаһы, Аргентина ите, Норвегия балығы, хатта Израиль әнисе менән Ҡытай һарымһағына тиклем бар. Элегерәк төшкә лә инмәгән емеш-еләктең иҫәбе-хисабы юҡ. Кемдер быңдай ризыҡтарҙы яратып ашаһа, икенселәр тәмләп ҡарар өсөн генә аҡсаһын сығара. Сит ерҙең һауаһы ла, һыуы ла икенсе, иҫкән еле лә башҡа төрлө була. Ғалимдар ҙа, үҙ ерендә, үҙ тәбиғәт шарттарында үҫкән ризыҡтың ғына кеше өсөн шифалы, файҙалы булыуын күптән иҫбат иткән. Башлыса ауыл хужалығы менән көн күргән республикала йәшәп тә, магазин кәштәләрен сит ил аҙығы менән тултырыу нимәнән килә һуң?**

# "АЛТЫН ЯМҒЫР" КЕМГӘ ЯУА,

## йәки Импорт тауарһыҙ йәшәй алабыҙмы?



### Һатып алыу отошлораҡмы?

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында илдең агросәнәғәт өлкәһе ҙур зыян күрҙе. Ошо сәбәпле, аҙыҡ-түлек баҙарын сит ил фирмаларының импорт тауарҙары баҫып алды һәм ул сифатһыҙ, генетик модификацияланған аҙыҡ менән тулды. Илдә социаль-иҡтисади тотороҡлолоҡ булдырыуҙа ауыл хужалығының ниндәй әһәмиәткә эйә булыуын сәйәсмәндәрҙең, иҡтисадсыларҙың, ғөмүмән, бөтөн йәмғиәттең ваҡытында аңламауы сәбәпле, был өлкә етди һынылыш кисерҙе: ауыл халҡы демографик көрсөккә терәлде, матди-техник база туҙҙырылды, тупраҡтың уңдырышлылығы кәмене, орлоҡсолоҡ, тоҡомсолоҡ системаһы юҡҡа сыҡты. Рәсәйҙә бөгөн 41 млн гектар ерҙең сәселмәй буш ятыуының сәбәптәре лә нәк ошоға килеп терәлә лә инде. Был, үҙ сиратында, илдең иҡтисади тотороҡлолоғон ҡаҡшатты.

Бөгөн илебеҙ 40-70 процент тауарҙы ситтән индерә. РФ Ауыл хужалығы министры Николай Федоров белдереүенсә, игендең - 1,2, картуфтың - 3, йәшелсәнең - 12, шәкәрҙең - 4,6, үҫемлек майының - 25, һөттөң - 21, емеш-еләктең 60 проценты ситтән һатып алына. Ауыл хужалығы өлкәһендәге иҡтисади көрсөк халыҡты аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙә ҙур проблемалар тыуҙырҙы. Рәсәй ауылдары яҙмышына бер ҡасан да битараф булмаған, хәҙер инде мәрхүм яҙыусы Александр Арцибашев "Столетие" интернет-гәзитенә биргән интервьюһында ошондай миҫалдар килтергәйне: "Элек колхоз, совхоздарыбыҙҙа 17 млн һыйыр булһа, әле ни бары 3 млн. Тоҡомсолоҡ бөтөрөлөп, һөтлөрәк тоҡом тиген ниәттән голштин һыйырҙарына өҫтөнлөк бирелде. Әммә был ниәттәр аҡланманы. Былы элек етештерелгән 60 млн тонна һөт менән бөгөнгө 30 млн тонна һөт күләме асыҡ күрһәтә. Һуңғы йылдарҙа ауыл хужалығын үҫтереү программаһына ярашлы, һөтсөлөктө үҫтереүгә генә 13 млрд һум аҡса бүленгән. Шуға ҡарамаҫтан, һауым, мал һаны йылдан-йыл кәмей. Картуфсылыҡ буйынса ла хәлдәр шәптән түгел. 90-сы йылдарҙа 2 млн гектар ергә картуф сәселһә, бөгөн был һан ун тапҡырға аҙайҙы. Шуға ла 5 млн тонна картуфты ситтән - Израилдән, Польшанан, Белоруссиянан, Мысырҙан алырға мәжбүрбеҙ. Совет заманында ауыл хужалығы өсөн дәүләт бюджетынан 20 процент аҡса бүленһә, бөгөн был һандың ни бары 1 процент ҡына булыуы ла күп нәмәне аңлата".

Килтерелгән миҫалдан ауыл хужалығының ниндәй ҙур юғалтыу кисереүен яҡшы самаларға була. Нәк шул арҡала илебеҙ ҡош, суҡа һәм һыйыр итен ситтән һатып алыу буйынса донъяла беренсе, икенсе, өсөнсө урында тора. Ә инде контрабанда юлы менән индерелгән 300 мең тонналай ит был иҫәпкә бөтөнләй инмәй. Һүҙ ҙә юҡ, итте анһат ҡына етештереп булмай. Уны ризыҡ иткәнсе әллә күпме көс, тырышлыҡ һәм, әлбиттә, сығымдар һалырға кәрәк. Үҙ халҡын туйындырыу, сит илдән импорт продукт һатып алмау өсөн Рәсәй бер кешегә бер тонна иген етештерергә тейеш. Йәғни, элекке кеүек, 100 млн тонна түгел, 140 млн тонна иген талап ителә. Шуға күрә барыһын да сит илдән һатып алыу отошлораҡ, тиеүселәр ҙә бар.

### Үҙебеҙҙе үҙебеҙ туйҙыра алабыҙмы?

Һуңғы 5-6 йылда ил Президенты импорт бәйлелегенән ҡотолоуҙы талап итһә лә, быны тормошҡа ашырыу юлдары әлегә аныҡ билдәле түгел. Дәүләт бөгөн аграр өлкәне нисек тергеҙергә, тип баш вата. "Ауыл хужалығын үҫтереү" кеүек проекттар, төрлө маҡсатлы программалар ҡабул итә. Дөрөҫ, ҡапыл ғына үҙебеҙҙекен етештерә башлау ҙа мөмкин түгел. Тәү сиратта, кәрәкле өлкәләрҙең емереклеге ҙур кәртә буласаҡ, ти сәйәсмәндәр. "Бөгөн төп мәсьәләләрҙең береһе - үҙебеҙҙә үҫтерелгән продукцияны нисек һәм ниндәй хаҡҡа һатыу, осһоҙло импорт тауарға конкуренция булдырыу. Республикабыҙҙа унар йыллыҡ тәжрибә һөҙөмтәһендә үҫтерелгән яҡшы сортлы алмаларыбыҙ, груша, сливаларыбыҙ була тороп, импорт алмаһын һатыуыбыҙ, Бүҙәк консерва заводын ситтән килтерелгән сеймал менән тәьмин итеүебеҙ ҙә насар. Республика баҙарҙары, магазиндары үҙебеҙҙең продукция менән генә тулы булырға тейеш", - тип белдергәйне Башҡортостан Президенты Рөстәм Зәки улы ла.

Былтырғы йыл һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, беҙ икмәк ризыҡтары етештереү буйынса Рәсәйҙә - 14-се, һөт һауыу буйынса 2-се урында торһаҡ, һөт продукттары етештереү буйынса ни бары 10-сы урында ғына киләбеҙ. Был иһә үҙ продукциябыҙ менән эш итә белмәүебеҙҙе күрһәтә. Илгә индерелгән аҙыҡ-түлекте таможнянан үткәреү, уны ил сигенән магазин кәштәһенә тиклем еткереү, пошлина түләү өсөн дә күп сығым китә. Үҙебеҙ үҫтергән йәшелсә-емеш эргәлә генә, баҙарға сығар ҙа һат, тәү ҡарамаҡҡа артыҡ сығымдар ҙа юҡ кеүек... Шулай ҙа өҫтөнлөк сит ил етештереүселәрендә ҡала. Роспотребнадзор ситтән индерелгән продукцияны йыш ҡына бракка сығарып торһа ла, импорт тауарға бәйлелек йылдан-йыл арта бара. Аграр баҙар институты мәғлүмәттәре буйынса, 1990 йылдарҙа импорт кимәле 15 процент булһа, бөгөн ул 4 тапҡырға үҫкән. Әле илебеҙгә сама менән аҙыҡ-түлектең 65 проценты ситтән индерелә.

Был һан Рәсәйҙең Бөтөн донъя сауҙа ойошмаһына инеүенән һуң тағы ла үҫә төштө, ти сәйәсмәндәр. Төрлө тикшереүҙәргә сыҙамай, бөтөн илдәр ҙә беҙгә тауар сығарыуҙан баш тартһа, нимә булыр ине? Ҡайһы бер аҙыҡтар буйынса "импорт энәһендә" ултырыуыбыҙҙы иҫәпкә алһаҡ, Рәсәйҙең үҙ халҡын ашатырға хәленән килерме?

"Импорт тауарға мохтажлыҡ кисереү - гонаһ. Әлегә емеш-еләге, бәшмәге булған урмандарыбыҙ, буш ятҡан ерҙәребеҙ, әҙме-күпме малыбыҙ, эсәр һыу запасыбыҙ, көрәк менән эшләп булһа ла үҙен туйындырған хужалыҡтарыбыҙ бар. Эйе, күп тауарҙы ситтән алабыҙ, шулай ҙа уның өстән ике өлөшө - үҙебеҙҙеке. Шуға күрә, сит ил беҙгә импорт сығарыуҙан баш тартҡан осраҡта ла хәүеф юҡ. Бынан улар үҙҙәре генә зыян күрәсәк. Беҙгә бөтә иғтибарҙы ауыл хужалығын үҫтереүгә йүнәлтеү генә кәрәк", - ти белгестәр.

### Тауыҡ боттары "алтын ямғыр" яуҙыра

Рәсәй кәштәләрендә сит ил продукцияһының күбәйеүендә сауҙа селтәрҙәренең дә өлөшө ҙур. "Финэкспертиза" ойошмаһының генераль директоры Агван Микаэлян билдәләүенсә, илебеҙҙәге ваҡлап һатыу сауҙаһының яртыһы тиерлек улар ҡулында. "Был селтәрҙәр тауар менән тәьмин итеүсе тотороҡло эре компаниялар менән генә эшләүҙә хуп күрә. Рәсәйҙә уларҙың бармаҡ менән генә һанарлыҡ булыуынан бөтә юлдар ҙа көнбайыш брендтарына барып төртөлә. Шуға күрә, ваҡ етештереүселәр менән эшләүҙе талап итеп, ниндәй генә саралар күрһәк тә, был объектив фактор", - тип һанай А. Микаэлян. Уның белдереүенсә, ауыл хужалығын тейешенсә үҫтерә алмау ҙа импортҡа мохтажлыҡ тыуҙыра. "Аграрийҙарҙы үҫтереү өсөн кредит процентарының юғарылығы, кадрҙарҙың, дәүләт ярҙамының етешмәүе, етештереү күләмдәренең, хеҙмәт етештереүсәнлегенең түбән булыуы ҙур кәртә булып тора. Беҙ заманса агротехнологияларҙы шул тиклем насар файҙаланабыҙ, хатта көнбайыштыҡынан күпкә осһоҙ булған ресурстарыбыҙ ҙа илдә етештерелгән тауарҙың конкуренцияға һәләтен булдыра алмай", - ти "Финэкспертиза" етәксеһе.

(Дауамы 12-се биттә).

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Юғары квалификациялы эшселәр, хеҙмәткәрҙәр әҙерләү программаһы йүнәлешендә эшләүсе һөнәри белем биреү учреждениеларында уҡыған иң һәләтле, әүҙем студенттар араһында Башҡортостан Хөкүмәте стипендиаттары билдәләнде. Шулай уҡ Мифтахетдин Аҡмулла менән Мостай Кәрим исемендәге стипендиялар лауреаттарының исемдәре билдәле булды. БР Хөкүмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, М. Аҡмулла исемендәге стипендия Башҡортостан халыҡтары телдәрен өйрәнеү буйынса ғилми эшмәкәрлек менән шөғөлләнгән студенттарға тапшырыла. Мостай Кәрим исемендәге стипендия менән БДУның әҙәбиәт өлкәһендә уңыштарға өлгәшкән филолог-студенттары билдәләнә.

✔ Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналған "Еңеү салюты" Бөтөн Рәсәй халыҡ ижады фестивалендә республика вәкилдәре лә ҡатнашты. М. Кәримдең әҫәрҙәре буйынса әҙерләнгән театрлаштырылған программа (режиссеры - Р. Хәкимов) икенсе дәрәжә дипломына лайыҡ булған. Башҡортостандан шулай уҡ "Уралтау" вокаль-инструменталь төркөмө (Ейәнсура районы), "Мағаш" халыҡ ҡурайсылар ансамбле (Ғафури районы), Илдар Жамалов (Учалы районы), "Ете ырыу" халыҡ бейеүҙәре ансамбле (Сибай ҡалаһы) сығыш яһаны.

✔ Стәрлетамаҡ районында тәбиғәт ҡомарткыһы - Йөрәктау эргәһен таҙартыу буйынса ике көнлөк өмә уҙҙы. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, унда 70-тән ашыу кеше ҡатнашты. Дөйөм көс менән ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонына 12 кубометр сүп-сар сығарылып түгелде. Йөрәктауҙа төп һаҡлау объекттары - ул "Башҡортостан Республикаһының Ҡыҙыл китабы"на индерелгән һирәк осрай торған үҫемлектәр. Бынан тыш, айырым һаҡлауҙы талап иткән бөжәктәр бар.

✔ Республикала йыл дауамында бишенсе тапҡыр яғыулыҡтың популяр маркаларына хаҡтар күтәрелде. "Премиум Евро-95" бензины 50 тингә артып, хәҙер литры 34,8 һум тора. "Регуляр Евро-92" (31,3 һум) һәм "Atum-92" (31,8 һум) маркалары 60 тингә, "Нормаль-80" (30,5 һум) - 50 тингә артҡан. "Супер-98" бензины һәм "Евро" яғыулығының хаҡы үҙгәрмәгән.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЙЫЛЫНАБЫҘ!

**Өфөлә йылытыу миҙгеле башланды: йылы балалар баҡсаларының 70 һәм мәктәптәрҙең 60 процентына ебәрелгән. Ошо арала социаль объекттарға йылы биреү буйынса эштәр тамамланасаҡ.**

Күп фатирлы йорттарҙа торлаҡ хужалары үҙ аллы йылы биреү көнөн билдәләй ала. Быныҡ өсөн торлаҡ хужаларының дөйөм йыйылышында тейешле ҡарар ҡабул ителергә тейеш, һуңынан протоколды үҙҙәренең идара итеүсе компанияларына йүнәлтергә кәрәк һәм нәҡ ошо ғариза нигеҙендә ресурс менән тәьмин итеүсе ойошма йылылыҡ энергияһын ебәрә башлаясаҡ.

Өфө Торлаҡ хужалығы идаралығы директоры Рәил Мирхәйҙәровтың мәғлүмәте буйынса, үткән аҙнала бындай ғаризалар ҡабул ителмәгән. Әлеге ваҡытта йылытыу миҙгелен башлау тураһындағы норматив-хоҡуҡи актҡа ҡул ҡуйылған. Өфө йорттарына йылы аҡрынлап бирелә башлаясаҡ.

## ЯҢЫ ТРОЛЛЕЙБУС ЛИНИЯҺЫ

**Баш ҡала урбанистары Һупайлы менән Инорс биҫтәләрен тоташтырыусы яңы троллейбус линияһын үҫтереүҙе тәҡдим итә. Улар фекеренсә, миллионлы ҡалала тап трамвай һәм троллейбус перспективалы транспорт төрө булып тора.**

Баш ҡаланың транспорт инфраструктураһын тикшереү халыҡтың кәрәкле объектҡа барып етеү өсөн бик күп ваҡыт юғалтыуын билдәләй. Яңы маршруттар асыу ошо өлкәләге көсөргәнеште бер аҙ кәметеү мөмкинлеген бирәсәк.

Әлеге ваҡытта Һупайлы - Инорс маршрутын асыуға техник мөмкинлектәр бар: Сельская Богородская урамында электр транспорты йөрөү өсөн шарттар тыуҙырылған. Яңы маршрут асылһа, көндән-көн үҫкән Инорс биҫтәһе халҡы Менделев урамына Черниковка аша түгел, ә туранан йөрөү мөмкинлеген аласаҡ.

## ТӨП ПРИЗ - АВТОМОБИЛЬ!

**Өфө ҡала хакимиәте "Йәш ғаилә - 2014" ҡала конкурсын уҙғара. Уның финалы һәм гала-концерты 15 октябрҙә үтәсәк.**

Башҡа йылдарҙағы кеүек үк, сараның маҡсаты булып ғаиләнең йәмғиәттәге ролен күтәреү, абруйын арттырыу, йәш ғаиләләрҙең нығыныуы өсөн шарттар булдырыу, сәләмәт тормошто пропагандалау, физик культура һәм спорт менән шөғөлләнеүҙе популярлаштырыу тора.

Сарала Өфөлә йәшәүсе һәм эшләүсе, 35 йәшкә тиклемге йәш ғаиләләр ҡатнаша ала (балалары 5-14 йәштә булырға тейеш). Һәр ғаилә "Ғаиләм - байлығым!" тип аталған күргәҙмә-презентация әҙерләй. Уның ғаилә альбомынан алынған фотоларҙан тороуы һәм тарихи факттарҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, ҡыҙыҡһыныуҙарҙы, шөғөлдәрҙе сағылдырыуы мөһим. Күргәҙмә-презентация менән таныштырыу үҙенсәлекле тамаша формаһында үтә. "Ғаилә булыу сәнғәте" визиткаһында ғаилә тураһында мәғлүмәт булырға һәм музыкаль номер күрһәтелергә тейеш. Сығыш яһау өсөн сәхнә костюмдары булыуы мотлаҡ. "Яңы быуын таланттары!" балалар ижадын сағылдыра. Унда балалар үҙ һөнәрен күрһәтәсәк. Уларға ғаилә ағзаларының йәки башҡа кешеләрҙең ярҙамы рөхсәт ителә. "Бирәү - барыһы өсөн, барыһы - бирәү өсөн!" өйгә эше сәнғәттең төрлө төрөндәге: хореография, вокал, нәфис һүҙ, театр һ.б. һәләттәрҙе асыҡлаясаҡ. Бында туғандарҙы йәлеп итеү мөмкин, әммә профессиональ коллективтарҙы саҡырыу тыйыла. Кандидаттарҙың анкеталарын ҡала районларының йәштәр сәйәсәте буйынса комитеттары туплай.

Быйыл йәш ғаиләләрҙең төп приз - автомобиль эйәһе булыу мөмкинлеге бар. Өҫтәүенә, еңеүсе ғаилә республика конкурсында ҡатнашыу хоҡуғын яулаясаҡ.

БАШ ЙОРТТА

# ҠОМАРТҠЫЛАР ҘА...

## заманға яраҡлаштырыла



(Башы 1-се биттә).

Ултырышты асып, Ирек Ишмөхәмәт улы быйыл реставрация ла, төҙөлөш тә ауырлыҡ менән атҡарылыуын билдәләне, кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙы бергәләп фекер алышырға саҡырҙы:

- Йә беҙ бюрократик реформалар һаҙлығына батасаҡбыҙ, йә кәңәшләшеп, аҡыллы ҡарарға килеп, артабан эшләйбеҙ, - тине ул. - Бөгөн баш ҡалала яңы төҙөлөш объекттары ҡалҡып сыға, ҡала төҙөкләндерелә, йүнәтелә, реставрациялана. Реставрацияларҙың ниндәй күләмдә һәм ниндәй кимәлдә барыуы тураһында аныҡ ҡына итеп әйтеп булмай әле. Йыш ҡына тарихи әһәмиәткә эйә биналарҙың ҡайһы бер элекке элементтары юҡ ителә, төҙөкләндереү, реставрация эштәре насар сифатта эшләнә. Объекттарҙы һыуланыуҙан, бурһыуҙан, сереүҙән һаҡлау маҡсатында күп кенә боронғо йорттарҙың элекке буяуҙарын ҡуптарып, һоро төҫ менән буяттырҙыҡ. Был буяу ул йорттарҙы артабан тәртипкә килтереүҙең төүге аҙымы, ваҡытлыса сара. Ирек Ишмөхәмәт улы шулай уҡ элекке йорттарҙың ҡайһы берәүҙәрендә, мәҫәлән, Гоголь урамындағы 13-сө йортта йәшәү шарттарының ҡот осҡос булыуын, ул йорттарҙа йәшәүселәрҙе яңы йорттарға күсереүҙе тиҙләтеү кәрәклеген дә һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Фекер алышыу барышында, был хаталар тейешле кимәлдәге тәжрибәле белгестәр етмәүҙән килеп сыға, тигән фекер йыш ҡабатланды. Шулай уҡ, күптәр бөгөнгө оҫталарҙың да квалификацияһын яҡшыртыу зарурлығын кәрәк тип тапты. Һөйләшеүҙе йомғаҡлап, Ирек Ишмөхәмәт улы бергәләп эшләүҙең яҡшы һөҙөмтәләр биреренә ышанысын йәшермәне, артабан да шулай тығыҙ хеҙмәттәшлек итеп эшләү, тарихи ҡомартҡыларҙа эшләргә теләүсе инвесторҙар йәлеп итеү кәрәклегенә баҫым яһаны. Беҙ сарала ҡатнашыусыларҙан фекерҙәре менән уртаҡлашыуын һораныҡ.

**Данир ҒӘЙНУЛЛИН, БР Мәҙәниәт министрлығының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры:** Өфө ҡалаһының тарихи йөҙөн һаҡлау, ысынлап та, бик ауыр һәм ентекле ҡараш талап иткән эш. Элекке биналарҙың реставрацион проекттарын эшләү, уларҙы элекке хәленә килтереү - ул беҙҙең быуындың бурысы, тип һанайым. Бөгөнгө сараның әһәмиәте лә шунда: әлеге ваҡытта Өфө ҡалаһы ШОС, БРИКС саммиттарын үткәреү алдынан күп ремонт эштәре алып бара. Шуға ла тарихи объекттарға зыян килтереүҙән һаҡланырға кәрәк. Ҡала округы хакимиәте башлығы тарафынан бик матур итеп: "Бөтөн тарихи биналарҙы ла беҙ нисек булған, шул ҡиәфәттә ҡалдырып, музей формаһында ҡуллана алмайбыҙ", - тип әйтелде. Ысынлап та, 73-сө федераль законда "реставрация" һәм "заманға яраҡлаштырыу" тигән төшөнсәләр бар. Беҙҙең проекттарҙың бөтәһендә лә заманға яраҡлаштырыу ынтылышы ярылып ята. Бөгөнгө ҡала кешеләре был биналарҙы ҡулланып, уның мәнфәғәтен, файҙаһын күреп йәшәргә тейеш. "Элек шулай булған", тип кенә киң мәғлүмәт сараларында ҡысҡырып йөрөү - ул "буш" кешеләр шөғөлө, миңә ҡалһа. Ә ошо объекттарҙы төүге ҡиәфәтенә килтереп, заманға яраҡлаштырыу - ҙур фәнни эш.

**Рөстәм ӘЛИБАЕВ, БР Мәҙәниәт министрлығының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенең әйҙәүсе архитекторы:** Бөгөнгө кәңәшмәлә беҙгә, реставрация менән шөғөлләнеүселәргә, күп һорауҙар бирҙеләр. Бер йорттоң кирбесе һыуланып, буялған килеш "тын алмай" серегәйне, бөгөн шуны тергеҙеү тураһында кәңәшләштек. Яңынан кирбес диуар күтәреү күп сығымдар талап иткәнгә күрә, бинаның тышына декоратив кирбес һүрәте һыҙып, элекке стилдәге йортто һынландырырға кәрәк, тигән тәҡдим яһаныҡ. Ултырышта ҡатнашыусылар бындай йорттарҙың ифрат күп булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм был ысулды яраҡлы тип тапты.

Эшебеҙ тәртибенә килгәндә, бөтөн проекттар ҙа ентекле тикшереү үтә. Уларҙың күбеһен хәл иткәндә төрлө яҡлап ҡарарға, төрлө фекерҙәрҙе күҙ уңында тоторға тура килә. Беҙҙең эшебеҙ күптәргә оҡшай. Ә кемгәлер оҡшамай икән - был да тәбиғи. Мәҫәлән, бөгөн бер йорттағы баҫҡыстың ҡорос таяуҙары тураһында һүҙ булды. 19-сы быуатта төҙөлгән бинаның эсендәге баҫҡыстың таяуҙарын совет осоронда бер тапҡыр яңыртҡан булғандар. Беҙ уны тағы ла матурыраҡ итеп яңырттыҡ. Бөгөн килеп, ҡайһы берәүҙәр беҙҙән баҫҡыс таяуҙарының элекке вариантын кире ҡайтарыуыбыҙҙы һорай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был баҫҡыстарҙың төүге варианты һаҡланып ҡалмаған.

Беҙҙең эштә финанс ярҙамһыҙ ҙа булмай. Ирек Ишмөхәмәт улы, инженер булараҡ, был тармаҡты яҡшы белә. Ул бик дөрөҫ әйтте - йәмәғәтселек был объекттарҙы төҙөкләндереү эшенә нык ҡыҫылып, уның теге йәки был яғын оҡшатмай һүҙ йөрөтә башлаһа, инвесторҙар ҡасып бөтәсәк. Ә муниципалитет үҙе генә реставрацияны тейешле кимәлдә финанслай алмай. Реставрация эшен автоматлаштырыу мөмкин түгел. Ҡул менән эшләйбеҙ. Шуға ла беҙгә юрғанға ҡарап аяҡ һуҙырға тура килә лә инде.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостандың 12 мәктәбе 2013-2014 уҡыу йылында Рәсәйҙең иң яҡшы 500 белем биреү усағы исемлегенә ингән. Улар араһында Мәләүездең 3-сө гимназияһы, Өфөнөң 3-сө, 39-сы, 93-сө гимназиялары, 83-сө, 153-сө лицейҙары, Стәрлетамаҡтың 1-се гимназияһы, Ишембайҙың 12-се лицейы, Белореттың 17-се гимназияһы, Туймазының 2-се мәктәбе, Октябрскийҙың 2-се гимназияһы бар.

✓ Өфөлә 8 октябрҙә ШОС илдәре йәштәре инновацион форумы сиктәрендә Волга буйы федераль округы йәштәр парламенттары етәкселәренең семинар-кәңәшмәһе үтәсәк. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа депутаттар, министрлыҡ һәм ведомстволар, йәштәр ойошмалары, шулай уҡ ШОС илдәре вәкилдәре ҡатнашыуы көтөлә. Уның барышында Волга буйы округында йәштәрҙең ғилми берләшмәләре һәм инновацион үҫеш мәсьәләләре ҡараласаҡ.

✓ Өфө Электр транспорты идаралығы "Йополис" интернет-платформаһында социаль һорау алыуҙар үткәрә. Өфөләр онлайн-режимда ҡаланың трамвай һәм троллейбустарында йөрөү хаҡын билдәләү буйынса үҙенең тәҡдимен индерә йәки алдан әҙерләнгән яуаптарҙың береһен һайлай ала. Һорау алыуҙа төп 4 пункт билдәләнгән: юл хаҡы күпме булырға тейеш? Әгәр ҙә трамвай менән троллейбустарҙа түләүһеҙ Wi-Fi булһа, уларҙа йөрөүсе кешеләр иҫәбе артасаҡмы? Wi-Fi булған вагондарҙы махсус стикер менән билдәләргә кәрәкме? Билдәле бер арауыҡ эсендә трамвай менән троллейбус хеҙмәте менән ҡулланыу мөмкинлеге биргән берҙәм билет индереү кәрәкме?

✓ Баш ҡалала "Башҡортостан продукттары" тип аталған яңы магазин асыласаҡ. Унда республика етештереүселәре әҙерләгән ит һәм ит-колбаса ризыҡтары, һөт һәм һөт ризыҡтары, икмәк, кондитер изделиелары, он, ярмалар һатыласаҡ. Һатып алыусыларға милли ризыҡтар - ҡаҙылыҡ, ҡаҡланған ҡаҙ, ҡымыҙ, бал тәҡдим ителә. "Башагропродукт" базаһында булдырылған магазинда хаҡтар ҙа юғары булмаясаҡ.

✓ БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 4 октябрь - Ҡорбан байрамы, 11 октябрь - Республика көнө шәмбегә - ял көнөнә тура килә. 4 октябрҙәге ял көнө - 6 октябргә, 11 октябрь 13-енә күсерелә. Шулай итеп, республикала ял көндәре булып 4, 5, 6 һәм 11, 12, 13 октябрь иҫәпләнә.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Баш ҡалала үткән "Балалар өсөн бергәләп" V Бөтөн Рәсәй күргәҙмә-форумына илебеҙҙең 62 өлкәһенән делегаттар йыйылды. Ғаиләкиммәттәрен һаҡлау, балалар хоҡуғын яҡлау, ауыр тормош шарттарында йәшәүсе балаларға ярҙам итеү буйынса төрлө яңы технологиялар, проекттар күргәҙмәһенән тыш, форум сиктәрендә "Уҡытыу-тәрбиә эштәрен ойоштороуҙа ата-әсәләр йәмғәтселегенең роле" тип аталған түңәрәк ҡор ҙа уҙҙы.**

# АТА-ӘСӘ ҺӘМ МӘКТӘП

Түңәрәк ҡорҙа белем биреү учреждениелары эшенә ата-әсәләрҙе йәлеп итеү мәсьәләһе, уҡытыусыларҙың абруйын күтәреү, өлгөлө ғаиләләр тәжрибәһен пропагандалау, ҡарарҙарҙы коллектив рәүештә ҡабул итеүҙең мөһимлеге тураһында һүҙ барҙы. Баш ҡаланың төрлө белем биреү учреждениеларының ата-әсәләр комитеты рәйестәре был өлкәләге тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Рөстәм Ибәтуллин барыһына ла Өфө ҡалаһының 39-сы гимназияһында "Утыҙ туғыҙынсы параллель" тип исемләнгән йәмғәт хәйриә фонды ойоштороуҙары, уның эшендә гимназияла уҡыған һәр баланың ата-әсәһе әүҙем ҡатнашыуы тураһында һөйләне. Шулай уҡ, был гимназияла ата-әсәләр комитеты эше лә яйға һалынған, гимназиялағы һәр етди үҙгәрештәр буйынса һорауҙар уртаға һалып хәл ителә, бер кемдең дә фекере иғтибарһыҙ ҡалдырылмай.



Сарала "Ғаиләгә социаль ярҙам күрһәтеү һәм ғаилә ҡиммәттәрен яҡлаусы ата-әсәләрҙең милли берекмәһе" Дөйөм Рәсәй йәмғәт ойошмаһының яуаплы сәркәтибе Алексей Гусев та ҡатнашты. Битараф булмаған кешеләрҙе йәлеп итеп, ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеү, ата-әсәләр һәм балаларҙың мәнфәғәтен яҡлау, йәмғәт һәм дәүләт структуралары араһындағы бәйләнештәрҙе нығытыу, Рәсәйҙең граждандарҙың йәмғиәтен үҫтереү йүнәлешендә эшләүсе ойошманың вәкиле Ҡала һәм республика ата-әсәләр комитеты рәйесе Анатолий Горячев һәм Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазованың сығыштарын тыңлағандан һуң, уҙ фекерҙәре менән бүлеште:

- Элек педагогиканан алыҫ торған ябай кешеләр ҙә тәрбиә мәсьәләләренә арналған баҫмалар, китаптарҙағы кәңәштәрҙе файҙаланып, балаларын лайыҡлы итеп үҫтерә ине. СССР заманын күпме тәнҡитләһәк тә, бөгөн яңы Рәсәй мәктәптәрендә баланың психологик тәрбиәһе өлкәһендә эш тейешенсә яйға һалынып бөтмәгән. Ғаиләләр бик йыш тарҡала, балалар ҡарауһыҙ ҡала, әхлаҡ тәрбиәһе етмәй, балалар баҡсаһы һәм мәктәп етәкселәре менән ата-әсәләр араһындағы мөнәсәбәттәр ҡырҡыулашып китә. Быларға хатта ябай ғына ғаилә мөнәсәбәттәре мәҙәниәтенең булмауы, кешеләрҙең бер-берһен аңларға тырышмауы, һәр кем үҙе һәм яҡындары алдында яуаплылыҡ тоймауы сәбәпсе, - тип һөйләне Алексей Владимирович әсенеп.

Бөгөнгө көндә ата-әсәләр белем биреү учреждениеларының эшендә әүҙем ҡатнаша, уҡыу пландарын төҙөгәндә лә, дәрестәр теҙмәһен эшләгәндә лә, мәҙәни-спорт сараларынан да ситтә ҡалмай. Әммә түңәрәк ҡорҙа сығыш яһаусылар фекеренсә, был ғына етмәй, ата-әсәләр мәктәп етәкселеге дөйөм уҡыу йылына йомғаҡтар яһағанда ла уҙ һүҙен, уҙ кәнәшен әйтергә тейеш. Был белем биреү учреждениеһы хеҙмәткәрҙәренең дә, ата-әсәләрҙең дә яуаплылығын арттырасаҡ, уҡытыу-тәрбиә эшен һөҙөмтәлерәк итәсәк, ти улар.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ХӘЛЕБЕҘ ЯҠШЫРАҠ

**Баш ҡалала "Мәктәпкә тиклемге белем биреү системаһы: бөгөнгө торошо һәм үҫеш перспективалары" халыҡ-ара конференцияһы үтте. Уның пленар өлөшөндә БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова, Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Мәғариф, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты рәйесе Эльвира Айытҡолова, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, Ҡытай, Ҡырғыҙстан һәм Саха-Яҡут республикаларынан килгән делегаттар ҡатнашты.**

"Балалар баҡсаһына йылдар буйына сиратта тороп, мәктәпкә барырға ваҡыт етте", - тигән шаярыу һүҙҙәре бөгөн әһәмиәтен юғалта төштө. Башҡортостанда 2014 йылдың 1 ғинуарына ҡарата йөмғеһе 1630 мәктәпкә тиклемге белем биреү ойошмаһы эшләй. Республика буйынса 2008-2012 йылдар эсендә 44870 балаға урын бирелгән. 2010 йылда балалар баҡсаһына 65 мең сабый сиратта торһа, бөгөнгө көндә был һан 14 меңгә тиклем кәмегән. Республикала шәхси балалар баҡсаларын үҫтереүгә лә иғтибар бүленә, әммә әлегә уларҙың һаны ҙур түгел.

Ә бына Ҡытайҙың Хефей ҡалаһында, киреһенсә, йөмғеһе 768 балалар баҡсаһының 602-һе шәхси ойошмалар ҡулында. Шулай ҙа конференция барышында ниндәй генә һандар, статистикалар миҫалға килтерелһә лә, Ҡырғыҙстан Республикаһында ундай учреждениеларҙа балалар һаны норманан 2-3 тапҡырға күп булыуы, 25-30 сабый урынына бер төркөмдә 60 бала тәрбиәләнеүен ишеткәндән һуң, юҡҡа ғына, уҙ хәлеңде беләм тиһәң, күршеңдән һора, тимәгәндәр шул, тигән хәкиҡәтте ҡабатларға мәжбүр булаһың. Мәктәпкә тиклемге белем биреү системаһы беҙҙә һаман тейешлесә яйға һалынмай, тип күпме һөйләнһәк тә, хәлебеҙ арыу ғына икән...

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

# БОЙОРОҠ МЕНӘН ГЕНӘ

**Беҙҙең районда яңы янғын һүндереүсе эшләй. Ул аҙна һайын тиерлек баҡса биләмәһенә килеп тикшереүҙәр үткәрә. Бындай тикшереүҙәрҙең ниндәйҙер нормативтары бармы?**

- Әлбиттә, янғын хәүефһеҙлеген тикшереү нормативтары бар. Улар тикшереүҙең планға ярашлы һәм пландан тыш булыуына ҡарап айырыла. Планға ярашлы тикшереүҙәр бинаның йәки ҡоролманың эксплуатацияға индерелеү ваҡытынан йәки уларҙың янғын хәүефһеҙлегенең функционал класы үҙгәртелеү мәленән өс йыл уҙғас үткәрелә. Шулай уҡ һуңғы планға ярашлы тикшереүҙән һуң өс йыл үткәс тә бындай саралар уҙғарылыуы мөмкин. Ағымдағы йылда ниндәй баҡса биләмәләрендә тикшереү уҙасағын plan.genproc.gov.ru/plan2014 сайтында ҡарарға мөмкин.

Пландан тыш тикшереү уҙғарыу өсөн янғын һүндереү органы теге йәки был ойошмаға (баҡса биләмәһенә) янғын хәүефһеҙлегенә ҡағылышлы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү тураһында биргән әмерҙең ваҡыты сығыуы йәки янғын хәүефһеҙлеген боҙоу тураһында мәғлүмәт (ялыу) алыу нигеҙ булып тора.

Пландан тыш тикшереүҙәрҙең күләме сикләнмәгән. Һәр тикшереү янғын һүндереү органы етәксеһе бойороғо нигеҙендә генә башҡарыла. Унда тикшереү уҙғарыуҙың сәбәптәре һәм ваҡыты, шулай уҡ уны уҙғарыусының исем-шәрифе күрһәтелергә тейеш. Бойороҡтоң күсермәһе мотлаҡ рәүештә баҡса рәйесенә тапшырыла. Әгәр ҙә янғын һүндереү инспекторы тейешле бойороҡто күрһәтмәһә йәки закон тарафынан ҡаралған башҡа талаптарҙы үтәмәһә, тикшереү һөҙөмтәләре юғары органда йәки судта кире ҡаралырға мөмкин.

# ШУЛАЙ АЛДАЙҘАР

**Интернет селтәрендә матурлыҡ салоны тәҡдим иткән купон һатып алдым. Акцияға ярашлы, 500 һумлыҡ купон сәсте ҡырҡыуға һәм буяуға мөмкинлек бирә ине. Ләкин һөҙөмтә шундай: буяуҙары ла, ҡырҡыуҙары ла миңә оҡшаманы. Дәғүәмде белдергәс, "Осноҙ ғына хаҡҡа һеҙ нимә күрергә теләгән инегеҙ һуң?" тип кенә яуап бирҙеләр. Был осраҡта мин нимә эшләй алам?**

- Күрһәтелгән хеҙмәт өсөн ниндәй юл менән түләү - интернет аша һатып алынған купон-сертификат ярҙамындамы, әллә салон кассаһындамы - бер ниндәй әһәмиәткә эйә түгел. Матурлыҡ салонында хеҙмәтләндереү һәр осраҡта ла сифатлы булырға тейеш. Клиенттары өсөн ниндәйҙер акция уҙғарғанда салон ҡулланыусыларҙы уның барлыҡ шарттары менән дә таныштырырға бурыслы. Был "Ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау тураһында"ғы закондың 10-сы статьяһында билдәләнгән. Әгәр ҙә был талап үтәлмәһә, клиент күрһәтелгән хеҙмәттең барлыҡ етешһеҙлектәрен бушлай бөтөрөүҙе, хаҡтың яртыһын төшөрөүҙе, етешһеҙлекте икенсе салонда төҙәттергән өсөн сығымдарҙы ҡаплауҙы талап итергә һәм түләнгән хаҡты кире ҡайтарыуҙы талап итергә хоҡуҡлы. Быны өсөн салонға яҙма дәғүә ебәрергә кәрәк. Улар һеҙгә 10 көн эсендә яуап ҡайтарырға бурыслы. Шулай уҡ хоҡуҡ боҙолоу хаҡында Роспотребнадзорға ла хәбәр итеү урынлы буласаҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Полиартрит

❖ 1 стаканға 1 ҡап тегеү энәһе, икенсеһенә 1 сей йомортҡа һалып, өҫтөнә 70 проценттлы һеркә эссенцияһы ҡойорға. Энәләр (ҡыҙыл төҫкә инеп) ҙә, йомортҡа (һары төҫтәге буткаға әйләнеп) ла иреп бөткәс, икеһен бергә ҡушырға. Дарыу тирене яндырмаһын өсөн 1 аш ҡалағы аҡ май һәм арыш оно өҫтәргә. Әҙер дарыуҙы һыуытҡыста һаҡларға. Төнгә ҡарай ауыртҡан быуындарға һөртөргә.

## Ҡауын ашағыҙ

❖ Аҙ ҡанлылыҡтан ҡауын ҡотҡарыр. Ул ҡанды ла таҙалай. Ҡауын күпләп өлгөргән миҙгелдә дауаланып ҡалыу яҡшы. Орлоғон ташламайынса, сәйгә һалып эсегеҙ.

## Үт ҡыуыуы ауыртһа...

❖ Бауыр менән үт ҡыуыуы ауыртҡанда 1 стакан сәйгә 2 бөртөк кәнәфер ҡушырға ла, ашар алдынан көнөнә 3 мәртәбә стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә эсергә. Бындай сәй үтте ҡыуа, күҙ күреүен, йөрәк эшмәкәрлеген һәм енси әүҙемлекте, ашҡаҙан эшләүен яҡшырта.

## Дегәнәк

❖ Тимерәү (экзема) һәм бешкән урынға дегәнәк майын һөртөгөҙ. 1 ҡалаҡ ваҡланған дегәнәк тамырын 1 стакан ҡайнар һыуҙа, һыулы һауытҡа ултыртып, ҡуйырғансы ҡайнатырға. Шунан һуң 1 өлөш ҡатнашмаға 4 өлөш һары май ҡушырға һәм әҙер майҙы быяла һауытҡа һалып, һыуыҡ урында һаҡларға.

## Аҙ ҡанлылыҡ

❖ 1-әр ҡалаҡ кесерткән менән ҡайын япрағын термосҡа һалып, 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә. Был ваҡыт эсендә стакандың өстән бер өлөшө күләмендә сөгәлдөр һуты һығып алырға. Төнәтмәгә сөгәлдөр һуты ҡушырға. 3-4 өлөшкә бүлеп, көн дауамында эсергә. Дауаланыу курсы - 2 ай. Ашар алдынан 20-30 минут алда эсеү файҙалыраҡ.

❖ Көн һайын 1 стакан өрөк һуты эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АУЫРЫУ...
## йә астан, йә аштан

**Халыҡ медицинаһында ла аҙыҡ-түлектең роле ҙур булған. Һамаҡ, доға, аят һәм башҡа йолалар ауырыуҙы дауалауҙы еңеләйткән, ыңғай тойғолар уятҡан. Ҡатмарлы булмаған ауырыуҙарҙы ғаилә ағзалары - әсәй, өләсәй дауалаған. Ҡаты сиргә юлығыусыларҙы дауалау өсөн муллаларҙы, бағымсы, арбаусыларҙы саҡырғандар, шулай уҡ кендек инәһе лә дауалай алған.**

Дауалау алымдары араһында ризыҡтар ҙа ҙур урын алып торған. Тәбиғәттең, һыуҙың, һауаның таҙа булыуы ризыҡты ла шифалы иткән. "Аҙыҡ - ул дауа" тигән әйтем барлыҡ халыҡтарҙа ла тиерлек осрай. "Яман ауырыуға - яҡшы аш", "Ауырыу аш менән керә, аш менән сыға" тигән мәҡәлдәр ҙә ошолар тураһында һөйләй. Күп ашауҙан, ас йөрөүҙән дә тыйылырға кәңәш иткәндәр: "Ауырыу - йә астан, йә аштан". Ашауҙың, бигерәк тә күп һәм тәмле итеп ашауҙың йәшәүҙең төп мәғәнәһе түгел икәнен дә белгән халыҡ, "Күп ашаған да ауырыған, аҙ ашаған да ауырыған", тип, был мәсьәләгә философик күҙлектән ҡараған.

Күп ауырыуҙарҙы дауалау өсөн һөт һәм һөт ризыҡтары ҡулланылған. Организм өсөн бигерәк кәзә һөтө файҙалы: "Кәзәнең ите елгә, һөтө имгә". Тамаҡ ауыртҡанда, йүткергәндә ҡайнаған һөткә бал, май һалып эскәндәр. Ағыуланғанда, үҙәк көйгәндә һөт ярҙам иткән. Ҡара һыйырҙың һөтөн эсеп йәки майын ашап бөйөрҙө дауалайҙар. Күкрәк һөтө лә халыҡ медицинаһында ҡулланылған, уның менән конъюнктивитты дауалағандар, ҡатын-ҡыҙҙың күҙҙәренә - ир бала тапҡан ҡатындың, ә ир-егеттең күҙенә ҡыҙ тапҡан ҡатындың һөтөн тамыҙғандар.

Аҡ май тире ауырыуҙарынан дауа. Һары май йәки ҡаҙ майын һыуыҡта туңған тирегә һөрткәндәр. Ныҡ йүткергәндә был майҙар менән тамаҡты, түште, арҡаны майлағандар. Баланың быуындарын нығытыу өсөн уны һары май менән майлап, йылы мейес алдында тотҡандар. Үпкә сирҙәренән, бөйөрҙән әҙләп һаҙ ҡондоҙоноң эс майын, аҡ майҙы эсергә ярай. Баш ауыртҡанда баш түбәһен май менән ышҡыу ярҙам итә. Ҡорсаңғы, ҡысынманан көкөрт өҫтәлгән ҡаймаҡ дауалай. Сабый балалар ауырып китһә, уны дары өҫтәлгән май менән майлағандар. Дары еҫенән яуыз көстәр ҡаса, тип ышанғандар.

Ҡатыҡ, ҡорот, ҡымыҙ ҙа төрлө сирҙәргә ҡаршы дауа иҫәпләнгән. Ҡымыҙ - организм ныҡ көсһөҙләнгәндә, аҙ ҡанлылыҡ, боғаҡ, туберкулез кеүек сирҙәрҙән ҡотҡарған. Киптерелгән ҡорот шулай уҡ иң шифалы ризыҡтарҙың береһе. Эркет эренле яраларҙы бөтәштергән. Ҡолаҡбау (свинка) менән ауырыған кешегә ныҡ әсегән ҡымыҙ эсергәндәр. Был ҡымыҙҙы әҙерләгән саҡта уға ҡыҙыл ҡарағат, ҡыҙыл көртмәле, ҡара көртмәле йәки балан емештәре һалғандар, ә шеште йылҡы малының эс майы, бал йәки тоҙло май менән дауалағандар. Һалҡын ҡатыҡты янған урындарға һөрткәндәр.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИЛ-ЙӨРТ ХӘБӘРЕ

**Быйыл Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылының үҙәк урамында Шәйәхмәт Сибаевҡа - Сибай сәсәнгә обелиск асылды. Сәсәндең таш һынын тыуған еренә ҡайтарыуға күп көс һалған уҙамандар: БДУ-ның Сибай институты директоры, техник фәндәр докторы Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов, Сибай ауыл хакимиәте башлығы Илдус Сәфәрғәле улы Бикбаев, ветерандар советы рәйесе Сабит Сәмиғулла улы Утарбаев һәм башҡаларҙың ҡулдарын ихлас ҡыҫып, оло рәхмәт һүҙҙәре еткерге килә. Изге ғәмәлдәрегеҙ мең сауаптар менән кире ҡайтһын үҙегеҙгә, хөрмәтле ил ағалары!**

# СИБАЙ СӘҪӘН ҮҘ ИЛЕНӘ ҠАЙТТЫ...



Гөлназ Һунаршина фотолары.

Күгәрсен районының боронғо (XVII-XVIII быуаттарҙағы) Биктимер (бөгөнгө Санъяп) ауылынан, урыҫ алпауыты И.Л. Тимашев ерҙәрен һатып алып, тыуған төйәгенән ҡыуылған кешеләр Ирәндек буйҙарына юллана һәм Атайсал ауылына нигеҙ һала. Баймаҡ районының бөгөнгө Иҫке Сибай ауылы эргәһендәге Эттотҡан тип йөрөтөлгән туғайҙа урынлаша ауыл. Нимәһе оҡшамағандыр, күпмелер йәшәгәс, атайсалдар яңы урынға күсеп ултыра. Сибай Тәнәкәев менән ауыл муллаһы Айсыуаҡ Мотаев яҡындағы тауға менеп һайлай яңы урынды. Боролоп-боролоп аҡҡан, ярҙары ҡуйы ҡыуаҡлыҡтар, ерек-талдар менән ҡапланған Ҡарағайлы йылғаһының тау итәгенә терәлеп торған хозур туғайын үҙ итә улар. Оҙаҡламай ошо урында яңы ауыл хасил була, уға Сибай исемен бирәләр. Ике уҙаман баҫып торған исемһеҙ тау артабан Айсыуаҡ тип атала башлай. Бөгөн түбәһе ослайып, болоттарға ашып торған Айсыуаҡ тауы Иҫке Сибай ауылының ғорурлығы булып, әллә ҡайҙан үҙенә саҡырып тора. Шулай итеп, ҡасандыр Атайсал булған ауыл артабан Сибай, йылдар үтеү менән үҙенән тағы ла бер Яңы Сибай ауылын (бөгөнгө Сибай ҡалаһы) хасил итеп, Иҫке Сибай исеме менән тарихҡа инә.

Алты уллы Сибай Тәнәкәевтың дүртенсе улы Утарбайҙан тыуған малай ул Шәйәхмәт Сибаев. Атаһы Рәсәй батшаһының хәрби-феодаль ҡыҫымы менән бәйле Себергә һөрөлөп, мәңгелеккә китеп юғалғас, Шәйәхмәт бәләкәйҙән ҡара эшкә егелеп үҫә. Шулай ҙа тыумыштан зирәк малай ауыл мәҙрәсәһендә әлепте таяҡтан айырырға өйрәнә һәм үҙен тырыш шәкерт итеп таныта. Малайҙың отҡорлоғон күргән ауыл уҙамандары 1838 йылдың ғинуарында Шәйәхмәтте Ҡыҙыл станицаһында асылған башланғыс гарнизон мәктәбенә эш ҡағыҙҙары менән шөғөлләнеүселәр (писарҙәр) төркөмөнә уҡырға ебәрә. Ике йыл уҡып ҡайтҡандан һуң, ул ауыл старшинаһының писаре булып эшләй башлай һәм өс йыл ярайһы ғына тәжрибә туплай. 1843 йылдың июлендә Шәйәхмәт Сибаевты 7-се кантон писаре итеп тәғәйенләйҙәр.

1846 йылда үҙәге бөгөнгө Ғәле ауылында урынлашҡан 7-се кантон башлығы итеп Ҡотләхмәт Ғәле улы Биксурин тәғәйенләнә. Ҡотләхмәттең ике ҡатынынан ике улы, һигеҙ ҡыҙы тыуа. Шәйәхмәтте мөхәббәт утына һалған ҡыҙы Фатимаға был осорҙа ни бары ун бер йәш тирәһе була. 1843 йылдың көҙөндә Шәйәхмәт Сибаев зауряд-есаул ҡаҙаҡ Үлмәҫбай Юлдыбаевтың ҡыҙы Ҡәмбәрәгә өйләнә, әммә ҡатынлы булыуы уға йәш ҡыҙға ғашиҡ булыуға ҡамасауламай. Писаренең ҡыҙы менән сыуалыуын өнәмәгән Ҡотләхмәт кантон унан нисек тә булһа ҡотолоу юлдарын эҙләй һәм уны ситкә ебәрергә тырыша. Ҡыҙын "каторжан" улына икенсе ҡатынлыҡҡа биреүҙән ҡырҡа баш тарта кантон. Шулай итеп, 1852 йылдың йәйендә Шәйәхмәт Иҫке Сибай ауылына 12-се йорт старшинаһы булараҡ тәғәйенләнә. Ләкин ир менән йәш ҡыҙ араһында бәйләнеш өҙөлмәй. Быны һиҙгән Ҡотләхмәт кантон, асыуынан шартлар сиккә етеп, Шәйәхмәтте йорт старшинаһы вазифаһынан бушатыуға һәм Аҡмәсет операцияһына ебәртеүгә өлгәшә. Шул сәбәпле 1853 йылдың майында Шәйәхмәт Сибаев, тыуған ерҙәренән, һөйгәненән айырылып, Һырдарья тарафтарына юллана.

Өлгөлө хеҙмәте өсөн 1857 йылдың яҙында Шәйәхмәткә зауряд-сотник хәрби дәрәжәһе бирелә һәм шул уҡ йылдың көҙөндә ул Перовский фортынан (Аҡмәсеттән) тыуған ауылына ҡайтып төшә. Ағай-энеләре, ауылдаштары оҙайлы яу юлынан ҡайтҡан улдарын оло хөрмәт менән ҡаршы ала, уларҙың имен-аман ҡайтыуҙарын хуплап, мәжлестәр ойоштора. Тик тыуған ерендә ирәүәнләп йәшәргә форсаты булмай уның - ике ай самаһы үтеүгә, Иҫке Сибайға ҡыңғыраулы пар ат егелгән сапҡынсы килә. Кантон үҙәге булыуҙан туҡтағандан алып бындай ҡупшы тарантаслы губерна вәкилен күрмәгән ауыл халҡы был ваҡиғаны оҙаҡ, бик оҙаҡ хәтерендә һаҡлай. Сапҡынсы Шәйәхмәттең Тамъян-Ҡатай иленә - шул ваҡыттағы 6-сы кантонға башлыҡ итеп тәғәйенләнеүе тураһында хәбәр алып килгән була. Атайсалын, ғаиләһен, Фатимаһын һағынып ҡайтҡан Шәйәхмәт юғары түрәлеккә тәғәйенләнеү хәбәренә әллә ни шатланмай. Китер алдынан Шәйәхмәтте оҙатыу хөрмәтенә ҙур мәжлес ойошторола. Шунда халыҡ һорауы буйынса Шәйәхмәт яуҙаш дуҫы Байтүрә ҡурайсы менән бергә сығарған көйгә йыр йырлай:

ҮӘТ, ЗАМАНА!

# УҠЫУҒА ҠЫҘЫҠҺЫНЫУ КӘМЕЙМЕ?

**Быйыл өсөнсө класҡа уҡырға барған ейәнсәре Әлиәнең 1 сентябрь байрамы алдынан, мәктәпкә бармайым, унда ҡыҙыҡ түгел, тип мыжыуы оло кешене аптырауға һалды.**

Матур аҡ блузкаһына, күбәләкте хәтерләткән сағыу бантиктарына, атлағанда үксәләре "тыҡ-тыҡ" килгән туфлиҙарына һоҡланып бөтөрлөк түгел үҙенең. Ләкин был да, шулай уҡ һоро бесәй балалары төшөрөлгән, төҫлө ҡәләмдәр, ручка-дәфтәрҙәр менән тултырылған килешле сумкаһы ла һөйөндөрмәй уны. Ҡыҙыҡайҙың бер ҙә кәйефе юҡ. Мәктәпте, уҡыуҙы бигерәк һөйһөнмәй. "Дәрестә уйнарға ярамай. Ҡысҡырып һөйләшһәң, уҡытыусы апай ишетеп ҡалып, әрләргә тотона", - тип мыжый бала.

...Мәрйәм инәйҙең бала сағы һуғыш башланған йылдарға тура килде. Ҡот осҡос ауырлыҡтар кисерҙе улар. Йыш ҡына үлән һәм көрпәнән бешерелгән сөсө икмәк менән туҡланырҙар ине. Йәйҙәрен әлеге балалар шикелле урам буйлап уйнап та йөрөмәне, әсәһе менән өләсәһенә ярҙамлашты. Иртәнән кискә тиклем баҫыуҙа сүп утаны, ҡара яҙ менән картуф сәсеште, әсе елле һыуыҡ көҙҙәрен ураҡ йыйыуҙа ҡатнашты. Ҡышын, быйма юҡлыҡтан, резина итектәр кейеп, аяҡтарын туңдырып бөтә торғайны. Һуғыштан атаһының үлеме хаҡында ҡара ҡағыҙ килгәс, әсәһенең уны уҡып ниңә илағанын да аңламаны.



*Билемдәге ебәк билбауымды*
*Сискеләрем килмәй билемдән.*
*Ҡатай илкәйенә кантон булып*
*Киткеләрем килмәй илемдән.*

Иртәгеһенә ауыл халҡы Шәйәхмәтте ҡышҡы юлға оҙатырға сыға һәм бер ни ҡәҙәр уға эйәреп бара. Бөгөн Сибай биләне тип йөрөтөлгән ергә барып еткәс, Шәйәхмәт ауылдаштары менән йәнә йыр аша хушлаша:

*Кантон башы булып, ай, мин киттем*
*Тамъян менән Ҡатай иленә.*
*Аҡ ҡорбандар салып, нәҙер әйтеп,*
*Ҡайтһам ине тыуған илемә.*

*Йәшел генә сана, зыңғыр дуға,*
*Ектерһәнә, Фатимам, туратҡа.*
*Атайсалға ҡайтып, кантон булһам,*
*Ирешер инем, Фатимам, моратҡа...*

Әлбиттә, һуңғы куплетын ул халыҡ алдында йырламай, ә бер ни тиклем ваҡыттан һуң Фатимаһына яҙып ебәрә.

Архив документтарынан күренеүенсә, Шәйәхмәт Сибаев 1858 йылдың 26 ғинуарынан хәҙерге Әбйәлил районының Рәхмәт ауылында 6-сы кантон башлығы булып эш башлай. "Сибай" йырының һүҙҙәре лә нәҡ ошонда тыуа. Оҙаҡ йылдар сит ерҙәрҙә йөрөп ҡайтып, тыуған төйәгендә танһығы ла ҡанмаған сәсән Атайсалын, Фатимаһын һағыныу һағыштарын йырға ҡушып йырлай:

*Һандуғастар һайрар, һай, ер түгел,*
*Һайраһа ла туғайы киң түгел.*
*Илама ла, Фатимам, ай, илама,*
*Йүгереп кенә ҡайтыр ер түгел.*

*Ебәк кенә баулы күк ҡарсыға*
*Талпына ла микән ҡош күреп.*
*Киң түшәккәйҙәрен тарҙар йәйеп,*
*Йоҡлай микән Фатимам төш күреп...*

Һарыға һабышҡан Шәйәхмәт хат аша аралашыу менән генә хушһынмай, Фатимаһын ҡасырып, үҙ янына ала. Артабан ул ике ҡатын менән йәшәй.

Атайһыҙ үҫеп, күп ауырлыҡ күргән Шәйәхмәт Сибаев түрә булыуы дәүерендә лә кешелеклелеге, кеселеклелеге менән халыҡ ихтирамын яулай. Үҙенә йөкмәтелгән вазифаны ул халыҡты баҫып тотоуға түгел, ә урында йәшәүселәрҙең мәнфәғәтен ҡайғыртыуға йәлеп итә, дауахана, мәктәп астырыуға өлгәшә. Уның кантон аҡсаһын малайҙарҙы уҡытыуға, дауаханаларҙа ашауҙы яҡшыртыуға, уҡытыусыларға премия биреүгә тотоноуы тураһында архив материалдары ла раҫлай. Генерал-лейтенант Тетеревников яҙған түбәндәге юлдар ҙа быға асыҡ миҫал: "...При обозрении мною 6-го кантона я от всех башкир, которые имели случай видеть, слышал самые лестные отзывы об их кантонном начальнике, зауряд-сотника Сибаеве и ни одной жалобы на него не поступило. Заслужить общую любовь подчиненных - есть лучшая рекомендация начальнику. А потому считаю обязанностью благодарить зауряд-сотника Сибаева и объявляю об этом войску".

1863 йылда кантон идаралығы бөтөрөлгәс, Шәйәхмәт Сибаев Верхнеуральск ҡалаһының атаманы итеп тәғәйенләнә. Ләкин яңы вазифаһында оҙаҡ эшләй алмай - ауырыу сәбәпле вафат була. Уның ҡәбере Учалы районының Миндәк ҡасабаһы тирәһендә булырға тейеш, тип фаразлана. Данлы йырының һуңғы куплеттарын ул ауырыған сағында яҙғандыр, тип уйларға сәбәп бар:

*Йәшел генә ҡапҡа, буй-буй таҡта,*
*Асыла ла яҙыла ел саҡта.*
*Бирегеҙсе кәләм, яҙайым сәләм,*
*Япраҡ кеүек һарғайған саҡта.*

*Ебәк кенә билбау, осо ла уҡа*
*Килешә бит минең билемә.*
*Бәхил генә булһын ағай-энем,*
*Ҡайталманым тыуған илемә.*

Ире вафат булғас, беренсе ҡатыны Ҡәмбәрә Иҫке Сибайға, үҙ өйҙәренә ҡайта. Ә Фатима иһә, имеш-мимеш хәбәрҙәр дөрөҫ була торған булһа, Сибай кантондың вафатынан һуң Йәнекәй ауылы муллаһына тормошҡа сыға, уларҙың ике балаһы була. Дөрөҫ, Фатиманың яҙмышына бәйле икенсе фараздар ҙа бар, әммә береһе лә документтар нигеҙендә раҫланмаған...

Йор һүҙле, шиғри күңелле кантонды халыҡ Сибай сәсән тип ололаған һәм әле лә ул беҙҙең өсөн тәү сиратта сәсән булараҡ билдәле.

Байрамға килгәндә инде, унда Сибаевтар, Утарбаевтар, Һунаршиндар, Рустановтар, Ишбирҙиндар, Янбаевтар, Хәмитовтар, Рафиҡовтар, Уранбаевтар, Әбүбәкировтар һәм башҡалар ҙур теләк менән ҡатнашты. Мәҫәлән, Хәмитовтар үҙҙәрен алтын ҡуллы оҫталар итеп таныта алһа, Ишбирҙиндар ҡурайсылары менән ал бирмәне. Ә эташамаҫтар араһы вәкилдәре, үҙҙәренең ара тарихын сәхнәләштереп, уйынсылыҡтары менән алдырҙы. Тирмәләр ҡоролған йәйләүҙәр буйлап йөрөгәндә теге йәки был ара вәкилдәренең ҡылыҡ-фиғелен, үҙҙәренә генә хас айырым билдәләрен сырамытырға була ине. Әйтәйек, өтәсәктәр араһы етеҙлектәре, бар яҡлап өтәләп-ҡырылып тороуҙары менән иғтибарҙы йәлеп итте.

Байрамда ҡуйылған маҡсатҡа ярашлы, ауылдың төп халҡы һәр төрлө номинацияларҙа билдәләп үтелде. Мәҫәлән, ауылдың иң оло аҡһаҡалы булып Фәрит Харис улы Янбаев, иң оло ағинәйе булып Мәреүәр Фазулла ҡыҙы Айсыуаҡова билдәләнһә, байрам алдынан ғына донъяға килгән сабыйҙар Марат Хәмзин һәм Вилиә Рәхмәтуллиналар Иҫке Сибайҙарҙың иң йәш граждандары булараҡ тәбрикләнде. Кинйәбикә Шәйәхмәтова, Лилиә Мәмбәтназарова, Рәйлә Сибаева, Миңһылыу Сәғитова һәм Зөбәйлә Фәйзуллиналар ун һәм унан да күберәк балаға ғүмер бүләк итеп, "Герой әсә" исемен ғорур йөрөтә. Эльвира һәм Әскәт Рәхмәтуллиндар, Нәзирә һәм Вилүр Йәнһегетовтар, Гөлназ һәм Рәфҡәт Хәмзиндәр, Көнһылыу һәм Илнур Билгебаевтар, Сөмбөл һәм Раян Мәхмүтовтар, Дилүзә һәм Бүләк Ишемғоловтар, Эльвира һәм Артур Хәмитовтар, Гөлнара һәм Фәйез Иҙрисовтар, Резедә һәм Сибай Утарбаевтар, Зилә һәм Вәсил Бикҡоловтар, Рәмзиә һәм Ирек Иҙрисовтар, Рәйфә һәм Рәүил Айыҡтоловтар, Фәриҙә һәм Сәлих Рафиҡовтар ауылда татыу ғаилә иштәре булараҡ танылыу алғандар. Оҙаҡ йылдар бергә-бергә ғүмер кисергән татыу ҡәйнә менән килендәр Рабиға апай менән Әлфиә Рөстәмовалар, Айһылыу апай менән Резедә Мансуровалар, Маһинур апай менән Рәзилә Ғәбитовалар, Ғәмбәр апай менән Фәниә Дәүләтбаевалар, шулай уҡ йорт-ҡураһын, ихатаһын ҡараулы, матур тотҡан ғаиләләр, оҙаҡ йылдар башҡаларға өлгө булырлыҡ итеп йәшәгән иштәр, уңған хужабикәләр, ауыл активистары ла бүләкһеҙ ҡалманы байрамда...

- Тыуған ауылымда шундай матур байрам ойошторoуҙарына һәм унда шәхсән үҙемдең дә ҡатнашыуыма шатланып бөтә алмайым. Рәхмәт ауылдаштарыма - матур һәм иркен йәшәйҙәр, борондан килгән йолаларыбыҙҙы онотмай, олоно - оло, кесене кесе итә беләләр! Байрамдар ҡабатланып торһон, ил-көнөбөҙ тыныс булһын! - Себер яҡтарынан ҡунаҡҡа ҡайтҡан Дилбәр апай Ишбирҙинаның был һүҙҙәренә өҫтәп нимә әйтәһең инде? Амин, тиергә генә ҡала...

**Мотал РӘМОВ.**
**Баймаҡ районы.**

Әммә ул үҙенең беренсе тапҡыр мәктәпкә барғанын яҡшы хәтерләй. Әсәһе бәләкәсенә әллә ҡайҙан алып ҡайтҡан мәктәп формаһын ҡыҫҡартып матурланы, үтекләне. Альяпҡысы ябай ғына аҡ тукыманан тегелде. Дәфтәрҙәре һары битле, йоҡаҡ ҡына ине. Бөгөнгө уҡыусыларҙыҡы кеүек һәйбәт ручкалары ла булманы. Әҙерәк кенә дәфтәр битенә батырып баҫһаң, хәрефтәр түгел, әллә ниндәй ҡап-ҡара бысраҡ эҙ ҡала. Уҡытыусы күрһә, үәт әрләй ине! Шул йылдың ҡышы бигерәк һыуыҡ булды. Мейес яғылһа ла, балалар дәрестә дер ҡалтырап ултырҙы. Йүнле яғыулыҡ та юҡ ине шул.

Ул саҡта 1 сентябрь байрамына ата-әсәләр, балалар, уҡытыусылар йыйылды. Мәктәп директоры Муса ағай бөтәһен дә Белем көнө менән ҡотланы. Шул саҡта Мәрйәмдең нисек тулҡынланыуын белһәгеҙсе! Белем тауының үрен тиҙерәк яулағыһы килгәйне. "Өлгөлө уҡыусы бул, ҡыҙым. Йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермә, зинһар", - тип теләне әсәһе. Уҡытыусы апай дәрес аңлатҡанда бер кем ауыҙ күтәреп һүҙ әйтеү түгел, йөҙөнә күтәрелеп ҡарарға ла ҡыймай ине. Башын баҫып, китаптағы әле уға таныш булмаған төрлө хәрефтәргә, һандарға һоҡланды. Ҡыҙҙың тиҙерәк уларҙың нимә аңлатҡанын белгеһе килде...

Мәрйәм инәйҙең ҡайһы ваҡыт ейәнсәренең көндәлеген ҡарап, ҡобараһы оса. "Дәрестә шаярҙы, теманы аңламаны, иптәштәре менән дәрестән ҡасып йөрөнө, уҡытыусылар менән һүҙгә килде", тигәнерәк яҙыуҙар менән сыбарланған була ул. Иғтибар иткәне бар: ейәнсәре буш ваҡытын урам буйында уҙғарыуҙы өҫтөнөрәк күрә, өйгә бирелгән эштәрен эшләмәй. Эх, замана! Уҡымағас, тома наҙан булып ҡала бит балалар. Йәш быуын нилектән уҡыуға ынтылмай икән?..

**Алһыу ҠЫҘРАСОВА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Борон, И. И. Лепехин һүҙҙәре буйынса, йәш кәләште кейендереп-биҙәндереп, һыбай оҙатҡандар. Әхирәттәре уны оҙатып, кире ҡайтҡан. Йәш килен эргәһендә яҡын туғаны һәм йәш килен ултырған аттың башын тотоп килеүсе ҡоҙаса ғына ҡала. Ул кейәү йортона яҡынлашҡанда ниндәй тауар алып килеүен һәм уның хаҡын әйтеп, ҡысҡырып тауыш бирә. Кейәүҙең атаһы йәки уны алмаштырыусы икенсе кеше, һатыулашҡандан һуң, ҡыҙҙы һатып ала. Ҡайны тарафынан ебәрелгән ҡатын-ҡыҙҙарға ҡоҙаса аттың йүгәнен тапшыра.

Кейәү йортона аяҡ баҫҡас, йәш кәләш ҡайны-ҡәйнәһе алдында өс тапҡыр тубыҡлана, уны өс тапҡыр торғоҙалар. Һуңынан ул иренең туғандарына бүләктәр тарата, улар үҙ сиратында уға яуап бүләктәре бирә. Икенсе көн йәш киленгә көйәнтә-биҙрә биреп, һыу башлаталар. Ул үҙе менән епкә бәйләнгән тәңкә алып бара һәм һыу эйәһенә ҡорбан итеп ташлай. Уның артынан эйәргән бала-саға, тартышып-алышып, ошо тәңкәне һыуҙан табып алырға тырыша. Ошонан һуң килен иренә тартыныуһыҙ йөҙөн күрһәтә ала.

Башҡорттарҙың туй йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре башҡорт никахының тарихын асыҡларға ярҙам итә. Ҡасандыр ҡәтғи экзогамия булған башҡорттарҙа никахтарҙың ҡыҙ урлау һөҙөмтәһендә атҡарылыуына бер шик тә юҡ. Ырыуҙар үҫкән һайын, ҡыҙ урлау ауырлаша барған һәм бөтөнләй туҡталған. Ҡыҙ урлауҙы һатыу алмаштырған һәм башҡорт туйында ҡоҙалашыу алыш-биреш килешеүе сифаттарын алған. Урал арьяғы башҡорттарында, кейәүҙең буласаҡ ҡайныһы йортона беренсе тапҡыр килгәндә, кәләштең туғандары ҡунаҡтарҙы һыбай килеш ҡаршы алып, уларҙың баш кейемдәрен тартып алырға тырыша. Күрһәң, был йола ҡыҙ урларға килгән сит ырыу ҡунаҡтарын ҡаршылауҙан ҡалғандыр. Ә кейәүҙең кәләшенә беренсе тапҡыр килеүе ҡыҙ урлау йолаһын тулыһынса ҡабатлай түгелме? Кейәү әнерҙә килә, йәшерелгән ҡыҙҙы эҙләп таба, һуңынан уны, ҡасып барған еренән ҡыуып тота һәм күтәреп алып китә. Һуңынан зифаф төнө үтә һәм никах ғәмәлдә тип һанала. Ҡыҙ урлау символ ғына булып ҡалғас, ата-әсә асыуы буш формаллеккә әүерелә. Шуға ҡарамаҫтан, кейәү беренсе тапҡыр кәләшенә килгәндән һуң, ҡалым түләп бөткәнгә тиклем бер йә ике йыл ҡайныҡәйнәһенә йөҙөн күрһәтмәскә тейешлеге һаҡланып ҡалған.

Ҡыҙ урлау XX быуат башында ла күҙәтелә. Ҡайһы берҙә, әлбиттә, бик һирәк осраҡтарҙа улар ҡыҙҙың теләгенән тыш башҡарыла. Йәш егет бер-нисә дуҫы менән һөйгән ҡыҙын ҡарауыллап тороп, уны алдан әҙерләнгән ергә урлап алып китә һәм йәрәшә. Бик йыш ҡыҙ урлау ике яҡтың да килешеүе нигеҙендә эшләнә. Ҡыҙ үҙенең бар мөлкәтен туплап, егет менән ҡасып китә. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң кейәү ҡайныһына килә, ҡылынған ғәмәл хаҡында белдерә һәм татыулашыуын һорай. Бүләктәр биргәндән һуң, эш яйлана. Ҡайһы берҙә хатта ҡыҙҙы ата-әсәһенең ризалығы менән урлайҙар. Был ҡунаҡ ҡаршылау, бүләк таратыу, байрам ойоштороу кеүек сығымдарҙан азат итә.

*✓ Ҡатын-ҡыҙҙың һәм балаларҙың хоҡуҡтарын РФ-ның Ғаилә кодексы яҡлай һәм ул уҡ ир менән ҡатындың хоҡуҡтарын билдәләй. Балаға ҡаты мөнәсәбәттә булыу ата-әсәне яуаплылыҡҡа тарттырыу өсөн нигеҙ булып тора.*



# ДЕПУТАТ МЕНӘН

## йәки Ғаиләлә көс ҡулланыуҙы

**"Кеше - ғорур яңғырай". Совет осоронда Максим Горькийҙың әҫәренән алынған ошо юлдар ҡанатлы һүҙҙәргә әйләнгәйне. Бәлки, ул ваҡытта кешенең, ысынлап та, ҡәҙере лә, баһаһы ла юғары булғандыр. Бөгөн, ололар фекеренсә, кешене себен урынына ла күрмәйҙәр. Юҡ, һүҙем һуғыш-хәтәр түгел, ә йәмғиәттә, дәүләттең иң мөһим ячейкаһы булған ғаиләлә һәр айырым кешегә - индивидуумға, шәхескә әҙәмсә иғтибар һәм ихтирам булмауы, бәғзеләрҙең үҙҙәренең ошо бәләкәй генә дәүләттәрендә йәберләнеүе, ҡыйырһытылыуы, көс ҡулланыу ҡорбаны булыуы тураһында. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә МЫРҘАБАЕВА менән унын инициативаһы менән тәҡдим ителгән һәм бер нисә йыл дауамында әҙерләнгән "Ғаилә-көнкүрештә көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү һәм профилактикалау тураһында" федераль закон проектына бәйләп, бөгөн көнүҙәк булып торған мәсьәлә буйынса әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▶ Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы, ниһайәт, боҙ бер аҙ ҡуҙғалды һәм парламент атап үтелгән закон проектын ҡабул итергә әҙер кеүек. Әммә һорау тыуа: илебеҙҙә кешенең тейелгеһеҙлеген гарантиялаусы закондар бар икән, яңы ҡанунды ҡабул итеү зарурлығы уларҙың эшләмәүенән килеп сығамы һәм ул да саң йыйып ятмаҫмы?**

- Ысынлап та, Рәсәйҙә ғаиләлә көс ҡулланыуҙы иҫкәртеү тураһында айырым закон булмаһа ла, ғәмәлдәге ҡануниәт базаһы граждандарҙың хоҡуҡтарын яҡлауҙың төрлө аспекттарына эйә. РФ Конституцияһына ярашлы, бер кем дә икенсе берәүгә ҡарата көс ҡулланыуға, башҡа ҡаты мөғәмәләгә йәки кешелек намыҫына ҡағылған мөнәсәбәткә дусар ителергә тейеш түгел, һәр кемгә унын хоҡуҡтарын һәм азатлығын суд яҡлауы, шулай уҡ квалификациялы юридик ярҙам алыу гарантиялана. РФ-ның Енәйәт кодексында ғүмергә, сәләмәтлеккә һәм енси тейелгеһеҙлеккә ҡаршы уйланылған енәйәт ҡылған өсөн яуаплылыҡ ҡаралған. Был хоҡуҡи актта шулай уҡ ғаиләлә көс ҡулланылғанда ҡылынған енәйәти ғәмәлдәрҙе тулыһынса сағылдырған "Ғазаплау" тигән статья бар. Әммә ул ғаиләлә көс ҡулланыуға бәйле ғаризаларҙы ҡарағанда бөтөнләй тиерлек ҡулланылмай. Рәсәй ысынбарлығы күрһәтеүенсә, был ғәмәл күпселек осраҡта туҡмау йәки сәләмәтлеккә еңелсә зыян килтереү тип ҡарала. Бындай енәйәт өсөн яуаплылыҡ - 40 мең һум йәки 480 сәғәтлек йөкләмәле эшкә йәлеп итеү, йәиһә бер йылға холоҡ төҙәтеү эштәре, дүрт айға тиклем иректән мәхрүм итеү кеүек саралар менән баһалана. Был язаны бирҙертеү ҙә еңел түгел, сөнки бындай төр енәйәт буйынса шәхси ғәйепләү процедураһы ҡаралған. Йәғни енәйәт эше бары тик зыян күргән яҡтың билдәләнгән формала биргән ғаризаһы нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Шул уҡ ваҡытта зыян күреүсенең үҙенә үк шәхси ғәйепләүсе бурысы йөкмәтелә, ул үҙ аллы ғәйепләүҙе хупларға, раҫлаусы документтар тупларға һәм күрһәтергә, тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашырға, үтенес ҡағыҙҙары алырға тейеш. Зыян күреүсе был эштәрҙе атҡарып сыға алмай. Сөнки күп осраҡта ғаиләлә көс ҡулланыу "ябыҡ ишектәр артында", шаһиттар булмағанда башҡарыла. Бик йыш ғәйепләнеүсе менән зыян күреүсе бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәй һәм бындай шарттарҙа ғариза яҙыу, дәлилдәр йыйыу хәүефһеҙ түгел. Өҫтәүенә, зыян күреүсенең дәлилдәр йыйыуы етди процессуаль ҡатмарлыҡтар менән бәйле - улар РФ-ның Енәйәт кодексына ярашлы булырға тейеш, ә юридик белеме булмаған кеше өсөн быны эшләү бик ҡатмарлы. Бынан тыш, ғәйепләнеүсенән айырмалы, шәхси ғәйепләүсегә бушлай адвокат бирелмәй, ә түләүле адвокат хеҙмәтен файҙаланырға күптәрҙең кеҫәһе йоҡа. Ҡайһы бер осраҡтарҙа шәхси ғәйепләүсенең эше ике яҡтың килешеүе менән тамамлана, әммә көс ҡулланыусы яғынан зыян күреүсегә баҫым яһау хәүефе янай башлай, сөнки улар барыбер ҙә бер фатирға, өйгә ҡайта. Һөҙөмтәлә күптәр бөтөнләй судҡа мөрәжәғәт итмәй, иткән хәлдә лә төрлө ҡатмарлыҡтар арҡаһында артабан көрәшеүҙән баш тарта.

Килтерелгән зыянды түләтеү Гражданлыҡ кодексында билдәләнгән. Ҡатын-ҡыҙҙың һәм балаларҙың хоҡуҡтарын РФ-ның Ғаилә кодексы яҡлай һәм ул уҡ ир менән ҡатындың хоҡуҡтарын, бурыстарын билдәләй. Балаға ҡаты мөнәсәбәттә булыу ата-әсәне яуаплылыҡҡа тарттырыу өсөн нигеҙ булып тора. Көнкүрештә көс ҡулланыуға дусар ителеүселәргә юридик ярҙам күрһәткәндә РФ-ның Граждандар кодексы нормалары ҡулланыла, унда кешенең ғүмеренә һәм сәләмәтлегенә, милкенә килтерелгән зыянды түләү, шулай уҡ рухи зыянды компенсациялау ҡаралған. Торлаҡ кодексында иһә фатирҙы мәжбүри бүлдереү нормалары билдәләнә. Әгәр фатир хужаһы менән бергә йәшәүсе ғаилә ағзалары араһында алмашыу тураһында килешеүгә өлгәшенмәһә, уларҙың теләһә кеме суд аша торлаҡты мәжбүри бүлдереүҙе талап итә ала. Әммә ғәмәлдә ғаиләлә көс ҡулланыу осрағында был норма бик һирәк ҡулланыла.

**▶ РФ-ның Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексында ғаилә именлеген боҙоусыларҙы административ яуаплылыҡҡа тарттырыу нормалары билдәләнмәгәнме ни?**

- Юҡ, билдәләнмәгән. Мәҫәлән, полиция хеҙмәткәрҙәре ғаиләһендә даими рәүештә тауыш ҡуптарыусыларға, ул көс ҡулланғанға тиклем, бер нимә лә эшләй алмай. Уны ҡулға алыу, полиция участкаһына алып килеү, ваҡ хулиганлыҡ өсөн яуаплылыҡҡа тарттырыу ярамай, сөнки яуаплылыҡ билдәләү өсөн бындай ҡылыҡтар йәмәғәт урынында ҡылынырға тейеш. Ә өй, фатир - йәмәғәт урыны түгел, шәхси территория. Йәғни дәүләт шәхси тормошҡа көс ҡулланыу факты булмай тороп, уға ҡыҫыла алмай, ә законның каратель функциялары ғаиләлә именлек тәьмин итмәй. Әммә Калуга өлкәһе миҫалы бындай хәл-торошто үҙгәртеү мөмкинлеген раҫлай. Йәғни унда субъекттың Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексына "Ғаиләлә йәшәү шарттарын боҙоу" тигән статья индерелгән һәм ул ғаилә тыныслығын боҙоусыға, һүгенеүсегә, ғаилә ағзаларына ихтирамһыҙлыҡ күрһәтеүсегә, милекте ҡыйратыусыға административ яуаплылыҡ (15 тәүлеккә ябып ҡуйыу) билдәләй. Был статья унда уңышлы ҡулланыла һәм полиция хеҙмәткәрҙәренә тауыш-ғауға тыуҙырыусылар менән көрәшеү мөмкинлеген бирә.

Белгестәр фекеренсә, Рәсәйҙең административ, енәйәти һәм енәйәти-процессуаль ҡануниәте, нигеҙҙә, яуаплылыҡ билдәләүгә һәм ғәйеплеләргә яза биреүгә йүнәлтелгән һәм уларҙы иҫкәртеү, потенциаль хоҡуҡ боҙоусылар менән профилактика эштәре алып барыуҙы күҙалламай. Зыян күреүселәр өсөн һаҡланыу саралары ҡаралмаған (һаҡ ҡуйыу, психологик һәм юридик кәңәш, ваҡытлыса һыйыныу урыны, реабилитация үҙәктәре һ.б.). Бик йыш ғәйепле кеше административ штраф формаһында язаға тарттырыла, ә был инде ғаиләне иҡтисади яҡтан язалау һымаҡ килеп сыға, сөнки штраф түләү ғаилә бюджетын йоҡарта. Икенсе яҡтан, ғаиләләге көс ҡулланыу башҡа матди сығымдарға ла йоғонто яһамай ҡалмай. Зыян күреүсене дауалауға, ярҙам күрһәтеүгә, ғәйеплеләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыуға ҙур сығымдар китһә, унын эшен юғалтыуы йәки эш һөҙөмтәлелеге кәмеү ихтималлығын да инҡар итеп булмай. Мәҫәлән, Европа илдәрендә үткәрелгән тикшеренеүҙәр мәғлүмәттәре буйынса, Голландияла ҡатын-ҡыҙға ҡарата көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә йыллыҡ матди юғалтыу 200 миллион евронан күберәк, Швейцарияла - 400 миллион швейцар франкы тәшкил итә. Канаданың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы баһалауы буйынса, 2002 йылда ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә медицина сығымдары 1,1 миллиард Канада доллары менән иҫәпләнгән. Туғандарға ҡарата ҡылынған енәйәт буйынса яуаплылыҡ тураһында Рәсәйҙә бер генә статья ла, шулай уҡ ғаиләлә көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә зыян күреүселәрҙе яҡлаусы, көс ҡулланыуҙы иҫкәртеүсе айырым закон да юҡ.

Был өлкәлә төбәк законы ҡабул ителгән Рәсәйҙәге берҙәнбер субъект - ул Ставрополье крайы. Башҡортостан парламентарийҙары тарафынан да "Ғаиләлә көс ҡулланыуҙы профилактикалау тураһында" һәм "Ғаиләлә көс ҡулланыуға дусар булған кешеләргә социаль-психологик ярҙам тураһында" закон проекттары эшләнеп, ул хатта БМО-ның "БМО- Ҡатын-ҡыҙҙар" структураһында экспертиза ла үтте. Быны нимә өсөн әйтәм, сөнки Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарының РФ Дәүләт Думаһына закон проекттары инициативаһы менән сығыуы бер бөгөн түгел. Заманында профессор Венер Сәхәүетдиновтың тәмәке тартыуға ҡаршы законы башта республика парламентында ҡабул ителеп, һуңынан федераль кимәлдә ҡанун булдырыуға этәргес биргәйне. Тимәк, Башҡортостан депутаттарының был йәһәттән дә өлгө күрһәтеү мөмкинлеге бар.

**▶ Күрәһең, тәбиғәт бушлыҡты яратмай, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Хатта ҡануниәттә лә саҡ ҡына бушлыҡ, йәғни аныҡланмаған йәки ике төрлө мәғәнә биргән статья барлыҡҡа килгәндә, һөҙөмтә бөтөнләй икенсе булыуы мөмкин. Яңы закон ҡануниәттәге ниндәй бушлыҡтарҙы тултырырға тейеш инде?**

- Закон проекты дәүләттең ғаилә-көнкүреш өлкәһендә көс ҡулланыуға ҡаршы көрәшендә иҡтисади, социаль һәм сәйәси сараларҙы ҡулланыуын тормошҡа ашырыуҙың хоҡуҡи механизмын булдырыуға йүнәлтелгән. Бында тәүгә ғаилә-көнкүреш тәртибен боҙоусы, ғаилә-көнкүреш, физик, психологик, енси һәм иҡтисади көс ҡулланыу тигән аңлатмалар индерелә, ғаилә көнкүрешендә көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә зыян күреүселәрҙең хоҡуҡтары, шул иҫәптән бушлай юридик ярҙам алыуҙы ла индереп, билдәләнә.

Ғаилә-көнкүрештә көс ҡулланыуҙы профилактикалау өлкәһендә Рәсәй субъекттарының федераль власть органдары һәм дәүләт власы органдарының вәкәләттәре, ошо эшмәкәрлектә социаль хеҙмәтләндереү предприятиеларының, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф ойошмаларының, урындағы үҙидара органдарының һәм йәмәғәт ойошмаларының ниндәй формала ҡатнашыуы билдәләнә.

Тәү тапҡыр ғаиләлә көс ҡулланыуҙы ваҡытында асыҡлау, тиҙ арала ярҙам итеү, шул иҫәптән медицина ярҙамы күрһәтеү буйынса ведомство-ара хеҙмәттәшлек механизмы эшләнгән.

Суд һәм судтан башҡа яҡлау күрһәтмәләрен үтәү; ғаилә именлеген боҙоусыға махсуслашҡан психологик программаларҙа ҡатнашыу бурысын йөкмәтеү; хоҡуҡ боҙоусыға айырым талаптар ҡуйыу буйынса ғаилә-көнкүрешендә көс ҡулланыуҙы индивидуаль профилактикалау саралары тәҡдим ителә. Йәғни быға са ниндәйҙер ғаиләлә унын ағзаһына ҡарата көс ҡулланыу, ҡыйырһытыу факты асыҡланһа ла, хоҡуҡ һаҡсылары килә лә китә ине, хәҙер иһә, ғәйепленең психологик үҙәктәргә йүнәлтелеүе, дауаланыу алыуы, шулай уҡ махсус профилактика үтеүе мөмкин буласаҡ.

РФ субъекттарында дәүләт власының вәкәләтле органдарына зыян күреүсе үтенесе буйынса уны махсуслашҡан социаль хеҙмәтләндереү учреждениеһына ваҡытлыса йәшәү хоҡуғы менән индереүҙе йөкмәтһә, зыян күреүсе йәки көс ҡулланыу ҡорбаны ғаиләһендә ҡалмай, ә ваҡытлыса асылған урындарҙа йәшәп тора аласаҡ. Был инде артабан унын ғүме-

***Әлбиттә, ғаилә тигәндә, беҙ йәмғиәттең камил ячейкаһын күҙаллайбыҙ. Әммә был - беҙ күрергә теләгән осраҡ, ләкин хәҙер күпселек никахҡа инмәй генә йәшәүҙе хуп күрә. Ләкин, нисек кенә булмаһын, никахлы ғаиләме ул, бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәүселәр союзымы - бер кемгә лә икенсе кешегә ҡарата көс ҡулланыу, ҡыйырһытыу, мыҫҡыллау, көсләү хоҡуғы бирелмәгән. Тимәк, әгәр йәмғиәттә күҙәтелгән гражданлыҡ никахы тигән күренеште ҡабул иткәнбеҙ һәм уны бер нисек тә үҙгәртеп булмай икән, уларҙа кешенең гарантияланған хоҡуҡтары боҙолоуға ла юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ.***

***✓ Дөрөҫөн әйткәндә, ҡыҙҙарҙы - ҡатын, буласаҡ әсә, малайҙарҙы - ир, атай, ғаилә башлығы итеп тәрбиәләү ғаиләлә һалынырға, улар үҙенең ата-әсәһе өлгөһөндә нисек булырға кәрәклекте күреп үҫергә тейеш.***

# БЕР СӘҒӘТ, тыйып булырмы?

рен хәүефтән аралау тигән һүҙ. Сөнки бик йыш ғаилә ағзалары енәйәтсе менән бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәүен дауам итеп, ахырҙа быныдай тормоштоң аҙағы үлем менән тамамланған осраҡтар ҙа юҡ түгел.

Дөйөм алғанда, закон проекты ғәмәлдә булған закондарҙы камиллаштырыуҙы дауам итеүҙе күҙаллай.

**Закондың атамаһынан сығып фекер йөрөткәндә, унда ғаиләлә көс ҡулланыу хаҡында һүҙ бара. Әммә, мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, көс ҡулланыу законлы ғаиләләрҙә һирәк күренеш, ә бына бөгөн граждандар никахы тигән билдәләмәгә ышыҡланып, өйҙәш булып йәшәүселәрҙе ғаилә тип атап булмай, һәм, нигеҙҙә, көс ҡулланыу тап ошондай бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәүселәр берлегендә күберәк күҙәтелә.**

- Әлбиттә, ғаилә тигәндә, беҙ йәмғиәттең камил ячейкаһын күҙаллайбыҙ. Әммә был - беҙ күрергә теләгән осраҡ, ләкин хәҙер күпселек никахҡа инмәй генә йәшәүҙе хуп күрә. Ләкин, нисек кенә булмаһын, никахлы ғаиләме ул, бер ҡыйыҡ аҫтында йәшәүселәр союзымы - бер кемгә лә икенсе кешегә ҡарата көс ҡулланыу, ҡыйырһытыу, мыҫҡыллау, көсләү хоҡуғы бирелмәгән. Тимәк, әгәр йәмғиәттә күҙәтелгән граждандыҡ никахы тигән күренеште ҡабул иткәнбеҙ һәм уны бер нисек тә үҙгәртеп булмай икән, уларҙа кешенең гарантияланған хоҡуҡтары боҙолоуға ла юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ. Башты ҡомға тығыу менән генә бит проблема юҡҡа сыҡмай. Бына, мәҫәлән, БМО мәғлүмәттәре буйынса, йыл һайын донъяла 3,8 миллион кеше, шул иҫәптән 1,8 миллион ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә көс ҡулланыу ҡорбаны була. Көнкүреш низағтарының өстән ике өлөшө үлем менән тамамлана. Көс ҡулланыу ҡорбаны булып көсһөҙҙәр - балалар, ҡатын-ҡыҙҙар, ололар, хатта ир-аттар ҙа тора. Социологик һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, Рәсәйҙә һәр дүртенсе ғаиләлә теге йәки был формала көс ҡулланыу күҙәтелә. Барлыҡ ауыр енәйәттәрҙең 40 проценты ғаиләлә эшләнә. Ирҙәренең йәки башҡа яҡын кешеләренең ҡулынан йыл һайын 14 мең ҡатын-ҡыҙ һәләк була, 26 меңе енәйәти ҡул һуҙыу ҡорбанына әүерелә. Шуларҙың ике мең самаһы үлә, һигеҙ меңе тән йәрәхәттәре ала, ике мең бала һәм үҫмер, ата-әсәһенең ҡанһыҙ мөнәсәбәтенән ҡотолоу юлын тапмайынса, үҙ-үҙенә ҡул һала.

Репродуктив сәләмәтлек буйынса дөйөм милли тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе асыҡлауынса, ғүмер дауамында Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙарының 38 проценты - психик (вербаль), 20 проценты - физик, 4 проценты сексуаль көсләүгә дусар ителә. Гүзәл заттарҙың ни бары 12 проценты ғына полиция органдарына йәки юридик хеҙмәттәргә мөрәжәғәт итә, 26 проценты булған хәл тураһында бер кемгә лә, хатта иң яҡын туғандарына ла һөйләмәй, сөнки быны файҙаһыҙ тип һанай, ояла, айырылышыуҙан йәиһә тағы ла көслөрәк баҫымға дусар булыуынан шөрләй. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, үҙҙәренең партнерҙары яғынан физик көс ҡулланыуға дусар булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың 55 проценттан 95 процентҡа тиклеме бер ваҡытта ла ярҙам һорап мөрәжәғәт итмәй.

Әлеге ваҡытта донъяның 89 илендә көнкүрештә көс ҡулланыу тураһында закон акттары бар, шуларҙың 60-ы - ғаиләлә көс ҡулланыуға ҡаршы, 7-һе ҡатын-ҡыҙға ҡарата көс ҡулланыуға ҡаршы махсус закон. Элекке Советтар союзына ингән дәүләттәрҙән Ҡаҙағстанда, Ҡырғыҙстанда, Молдовала, Грузияла, Әзербайжанда, Украинала бындай закондар эшләй. Практика күрһәтеүенсә, был илдәрҙә ғаиләлә көс ҡулланыу осраҡтары 20 - 30 процентҡа кәмегән.

**Тимәк, йәмғиәттә ғаилә культын үҫтереү, ике енес вәкиленең бер-береһе алдындағы яуаплылығын рәсми теркәү мотлаҡ кәрәк...**

- Мотлаҡ ҡына түгел, был шулай булырға тейеш тә. Ғаилә культы, ғаилә өҫтөнлөгө, ғаилә баһаһы балаға үҙенең үҫкән ғаиләһендә һалынырға, балалар тулы ғаиләләрҙә тәрбиәләнергә, йәғни тәрбиә ғаиләнән башланырға тейеш. Ә беҙҙә нисек? Күпселек тәрбиә мәсьәләһен мәктәпкә генә ҡайтарып ҡалдырып, үҙҙәренән яуаплылыҡты алып ташларға теләй. Ә мәктәп - ул, тәү сиратта, белем бирә.



***Бөгөн яңғыҙ бала тәрбиәләүсе ҡатындар бик күп. Улар ҡыҙ балаларҙы ғына түгел, малайҙарҙы ла тәрбиәләй. Һөҙөмтәлә, әсәһе, өләсәһе тәрбиәһен алған, ир-ат тәрбиәһе алмаған малай нисек ысын мәғәнәһендә ир-ат булып үҫешһен? Хатта күп кенә әсәйҙәр, улым ҡыҙҙар кеүек, тип маҡтанырға ярата. Улар өсөн улының ҡыҙҙар кеүек булыуы, бәлки, яҡшылыр ҙа, әммә малайҙың, буласаҡ ир-егеттең, ир-азаматтың үҙе өсөн был яҡшымы икән? Ә бер ҡыйыҡ аҫтында өйҙәш булып йәшәүселәр араһында бер ниндәй яуаплылыҡ та юҡ, шуға күрә унда бөгөн әсәй йәки атай бар, иртәгә булмауы ла ихтимал. Шуға һәр тулы ғаиләлә әсә кеше ҡыҙына ғүмерлек юлдашын, мөхәббәт, яратам, тигән күҙлектән түгел, ә буласаҡ балаларымдың атаһы, ә атайҙар ир балаларға ҡыҙҙарҙы, буласаҡ балаларымдың әсәһе, тип һайларға өйрәтергә тейеш.***

Дөрөҫөн әйткәндә, ҡыҙҙарҙы - ҡатын, буласаҡ әсә, малайҙарҙы - ир, атай, ғаилә башлығы итеп тәрбиәләү ғаиләлә һалынырға, улар үҙенең ата-әсәһе өлгөһөндә нисек булырға кәрәклекте күреп үҫергә тейеш. Ғәмәлдә иһә, бөгөн яңғыҙ бала тәрбиәләүсе ҡатындар бик күп. Улар ҡыҙ балаларҙы ғына түгел, малайҙарҙы ла тәрбиәләй. Һөҙөмтәлә, әсәһе, өләсәһе тәрбиәһен алған, ир-ат тәрбиәһе алмаған малай нисек ысын мәғәнәһендә ир-ат булып үҫешһен? Хатта күп кенә әсәйҙәр, улым ҡыҙҙар кеүек, тип маҡтанырға ярата. Улар өсөн улының ҡыҙҙар кеүек булыуы, бәлки, яҡшылыр ҙа, әммә малайҙың, буласаҡ ир-егеттең, ир-азаматтың үҙе өсөн был яҡшымы икән? Ә бер ҡыйыҡ аҫтында өйҙәш булып йәшәүселәр араһында бер ниндәй яуаплылыҡ та юҡ, шуға күрә унда бөгөн әсәй йәки атай бар, иртәгә булмауы ла ихтимал. Шуға һәр тулы ғаиләлә әсә кеше ҡыҙына ғүмерлек юлдашын, мөхәббәт, яратам, тигән күҙлектән түгел, ә буласаҡ балаларымдың атаһы, ә атайҙар ир балаларға ҡыҙҙарҙы, буласаҡ балаларымдың әсәһе, тип һайларға өйрәтергә тейеш.

Дәүләт тарафынан иһә күптән түгел генә "2025 йылға тиклем РФ-ның дәүләт ғаилә сәйәсәте концепцияһы" әҙерләнде. Ул, дөйөмләштереп әйткәндә, күп балалы ғаиләләрҙе яҡлау буйынса сараларҙы, ғаилә именлеген стимуллау, балалары булған ғаиләләрҙең матди хәлен яҡшыртыу, йәш ғаиләләрҙе сифатлы һәм һатып алыу мөмкин булған фатирҙар, йорттар менән тәьмин итеү, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына балаларҙы урынлаштырыу дефицитын бөтөрөү, балалы ғаиләләр өсөн уңайлы мөхит тыуҙырыу һ.б. мәсьәләләрҙе тормошҡа ашырыуҙы күҙаллай.

**Ғаиләлә көс ҡулланыу тигәндән, ниңәлер гел генә ҡыйырһытылыусы ролендә ҡатын-ҡыҙҙы күрәбеҙ һәм уларҙы яҡларға тырышабыҙ. Ә бит уйлап ҡараһаң, ғаиләлә ҡыйырһытылып, йылы һүҙ, йылы ҡараш, йылы аш күрмәгән ир-ат та бихисап. Шулай уҡ килен эргәһенә, хатта үҙ балаһына һыймаған ҡәйнә-ҡайныларҙы, ата-әсәләрҙе лә юҡ тип булмай...**

- Әйтеп үтеүемсә, был закон ғаиләлә кемгә ҡарата көс ҡулланыла йәки кем ҡыйырһытыла - шуны яҡлауҙы күҙаллай. Бында инде ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, балалар ҙа, ата-әсәләр ҙә, ир-ат та ҡорбан ролендә булыуы мөмкин. Сөнки әлеге ваҡытта яңғыҙ әсәһенең йәки атаһының пенсияһына ҡарап ултырыусылар, пенсия аҡсаһын эсергә талап тигәндәй алыусы балалар ҙа бар. Закон ҡабул ителә ҡалһа, ул тап ошо ҡыйырһытылыусыларҙы яҡлаясаҡ.

Ысынлап та, көслө зат булырға тейешле ир-аттарыбыҙ ҙа һуңғы ваҡытта үҙ бәҫен бик төшөрҙө, позицияларын бирҙе, тиергә мөмкин. Уның ҡарауы, ҡатын-ҡыҙҙар тормошта ла, йәмғиәттә лә уларҙы мөйөшкә ҡыҫырыҡлай. Ижтимағи тормошта ла, эшҡыуарлыҡ өлкәһендә лә, дәүләт хеҙмәтендә лә гүзәл заттар өҫтөнлөк ала бара. Был күренеш ғаиләләргә лә ят түгел. Әммә нисек кенә булмаһын, тиң хоҡуҡлылыҡ менән ғаилә принциптарын, ролдәрҙе бутарға ярамай. Ҡатын-ҡыҙ, ниндәй генә вазифа биләмәһен, тәү сиратта - ул ҡатын, әсә, ғаилә усағын һаҡлаусы. Уңышлы эшҡыуарҙар үҙҙәренең уңышының 80 проценты ҡатын-ҡыҙға бәйле тип белдерә икән, ғаилә ныҡлығының, именлегенең күпселек өлөшө лә гүзәл заттан тора.

**Ғаиләгә генә түгел, тотош йәмғиәткә ҡағылышлы тағы бер проблеманы урап үтеү мөмкин түгел - ул да булһа эскелек. Белгестәр, тикшеренеүселәр анализлауынса, бөгөн күпселек үлем, үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙар, юл-транспорт фажиғәләре, айырылышыуҙар, ғаиләләр тарҡалыу һәм башҡа кире күренештәрҙең сәбәбе шуға барып тоташа. Бәлки, ниндәйҙер закондар сығарыуға ҡарағанда, тәү сиратта, ошо афәттән ҡотолоу мөһимерәктер?**

- "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте был йәһәттән ҙур эшмәкәрлек алып бара һәм был эш башланып ҡына торған мәлдә РФ Дәүләт Думаһы депутаттарынан бер нисә кеше егеттәребеҙгә ярҙам күрһәткәйнек. Бөгөн был хәрәкәт киң ҡолас алды һәм шунынһы ҡыуаныслы - инициатива халыҡтың үҙенән сыға. Башҡортостан парламентарийҙарының күптән түгел ҡабул иткән законы ла был йүнәлештә ныҡлы терәк булыр, моғайын. Сөнки уға ярашлы, ауылда алкоголь һатыуҙы сикләү йәки тулыһынса тыйыуҙы халыҡ сходҡа йыйылып, үҙе хәл итә аласаҡ. Әммә был бер бөгөн генә тормошҡа аша торған проект түгел, уның һөҙөмтәһе лә йылдар үткәс күренәсәк. Ләкин шуныһы ҡыуаныслы, хәҙер байрам табындарында ла элекке кеүек эсеүселәр юҡ, күптәр машина йөрөтөү сәбәпле, бәғзеләр башҡа сәбәп менән эсмәй һәм уларҙы ҡыҫтамайҙар ҙа. Мин үҙем, ғөмүмән, эш урындарында корпоратив кисәләр үткәреүгә ҡаршымын. Хеҙмәткәрҙәренде ҡыуандырғың килә икән, әйҙә, аҡсалата бүләклә лә, ул иһә уны үҙе нисек тотонғоһо килә, шулай хәл итер.

Әммә законды кәрәкмәй тип булмай, сөнки ғаилә именлеген боҙоусы, көнкүрештә низағ тыуҙырыусы һәм йәберләүсе мотлаҡ эскән кеше тиеү ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Йәмғиәттә - зыялы, өйөндә тиран булыусылар ҙа юҡ түгел. Шулай уҡ кеше араһында теленән бал тамып, ғаилә ағзаларын һүҙ менән ҡыйырһытыусылар ҙа бар. Ҡайһы берҙә ғаилә ағзаларынан, балаларҙан, ололарҙан, "шундай әшәке һүҙҙәр менән битәрләгәнсе, бер һуҡһа, исмаһам, ауыртыр ҙа бөтөр ине", тигәндәрен ишетергә тура килә. Шуға күрә лә закон йәберләүҙең төрлө аспекттарын, зыян күреүселәрҙең барлыҡ категорияларын да күҙ уңында тотоп, көн талабынан сығып тәҡдим ителде лә инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аллаһы Тәғәлә үҙе булдырған һәр нәмәне һәм һәр йән эйәһен тиң күреп ярата. Ә инде төрлө касталарға, синыфтарға, категорияларға бүлеү - ул кешенең нәфсеһенең, уның кимәленең, үҙен башҡаларҙан юғары ҡуйыуының йәки, киреһенсә, түбән үҙбаһалы булыуының һөҙөмтәһе генә. Шуға ла иң мөһиме - һәр кемгә үҙенең баһаһын белеү, был Ерҙә кеше булып тыуғанһың икән, кеше сүрәтендә, кеше рәүешле, лайыҡлы йәшәү зарур. Ә кеше тигән атама - ул ғорур яңғырай...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

**✓ Тимәк, ул мәскәй әбей, ҡан көҫәгән убыр. Уға кешеләр араһында урын юҡ. Тиҙерәк был тирәнән китергә, икенсе ерҙә икенсе кеше булып йәшәргә генә ҡала.**



# Үлемдән ҡасып та...

**Байгилде МОТАЛЛАП**

**(Хикәйә)**

Кәбир тома ҡараңғыла, ҡаҡ түшәктә уянып китте. Нишләптер аяҡ-ҡулдарын да ҡыбырлата алмай. Әллә шул тиклем ойоғандар инде. Бер нисек тә ҡуҙғала алмаған, бар көсөн һалып, тороп ултырырға ынтылды. Тик маңлайы менән бәрелеп, кире урынына ауҙы, ауыртыуҙан ҡысҡырып ебәрҙе. Тауышы сәйер һәм тонок яңғыраны. Нимәләр уны һендереп алды, алыҫҡа ебәрмәне.

Был ни ғиллә? Ҡасан, ҡайҙа йоҡлап киткәйне әле ул? Бер нәмә лә иҫләй алманы. Әллә ныҡ иҫерек булдымы? Улын ерләгәйне бит. Армиянан цинк табутта ҡайтты...

Йәшен һуҡҡандай, зиһене асылды. Ҡәберҙән ҡайтҡас, ятып торғайны, башҡа бер нәмә лә иҫендә юҡ. Һыуыҡ. Ныҡ өшөгән. Аяҡ-ҡулын ҡуҙғатҡылай торғас, уларға иҫ ингәндәй булды. Бармаҡтары менән тәнен сырмаған сепрәкте ҡапшап, уның йоҡа тукыма икәнен белде. Тукта-тукта, уны биләп һалғандар түгелме? Арҡаһы, янбашы ҡатыла ятыуҙан һыҙлай.

- Булмаҫ, - Кәбир башына килгән ниндәйҙер ҡурҡыныс уйҙы ҡыуырға теләне. - Булмаҫ! Булыу мөмкин түгел!.. Әллә... Әллә ысынлап та ҡәберҙә ятаммы? - тағы торорға ынтылды. Башы менән бәрелеп, кире ауҙы.

- Йә, Хоҙай, мин ҡәберҙә! - хәлен тамам аңланы. Бер мәлгә аңын юғалтты, йөрәге өҙөлөп төшкәндәй булды. Сығырынан-сығып тулай, үкереп илай, башын тупраҡҡа, ләхет таҡтаһына бәргеләй башланы. Күпме дауам иткәндер был тулаҡ, ауыртыуға сыҙай алмай, тамам хәлһеҙләнеп тымып ҡалды. Ни өсөн уға былдай яза? Ниндәй гонаһтары өсөн? Аңы томаланып, хәлһеҙ бер килке яткас, зиһене кире ҡайтты: "Мин бит тере. Яҡты донъяны ни бары метр ярым тупраҡ ҡатламы ғына айыра", - тип үҙен тынысландырҙы.

Айбарланып, йәнен бирергә теләмәгән ҡорбан кеүек тулағанда кәфененән бушана яҙған. Бер ҡулын сығарҙы ла, биләүен таҡатты. Мосолмандарҙың кәфен бәйен сисеп ерләүе юҡҡа түгел икән. Сырмауҙан ҡотолғас, ятҡан урынын ҡапшап ҡараны: ләхеткә иркен алғандар. Аяҡ-ҡулын, ойоған тәнен ыуаланы, йылынырға маташты.

Ләхет таҡталарын барлап сыҡты, терәлгән баштарын ҡапшап ҡараны. Ныҡ ултыралар. Ауыл зыяратының тупрағы йомшаҡ балсыҡ булһа ла, аралаш ялпаҡ таштар ҙа осрай. Һәрмәнә торғас, бер таш осон эләктереп алды. Иләп кенә тарткайны, ҡумшығанын тойҙо. Ике ҡуллап аҫҡа ҡайырҙы.

- Булды. Сөбхәналла! - Кәбир ҡыуанысын йәшермәне. Теүәл иҫәп менән бик һаҡ тотонғанда, ҡотоласаҡ. Ситтәге ләхет таҡтаһын тәүҙә аҫҡараҡ шылдырырға һәм ҡайырып алырға ине иҫәбе. Йәйпәк таш менән тәүҙә таҡтаның аҫҡы осо тапҡырын үҙенә ҡарай соҡоно. Йомшаҡ ер ныҡ зарыҡтырманы.

- Ярай, артығы кәрәкмәҫ. Сабыр ит, - тип Кәбир үҙен туктатты ла, таҡтаның өҫкө осо терәлгән ергә тотондо. - Әһә, булды, - аҫтағы соҡорҙо тәрәнәйтте. Уны таҡталар рәте буйлап канау рәүешендә дауам итте. Канауы ла әҙер булды. Асырғанып, арыу-талыу белмәй эшләне. Саң тын юлына ултыра башлағас, кәфененең бауы менән танауын, ауыҙын бәйләне, битлек аша тын алды. Кәфенен тәңкләп янбашы, терһәге аҫтына һалғайны.

Таҡтаны ҡайырырға булып, ташты ярыҡҡа тыҡҡанда, йөрәге дөп-дөп килеп типте, ҡулы ҡалтыранды. Иләп кенә баҫҡайны, таҡта "гөрҫ" итеп урынынан шыуҙы. "Булды, булдырҙым!" - тип йән атты Кәбир. Саф һауа һулағыһы, ҡояшты күргеһе килеп, талпынды, донъяға тыуырға ашыҡҡан бала шикелле тыпырсынды.

Ҡыуанырға иртәрәк ине әле шул. Нисек кенә айбарланып тартмаһын, таҡта артабан ҡайырылманы. Тырнаҡтарын айырып бөттө, бармаҡтары ҡанһыраны.

- А-а-а, - әҗәлен тапкан йыртҡыстай үкереп, Кәбир ҡаҡ ергә ауҙы, асырғанып, йоҙроҡ менән ерҙе төйҙө. Сараһыҙлыктан аңы томаланды. Һауа ла бөтөп бара ине тар ҡәберҙә. Башы әйләнде.

Һеңгәҙәп күпме ятҡандыр, кесе ярау иткеһе килгәнен тойҙо. Тукта. Ятҡан тупрағы балсыҡ бит. Саҡ ҡына сылатып ебәрһәң, май кеүек була ла ҡуя ул.

Соҡоған канауына йәтешләп яҡынларға маташып ҡараны. Юҡ, тар урында бер нисек тә булдыра алманы. Уңайлап ятты ла, яраубын әҙләп усына йыйҙы, ҡәҙерле алтындай, бер тамсыһын да сайпылдырмай, таҡтаның осондағы ерҙе сылатты. Шунан канауҙы буйлатты. Бүлеп кесе ярау итеү ғазапҡа тиң. Кәбир түҙҙе. Бер генә тамсыһын да әрәм итмәне.

- Йә, Хоҙай, бирсе ҡеүәт, - ике ҡуллап таҡтаға йәбеште. Ҡуҙғалды ул, ҡайырылып та ятты. Өҫтән шауҙырлап ер ҡойолдо. Битлек аша ла тын тамағын ҡапланы. Кәбир ҡойолған балсыҡты ҡулы, аяғы менән төпкә ышырҙы. Бер мәл ер ҡойолоуҙан туктаны. Ҡыуышлыҡҡа ҡулын тығып ҡараны, буйы етмәне. Таҡта менән төрттө. Ер ҡабаттан ҡойола башланы. Ләхеттең тағы бер таҡтаһын алғайны, тупраҡ уйылып килеп төштө. Барлыҡҡа килгән ҡыуышлыҡҡа сүкәйеп баҫты ла, бушлыкты ҡапшап ҡараны. Өҫтә ҡаҫ ине.

Тимәк, күп ҡалмаған. Иләп кенә бер кәҫте аҫҡа төшөрҙө, икенсеһен, өсөнсөһөн.

Саф һауа үпкәһен ярып ингәндәй булды, иҫертеп, быуындарының хәлен алды. Артабан Кәбир үҙенең һәр хәрәкәтен кадрҙарын яйлатып күрһәткән кинофильмдағы кеүек күрҙе. Бына ул аяғүрә баҫты. Башын бороп, тирә-яҡҡа баҡты, айлы ҡышҡы төндөң яҡтыһына күҙе сағылды. Кинәт өҫкә ынтылды һәм ҡәберенә ауҙы. Ошо ябай хәрәкәттәр, уларҙы үҙ эсенә алған бер нисә секунд мәңгелектәй оҙон тойолдо, әйтерһең дә, йәһәннәмгә барып әйләнде.

Услап алып, ҡар ашаны. Йотҡан һәр тамсының ләззәтен сарсаған тәненең бар күҙәнәге менән тойҙо. Ҡарҙы ашаны ла ашаны. Ҡалтыранып өшөһә лә туктай алманы, сарсағайны.

Аягүрә тороп баҫты, ойоп ҡатҡан тәнен ыуаланы. Ауыл яғына ыңғайлап, бер, унан ике аҙым эшләне. Яңы тәпәй баҫҡан бала кеүек ине ул. Һәр килеһе аҙымын ышанысылыраҡ баҫты. Оҙаҡламай өйөндә лә булыр. Унда-бында тәҙрәһендә уты һүнмәгән йорттар ҙа күренә башланы. Тәүге өйгә үк инеп, йылынып сығыр, шунан үҙҙәренә, ғаиләһенә ҡайтыр.

Талпынып атлаған Кәбир кинәт туктап ҡалды. Ул бит үлгән. Ҡәберҙән ҡайтмайҙар. Ишеткәне юҡ ундай хәлде. Имеш, мәскәй әбейҙәр генә үҙ ҡәберенән сығып, кеше ҡаны эсеп йөрөй, тип һөйләй торғайны элек ололар. Ул да үҙ ҡәберенән сығып килә. Тимәк, ул - мәскәй әбей. Ниндәй ҡиәфәттә бит: ялангас, аҡ кәфенгә төрөнгән. Осраған беренсе кеше үк ҡулында нимә бар - шуның менән мейеһен күсерә һуғасаҡ. Кәбир шып туктаны. Нишләргә? Бына ғиллә: ҡәберҙән ҡотолоп сыҡты, ә үҙ йортона ҡайта алмай.

Тәүҙә, исмаһам, кейем табып кейергә кәрәк ине. Ауылдан саҡ ҡына арыраҡ торған фермаға күҙе төштө. Күп йылдар унда эшләне, һәр мөйөшөн, һәр ишеген белә.

Ҡарауылсы Мырҙагилдене лә һәйбәт белә, этен таный. Мырҙагилде үҙенең өкөләгән ҡарауыллай - фермала эше юҡ уның.

Кәбир малсылар урлап фураж сығарған ҡойма ярығынан ялан кәртәгә, унан ферма эсенә инде. Үҙәгенә үткәнсе өшөгәйне. Һарай эсе ныҡ яғылған өй кеүек йылы тойолдо.

Үлеп асыҡҡан. Һөт мискәһе торған бүлмәгә ыңғайланы. Киске һауын һөтө иртәнгеһе менән оҙатыла, мискә яртылаш тулы ине. Услап эсергә кереште. Ашҡаҙаны аҡ ризыкты ла ҡабул итмәне. Укшытты. Хәлһеҙләнеп, иҙәнгә сүкте. Бер килке ултырғас, малсыларҙың аш бүлмәһенә инде. Электр плитаһын ҡабыҙып, сәйнүк ҡуйҙы. Шкафтан шәкәр, сәй тапты. Йылымыс таллы һыу менән ҡорһағын алдарға булды. Бәләкәй йотомдар менән эсте. Йылылыҡ бөтә тәненә йүгерҙе, хәл ингәндәй булды.

Ултырған урынында ойоп киткән ерәнән ҡапыл һиҫкәнеп уянды. Ул ҡайҙа? Нимә эшләй? Күҙе өҫтөндәге аҡ кәфенгә төшкәс, һушына килде, һикереп торҙо. Кейем табырға кәрәк!

Сөйҙәге барлыҡ әйберҙәрҙе һыпырып төшөрҙө. Иҫке трико, халат, алама кәпәсте эләктерҙе. Һике аҫтында резина итек тапты. Йәһәтләп кейенде. Кеҫәһенә моҡсай менән шәкәрҙе, булған бер нисә һыныҡ икмәкте тыҡты, шешә табып, һыу ҡойоп алды. Ҡабаланды, сөнки оҙаҡламай иртәнге һауынға килә башлаясаҡтар. Арлы-бирле бүлмәне йыйыштырҙы ла, лапаҫҡа менеп, һаламға күмелеп ятты.

Оҙаҡ көттөрмәне һауынсылар. Тауыштары ишетелә башланы.

- Уф, Аллам. Бөгөн йоҡом йоҡо булманы, - Фәрзәнә, тип таныны Кәбир был тауыш хужаһын. - Хәлим эсеп ҡайтты ла, төнө буйы ҡаңғырҙы.

- Шул алкаш менән йәшәйһең бит, ҡыуып ҡына сығармайһың үҙен, - Шәмсиә быныһы. Ире әллә ҡасан мәрхүм. Әхирәттәренә гел бер кәңәш бирә - ирҙәрен өйҙән ҡыуырға ҡоторта.

Ҡатындар, һәүкәшләп, эшкә тотондо. Йоҡоға талған Кәбир тауышҡа уянып ките.

- Шәмсиә апай, мынау ерҙә, ҡыйыҡта, әллә нәмә баянан бирле ҡыштырлай. Нимә икән?

- Сыскандыр.

- Юҡ, оло нәмәгә оҡшай, бүре булмағайы?

- Ҡуй, юкты. Ниндәй бүре булһын. Ишетелмәй ҙә баһа.

- Тымды. Тауыштан ҡурҡты шикелле.

- Ҡурҡанға ҡуш күренә инде.

Кәбир һауын бөткәнсе ҡымшанырға ла ҡурҡып ятты. Күрәһең, ныҡ тулағандыр. Кәфендән арына алмай икән, имеш, тип төш күргәйне.

Һарайҙа тауыштар тынғас, аяҡ-ҡулдарын яҙып, ыуалаштырып алды, ҡыйыҡ эсендә йөрөштөрҙө. Һыуға шәкәр һалып, әҙләп-әҙләп кенә йотто. Ебетеп икмәк ашаны. Ҡыйыҡ ярығынан ауылды күҙәтте.

Киске һауын да үтеп китте. Аяҡ тауыштары һилләнгәс, Кәбир кире һарайға төштө. Малсыларҙан ҡалған ризыкты әҙләп ашаны, һөт эсте. Был юлы ашҡаҙаны ауыртманы. Төндә йылыла, йомшаҡта үткәрҙе. Иртәнсәк тағы һарай башынан урын алды. Әҙме-күпме ашау, йоҡо эләккәс, хәл инде, зиһене яҡтырҙы.

Үҙенең хәлен ул аңлай. Өйөнә ҡапыл ҡайтып инһә, яҡындарын ҡурҡытасаҡ. Уны яңылыш тере көйө ерләгәндәрен нисек аңлатыр. Ҡайтмайынса ла булмай. Ҡалған бөтә ғүмерен, ырағай януар кеүек, боҫоп, йәшенеп үткәрә алмай бит инде. Уйҙарын Фәрзәнәнең тауышы бүлдерҙе.

- Шәмсиә апай, мин ҡурҡам. Хәлим оҙатып килде. Мәрхүм Кәбир ағай мәскәй әбейгә әйләнгән тей бит. Ҡәберенән сыҡҡан.

- Мин дә йоҡламаным бөгөн. Ятманым да. Балта тотоп ултырҙым, - Шәмсиә шыбырлап һөйләне хәбәрен.

- Һунарсы Ғәбит бабай сәйер эҙ күреп юллаған тей бит. Эҙ ауылға тиклем килгән дә, юғалған. Бабай кирегә китеп, Кәбир ағай мәрхүмдең ҡәберенә барып төртөлгән. Унда ҙур тишек тей. Ҡаҙып килеп сыҡҡан. Уй, ҡурҡам. Ыстағарифулла, ыстағарифулла! Һаҡла, Хоҙайым, һаҡла, Хоҙайым! - Фәрзәнә илағандай итте. - Ҡан эсә, ти бит.

- Теге остағы Фәриғәнең тауыҡтарын вис быуған, тей. Көсәйеп алһа, ҙурыраҡ малға, кешегә лә тейә башлар әле.

- Мәскәйҙәр кеше ҡанын ғына эсә ул. Нишләп улайтты икән Кәбир ағай? Һәйбәт кеше ине бит.

- Белмәгәнбеҙ инде. Һәйбәт булып күренгән генә.

- Райондан милиция килгән. Вис тикшерәләр, тей. Ҡәберен ҡаҙып ҡарағандар, мәйет юҡ икән. Эҙенән эт ебәргәндәр. Ауылға еткән дә, ары китмәгән. Юлға сыҡҡа, унда, ней, башҡа эҙҙәр араһында юғалғандыр. Ауылда йөрөй инде ул убыр. Кисә ҡыйыҡта нимәләр ныҡ ҡыштырлағайны. Әллә улмы икән?

- Ауыҙыңдан ел алғыры! Юкты һөйләмә. Әйҙә, эшкә тотонайыҡ.

Кәбир шаҡ ҡатты. Тимәк, ул мәскәй әбей, ҡан көҫәгән убыр. Уға кешеләр араһында урын юҡ. Тиҙерәк был тирәнән китергә, икенсе ерҙә икенсе кеше булып йәшәргә генә ҡала. Эҙләй башлаһалар, табып алырҙар, аңын-тоңон аңғартҡансы, харап итеп тә ҡуйырҙар.

Киске һауындың тамамланыуын көтөп алды ла, юлға төйнәнә башланы. Ҡарауылсы яғында ниндәйҙер тауыш ишетеп, ҡолаҡ һалды.

- Мырҙагилде ағай, ас. Көмөшкә бар, эсәйек, - тауышы Хәйҙәрҙекенә оҡшаған. Моғайын, фураж һатып алған көмөшкәһен ҡайҙа эсергә урын тапмай йөрөйҙәр. Шығырлап ишек асылды:

- Инә һал. Мәскәй әйәреп ҡуймаһын.

- Әкиәткә ышанаһыңмы әллә, ҡурҡаҡ.

- Әйҙә-әйҙә, - ишек "шап" ябылды.

Күпмелер ваҡыт үткәс, Кәбир ҡарауылсы өкөләгә янына яҡынланы. Йүнлерәк аяҡ кейеме кәрәк ине. Ишекте эткәйне, асылып китте. Күрәһең, эскеселәр хәжәтенә сыҡҡан да, бикләргә онотҡан. Ике әшнә бер карауатта иҫ белмәй ята. Һыйҙары мул булған икән. Һике аҫтынан эт ырылдағайны, исемләп өндәшкәс, тымды.

Кәбир иҙәндә ятҡан быйманы кейҙе. Өҫтәлдә башланған шешәне күреп, ҡуйынына тыҡты. Кәрәге тейер. Ит киҫәге, икмәк, шәкәр - булған ризыҡты йыйнап, төйнәне.

Хәҙер юлға сыҡһа ла була.

**(Дауамы бар).**

***✓ Ҡайһы берҙә йәш башҡарыусылар "Бәйләнештә" сайты өсөн генә ижад итә кеүек тойолоп китә. Клип төшөрөп, интернетҡа ҡуя ла, лайктар йыйып, ҡәнәғәтлек кисерә. Сәхнәгә ҙур маҡсаттар менән аяҡ баҫырға кәрәк.***

*ИЖАДХАНА*

# ЯҘМЫШТЫҢ ҺӘР ТӘҠДИМЕНӘ...

## "Эйе" тип яуап бир!



**Тормош көн һайын һәр кемгә тиҫтәләгән мөмкинлектәр бирә. Тик кемдер уға, "Эйе", тип әйтергә ҡыйыулыҡ таба, кемдер был мөмкинлектәргә иғтибар ҙа итмәй, тапалған юлы менән бара бирә. Бөгөнгө геройыбыҙ - М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Шәһит Хамматов тап ана шул ҡыйыуҙар һәм үҙ яҙмышын үҙе яҙыусылар рәтенән. Йәш, әммә танылыу яулап өлгөргән актер менән әңгәмәбеҙ уның ижады, театрға алып килгән юлы, милли сәнғәт хаҡында булыр.**

### "Баян нимә ул?"

Бәләкәй саҡта йырларға һәм һуғышырға ярата торғайным. Уҡырға төшкәс, мәктәптә иң шаян малай булғанмындыр, моғайын. Беренсе класты тамамлағас, әсәйем мине Сибайға, Өфө сәнғәт академияһы эргәһендәге урта махсус музыка мәктәбенең филиалына уҡырға бирергә булды. Унда йырларға өйрәтәләр, тине. Мин: "Ә һуғышырға өйрәтәләрме һуң?" тигән һорауыма ыңғай яуап алғас, бик теләп, талпынып барҙым. "Нимә тип кенә һораһалар ҙа, икеләнмә лә, оялма ла, "Эйе", тип яуап бир", - тине әсәй. Индем, йырлап күрһәттем. Комиссия рәйесе Наил Ғәйетбай минең йырлауымды оҡшатты ла, баянда уйнай беләһеңме, тип һораны. "Эйе", - тием. "Һәйбәт уйнайһыңмы?" - ти. "Эйе", - тип яуаплайым тағы ла ышаныслыраҡ итеп. Сыҡтым да, әсәйемдән: "Әсәй, баян нимә була ул?" - тип һораным. Ошо минең һорауым ауылыбыҙҙа лаҡап булып таралды ла инде. Был ваҡиғаға 20 йыл үткән, ҡайтҡан һайын ауылдаш ағайҙар: "Шунан, ҡустым, баяндың нимә икәнен белдеңме инде?" - тип шаяртталар.

Тормоштоң һәр тәҡдименә "Эйе!" тип яуап бирергә кәрәклегенә бәләкәй саҡтан уҡ төшөндөм шулай. Кешенең эшләй белмәгән бер нәмәһе лә юҡ, бары тик ҡыйыулыҡты йыйып, тотонорға ғына кәрәк. Баяндан тыш, пианино, ҡурай, ҡумыҙ, хатта кларнетта уйнай беләм хәҙер. Сөнки Сибай музыка мәктәбендә өс класс уҡығандан һуң, уҡыуҙы Өфөлә дауам иттем, һуңынан Өфө сәнғәт училищеһында тынлы музыка ҡоралдары бүлегендә уҡыным. Театрға ылығып китеүем училищела уҡып йөрөгәндә булды. Илшат Йомағоловтың "Нәркәс" спектакленең премьераһына барып, беренсе тапҡыр илап ҡайттым. Ниндәйҙер таҙарыныу, үҫеш кисергән кеүек булдым. Училищены тамамлаған йылда Тансулпан Бабичева курс йыя ине, актер булырға хәл иттем. Имтихандар тапшырған мәлдә аҡсабыҙ бөтөп, дуҫтар менән Салауат Юлаев һәйкәле янында шешә йыйып тапшырып, аҡса эшләгән, йоҡларға урын булмайынса, бисмиллабыҙҙы уҡый-уҡый, төҙөлөп ятҡан сиркәү бинаһында йоҡлап сыҡҡан ваҡыттар ҙа булды. Бына шунан башланып китте лә инде күңелле, ығы-зығылы актер тормошо.

### Һәр ваҡиғанан фәһем ал

Интернатта, училищела, һуңынан академияла уҡыған йылдарым мине белемдән тыш, тағы бер ҙур байлыҡтың эйәһе итте - унда мин күп таныштар, ысын дуҫтар таптым. Тормоштоң асылына иртәрәк төшөндөм, ихтыяр көсөм нығынды, яҡшыны - ямандан, дуҫты дошмандан айырырға һәм һәр осраҡтан, һәр ваҡиғанан һабаҡ, фәһем алырға өйрәндем. Матур йәшәү өсөн иң кәрәкле сифат - зарланмау икәнен аңланым. Әгәр ҙә мине ҡурсалап, хаталарҙан, ниндәйҙер эштәрҙән бер туҡтауһыҙ аралап торһалар, үҙ фекерем дә булмаҫ, ғөмүмән, бөгөн мин бөтөнләй икенсе кеше булыр инем. Тыуған йорттан иртә сығарып ебәреүе әсәйемә еңел булмағандыр. Балаһын һәр аҙымда хәүеф, һынауҙар һағалап торғанын да белгәндер. Бер тапҡыр шулай икенсе класта уҡып йөрөгәндә автобус менән Хәлилгә килдем, унда Гөлнара апайым мине ҡаршы алып, Урал ауылына барырға тейешбеҙ. Ҡыш, күҙ асҡыһыҙ буран, ҡараңғы, апайым, уның әхирәте, мин - өсәүләп 16 саҡрым тирәһе араны йәйәү атланыҡ. Алға йүгереп китәм дә, апайҙар килеп еткәнсе, хәл йыйып ултырам. Әсәй билмән бешереп, банкаға һалып ебәргәйне, шул туңған билмәндәрҙе ашағаным хәтерҙә. Әммә был ваҡиға ла бер ҡыҙыҡ ҡына булып хәтерҙә ҡалған. Шулай үҙ аллы булырға, бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмаҫҡа ла өйрәнелде.

### Һәләтле ижадсылар ҡайҙа?

Театрҙа эшләй башлауыма әле биш йыл ғына, шуға ниндәйҙер ҡыҙыҡлы ролдәр әле алдалыр, тип уйлайым. Ғөмүмән, ниндәй генә роль башҡарһаң да, иң тәүҙә, битараф булырға ярамай. Шул уҡ Чиполлинону уйнау өсөн сәхнәгә йөҙөнсө тапҡыр сыҡһаң да, ялҡмаҫҡа, эшеңде яратып башҡарырға кәрәк. Актерҙар араһында режиссер ҡушҡанды ғына үтәп, эшкә ваҡыт уҙғарыу өсөн генә йөрөгәндәре лә булалыр. Тик былай ағым ыңғайына ағып барыусылар, шулай уҡ дан-шөһрәт артынан артыҡ сабыусылар араһында ла түгелмен. Кеше гел хәрәкәттә булырға тейеш, тик атты тотоп килгән дилбегә һымаҡ, үҙеңдәге хистәрҙе, теләктәрҙе теҙгендә тота белергә кәрәк. Ярышта еңәм, тип, янып үлгән аттар ҙа була. Эшең, ҡылыҡтарың күңеленә тыныслыҡ, ҡәнәғәтләнеү тойғоһо килтерһә, дөрөҫ тиҙлектә бараһың.

Актер өсөн сәхнә менән тормошто бутамау мөһим. Тик шулай ҙа сәхнәлә артыҡ уйнарға ла кәрәкмәй, ундағы тормош ғәҙәти тормоштан бер нәмәһе менән дә айырылмай. Кемдер, роль өҫтөндә эшләйем, тип, үтә шаштырып ебәрә. Образ бит ул кәбән ҡойған кеүек, бесәнде ташлап бөткәс, кәбәнде матурлап, тырма менән тарап сығаһың. Станиславский ҙа, еңел, ябай итеп эшләгеҙ, тип әйткән бит. М. Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса ҡуйылған "Донъяның ярҙары икәү" спектаклендә Кендек ролен биргәс, Таңсулпан Даһи ҡыҙы Бабичева, эҙлән, тигәйне. Автор һүрәтләүенән тыш, был малай ҡайҙа нимә күрә, ниндәй һыу эсә, ниндәй уйын уйнай - ошоларҙың барыһын да күңелемдән үткәреп, яратып эшләгәйнем. Мине тап ошо роль актер булараҡ үҫтерҙе, донъяға бөтөнләй икенсе төрлө ҡарай бушланым. "Ташлама утты, Прометей!"ҙа Гермес ролен сәхнәгә сығарыу шулай уҡ ҙур мәктәп булды. Үкенескә күрә, был спектаклдәр әле сәхнәлә бармай, ә бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда бик фәһемле әҫәрҙәр ине.

Әйткәндәй, бөгөнгө тамашасы сәнғәтте яҡшы аңлай. Элек әйтер һүҙ, фекер булһа, хәҙер мәғлүмәт, технологиялар заманы. Театр өлкәһендә барған бөтөн эксперименттар тамашасыны аптыратыу өсөн тәғәйенләнә, миңә ҡалһа. Әммә театрҙың традицион нигеҙе, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юғалып ҡала ҡайһы саҡта. Тамашасыны ышандырырҙай, актерҙарҙың күҙҙәрендә оҫҡондар уята алырҙай лидерҙар юҡ. Дәүләт күпме кешене уҡытып сығара, тик ҡайҙа ул йәш режиссерҙар, һәләтле актерҙар? Уларҙың үҙ һөнәре буйынса түгел, башҡа ерҙә эшләп йөрөүенән милли сәнғәт күтәрелеш кисерә алмаясаҡ, шуныһы бигерәк йәл.

### Йәштәр оҡшай миңә

Театрҙағы төп эшемдән тыш, йәштәр араһында үткән төрлө сараларҙа ҡатнашырға тырышам. Бөгөнгө йәштәр оҡшай миңә, улар донъяға бөтөнләй икенсе, ыңғай ҡараш менән йәшәй. Мин башҡорт, тип ҡысҡырып йөрөп кенә түгел, белеме, аҡылы, тырышлығы менән сәнғәт, фән, спорт өлкәһен алға этәрәсәк йәштәребеҙ үҫеп килә. 15 йылдан беҙҙең йәмғиәт икенсе тормош, икенсе уйҙар менән йәшәренә өмөтөм ҙур.

Милли эстраданың кимәленә килгәндә иһә, бөгөн ул ҡатлам-ҡатлам ятҡан ҡоймаҡ һымаҡ. Театрҙарҙың, филармонияның, телевидениеның, радионың, "Башҡорт йыры" бәйгеһенең, сит республика йырсылары ҡуйған концерттарҙың һәм, әлбиттә, "Бәйләнештә" социаль сайтының үҙенең артистары һәм тыңлаусылары бар. Улар төрлөһө төрлө яҡта йөрөй, ниндәйҙер берләштереүсе, контролдә тотоусы махсус ойошма юҡ. Шуға күрә үҫеш тә, юғары кимәл дә юҡ. Бына мин өс меңгә аранжировка эшләтеп, сығып йырлайым, тиһәм, берәү ҙә тыймаясаҡ. Бөгөн йырсыларҙан кем тулы зал йыя ала икән? Рөстәм Ғиззәтуллин, Сәғиҙулла Байегет кеүек артистарҙан тыш, бик һирәктәр быға өлгәшә аласаҡ. Ҡатын-ҡыҙ башҡарыусылар араһында ундайҙар бөтөнләй юҡ кеүек. Ҡайһы берҙә йәш башҡарыусылар "Бәйләнештә" сайты өсөн генә ижад итә кеүек тойолоп китә. Клип төшөрөп, интернетҡа ҡуя ла, лайктар йыйып, ҡәнәғәтлек кисерә. Сәхнәгә ҙур маҡсаттар менән аяҡ баҫырға кәрәк. "Мин халҡыма үҙ һүҙемде әйткем килә" менән "Минең йырлағым килә" тигән теләк араһында айырма ҙур.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

---

*ЗАУЫҠ*



## ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Ир менән ҡатын араһы
Үҙе бер серле китап,
Уҡымаһын уны ситтәр,
Йөрөмәһендәр бутап.
Әсәйемдең был һабағы
Ҡолаҡта һаман сыңлай:
"Донъя булғас, һауыт-һаба
Шалтырамайса булмай".
Иремә зарланмаҡ булдым,
Эҙләп әсәй ышығын:
"Ятҡанын һөйләмәйһең -
Һөйләмә ҡытыршыһын!
Аҡыллы ҡатын иренең
Данын илгә таратмаҫ,
Һин кисереп, оноторһоң,
Ә башҡалар онотмаҫ".
Заманында ауыр алдым,
Хәҙер көлөп иҫкә (а)лам:
"Үпкәләмә, һин үҙең дә
Бүләк түгелһең, балам!"
Эйе, әсәй, бүләк түгел,
Мин - сюрприз.
Шуны беләм:
Һинең кәңәштәрең менән
Һаман да йәшәп киләм.
Донъя булғас, һауыт-һаба
Шалтырамайса тормай,
Шулай ҙа беҙҙең китапты
Сит кешеләр уҡымай.

* * *

Кеше шатлығына шатланырға
Бәләкәйҙән әсәй өйрәтте:
"Көнсөл кешеләргә, балаҡайым,
Дошман кәрәк түгел!"- тип әйтте.

Бер кемгә лә дошман кәрәк түгел!
Көнсөлдәргә ниңә айырым
Дошман кәрәк түгел икәнлеген
Йәшәй-йәшәй үҙем аңланым.

...Кеше һөйөнөсө көнсөлдәргә
Тамағына торған һөйәктәй:
Яңы күлдәкме ул, шат хәбәрме -
Көнләшеүгә күп тә кәрәкмәй.

Уның өлөшөнә ингәнме ни -
Тынғы бирмәй кеше бәхете,
Башҡаларҙың шатлыҡ-һөйөнөсө,
Әйтерһең дә, уның ләхете.

Көнсөл кеше үҙен-үҙе ашай,
Бөтә сирҙең башы - көнсөллөк,
Күңелеңдә ошо ҡорт йәшәһә,
Ҡартайыуға сәбәп көн элек.

Йәлләйем мин ошо бахырҙарҙы:
Көнсөллөк бит - үҙе яман сир,
Яман сирҙән йүнәлергә мөмкин -
Көнсөллөктән дауа берәү - гүр.

Көнсөлдәргә йылмайыуым - ағыу,
Яңы күлдәк кейһәм - йәрәхәт,
Бахырҙарға ярты үлем инде
Тормошомда булһа бәрәкәт...

Көнсөлдәргә дошман кәрәк түгел,
Иң ҙур дошман йәшәй үҙендә.
Оя ҡороп ҡуймаһындар берүк
Ошо ҡорттар һеҙҙең күңелдә.

Тормош үҙе ҡат-ҡат иҫбат итә:
Хаҡлы булған икән әсәйем.
Кеше шатлығына осоп-ҡунып
Ғүмер буйы рәхәт йәшәйем.

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЭШ УРЫНЫНДА... гөл үҫтер

■ Фин ғалимдарының яңы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, кеше үҙен сәләмәт тойһон өсөн уға тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡлау мотлаҡ. Тикшеренеүселәр билдәләүенсә, йоҡоһо туймаған хеҙмәткәрҙәр һирәк ауырый. Ғалимдар йоҡо менән ауырыу сәбәпле эшкә бармай ҡалған көндәр тураһындағы мәғлүмәттәрҙе берләштереп, йоҡо өсөн иң уңайлы ваҡытты иҫәпләп сығарған. 30 йәштән өлкән 1875 ҡатын-ҡыҙ менән 1885 ир-егет ҡатнашҡан һынауҙар күрһәтеүенсә, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар йышыраҡ ауырый икән. Ә кем тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡлай, улар дауахана тупһаһын һирәгерәк тапай. Ир-егеттәр өсөн төнгө йоҡо 7 сәғәт 46 минут, ә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 7 сәғәт тә 38 минут тәшкил иткән. Йоҡо туймағанда кеше яңы мәғлүмәтте ҡабул итә алмай, иғтибарлылыҡ, хәтер насарая. Бындай кешеләрҙең энергияһы түбән, кәйефе насар була.

■ Банан кеүек составында калий күләме ҙур булған ризыҡтар инсульт хәүефенән һаҡлай. Калий ҡан баҫымын нормала торорға ярҙам итә. 11 йыл буйына 50 йәштән 79 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәләмәтлеген тикшергәндән һуң, калийға бай ризыҡтарға өҫтөнлөк биреүселәрҙең йөрәге башҡаларға ҡарағанда сәләмәтерәк булыуы асыҡланған. Ишемик инсульт хәүефе 27 процентҡа түбәнәйгән. Әммә юғары ҡан баҫымы менән сирләүселәргә был асыш ярҙам итмәйәсәк. Шуға ла ҡан баҫымы менән проблемалар башланмаҫ элек организмды калий менән байытыу күпкә мөһимерәк. Калий һөйәк системаһына ла файҙалы, ул организмдан кальцийҙың йыуылып сығыуын тотҡарлай. Көнөнә кеше 2,611 мг калий ҡабул итергә тейеш.

■ Хеҙмәткәрҙәрҙең эшкә һәләтлелеге юғары булһын тиһәгеҙ, эш урынында гөлдәр үҫтерегеҙ, тип кәңәш итә Кардифф университеты психологтары. Эш урындары йәшелләндерелгән хеҙмәткәрҙәр үҙ тормошо менән күпкә ҡәнәғәт була икән. Бөйөк Британияла һәм Голландияла урынлашҡан ҙур ике офиста үткән экспериментта бер бүлмәгә күп итеп гөлдәр ҡуйғандар. Өс ай үткәндән һуң, был бүлмәлә эшләүсе хеҙмәткәрҙәрҙең эшкә һәләтлелеге 15 процентҡа күтәрелгән. Офисты биҙәүгә киткән сығымдар хеҙмәткәрҙәрҙең йәшәү сифатын ғына түгел, уларҙың эшенең сифатын да күтәрә, ти белгестәр. Тағы бер тикшеренеү күрһәтеүенсә, үҫемлектәр үҫкән офиста эшләүселәр һирәк ауырый, сөнки япраҡтар һауаны таҙарта.

■ Environmental Research Letters журналында атмосфера бысраныуы һөҙөмтәһендәге үлем осраҡтары статистикаһы баҫылған. Тикшеренеүселәрҙең фекере буйынса, йыл һайын бөтөн донъяла атмосфера бысраныуы һөҙөмтәһендә тыуған сирҙәрҙән 2,1 млн кеше үлә. Кешелек эшмәкәрлеге тирә-яҡ мөхитте бысратып ҡына ҡалмай, озон ҡатламын да боҙа. Был респиратор ауырыуҙары, астма, үпкә яман шеше сирҙәрен барлыҡҡа килтерә. Бысратылған атмосфераnан бигерәк тә Көнсығыш һәм Көньяҡ Азия илдәре зыян күрә. Насар һауа ауырлы ҡатындарға ла йөгөнтө яһай, шуға ла төрлө зәғифлек менән тыуыусы балалар һаны күбәйә барыуын ғалимдар күптән асыҡлаған.

КӨН ҠАҘАҒЫ

# "АЛТЫН ЯМҒЫР" КЕМГӘ ЯУА,

## йәки Импорт тауарһыҙ йәшәй алабыҙмы?



**(Башы 3-сө биттә).**

Аграр маркетинг институтының генераль директоры Елена Тюрина иһә был хәлде шулайыраҡ аңлата: "Хаҡтарҙың ҡимmәтлегенә иң беренсе климат шарттары сәбәпсе. Бразилиялағы кеүек, беҙҙең һыйырҙар йыл әйләнәһенә ҡояш аҫтында йөрөмәй. Ниндәйҙер файҙа алыу өсөн уларҙы ашатырға, йылы урында торорға кәрәк. Был иһә өҫтәмә сығымдар талап итә. Урындағы етештереүселәр, эшҡыуарҙар был финанс сығымдарын дәүләт ярҙамынан тыш, үҙе генә күтәрә алмай. Аграр яҡтан үҫешкән илдәрҙә хәл бөтөнләй башҡаса. Дәүләт фермерҙарҙың коммуналь хеҙмәттәрен түләй, уларға субсидия, дотация бүлә, кредит ставкаларын түбән ҡуя. Сит илдә фермерҙарҙың техник базаһы ла күпкә яҡшы, бер нәмә лә беҙҙәге кеүек ҡул көсө менән эшләнмәй, экспорт тауар өсөн фермерҙарға аҡсалата ярҙам да күрһәтелә. Эшҡыуарҙар уны бизнесын артабан үҫтереүгә һала һәм тауарын күпкә осһоҙ хаҡ менән ситкә сығарыу мөмкинлегенә эйә була".

Бына ни өсөн АҠШ фермерҙары үҙҙәрендә бөтөнләй үтемһеҙ булған тауыҡ боттарын ҡыуана-ҡыуана беҙгә ебәрә. Беҙҙә уны ҙур теләк менән һатып алалар, сөнки хаҡы үҙебеҙҙекенән сифатлы иттән күпкә осһоҙораҡ. Нәҡ ошоноң арҡаһында сит ил фермерҙарына "алтын ямғыр" яуҙырып, үҙебеҙҙекеләрҙе көрсөккө килтереп терәйбеҙ ҙә инде. Был хәл импорт тауар артынан хаҡ төшөрә алмаған урындағы етештереүселәргә лә ҙур конкурентлыҡ тыуҙыра.

### Яңы проект нисек эшләр?

Сит ил тауарына йәбешеп ятыуыбыҙҙы ҙы күреп, Европа һәм Америкалағы "дуҫтарыбыҙ" беҙгә гуманитар ярҙам итеп, түбән сортлы, үтмәй ятҡан тауарын да ебәреп маташа. Миҫал өсөн бер нисә йыл элек тикшерелгән мәғлүмәттәргә күҙ һалһаҡ, шундай фактарға тап булаһың. Рәсәй Хөкүмәте ҡарамағындағы Икмәк дәүләт инспекцияһы АҠШ-тан гуманитар ярҙам итеп индерелгән 2,5 мең тонна аҙыҡ-түлекте ҡулланыуҙан тыйған. Тикшерелгән 2000 тонна ондоң ни бары 390 тоннаһы ғына ашарға яраҡлы булған. Ҡалғанында металломагнит ҡушылмаларының күп булыуы асыҡланған. Шулай уҡ 1000 тоннанан ашыу фасоль да бракка сығарылған. Ветеринар хеҙмәте тикшереүенән уны хатта сусҡаларға ла ашатырға ярамағанлығы билдәле булған. Әлбиттә, дәүләт үҙ халҡын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙә хәүефһеҙлек сараларын күрергә тырыша һәм быныӊ өсөн төрлө ҡарарҙар ҡабул итә. Тик йыш ҡына ситтән ингән аҙыҡ-түлек менән ағыуланыу осраҡтарын, унанбынан ишетелеп ҡалған шау-шыуҙарҙы иҫәпкә алһаҡ, был ҡарарҙарҙың ғына гарантия була алмауы яҡшы аңлашыла.

Урындағы етештереүселәрҙең продукцияһын алға сығарыу - республикала бөгөн актуаль проблема. Ошо йәһәттән, ҡулланыусылар иғтибарын урындағы продукцияға йәлеп итеү, үҙебеҙҙең продукцияны эске һәм тышҡы баҙарҙа киң йәйелдереү маҡсатынан БР Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты "Башҡортостан продукты" проектын булдырҙы. Проект башҡорт продукцияһын урындағы баҙарҙа киң файҙаланыуға, импорт тауарға конкурентлыҡ тыуҙырыуға, уға сифатлы алмаш булдырыуға йүнәлтелгән. Проектта ҡатнашыусыларҙың продукцияһына "Башҡортостан продукты" тигән махсус тамға һуғылыуы уның беҙҙең республикала етештерелеүе, юғары сифатҡа эйә булыуы хаҡында белдерә. Бынан тыш, проектта ҡатнашыусыларға белгестәр тарафынан мәғлүмәт һәм консультация ярҙамы күрһәтелә, бушлай тренингтар үткәрелә, уларҙың тауары өсөн магазин кәштәләренән айырым урын бүленә. Әлеге ваҡытта проект йөҙҙән ашыу етештереүсене берләштерә һәм йыл аҙағына тиклем уларҙың иҫәбен ике йөҙгә еткереүҙе планлаштыра. Әгәр был проект уңышлы эшләп китһә, халыҡты сифатлы аҙыҡ менән тәьмин итеүгә ышаныс арта. Үткән быуаттың 80-се йылдарынан бирле Латин Америкаһының хәрби складтарында ятып, иҫәптән сығарылған иҫке иттәрҙең дә беҙгә индерелеүе тураһында хәбәрҙәр йөрөгәндә, яңы проект ҡабул итеү ҡыуандыра.

### Импорттан баш тартһаҡ...

Рәсәйҙең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге доктринаһы хәбәр итеүенсә, 2020 йылға үҙебеҙҙә етештерелгән тауар өлөшө импортты күпкә уҙып китергә тейеш. Түбәндәге һандарға иғтибар итһәң, иҡтисады әллә ни маҡтанырлыҡ булмаған илебеҙҙең был программаны ниндәйерәк юлдар менән тормошҡа ашырыуын әлегә күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Былтыр Рәсәйгә ситтән 40 млн долларға - 25 000 тонна тауыҡ ите, 227 млн долларға - 57 000 тонна һыйыр һәм сусҡа ите, 163 млн долларға - 61 000 тонна балыҡ, 43 млн долларға - 11 000 тонна аҡ май, 20 млн долларлыҡ - ҡуйыртылған һөт, 29 млн долларға - 58 000 тонна эшкәртелмәгән шәкәр, 1,7 млн долларға 2 800 тонна шәкәр, 9 100 тонна ҡәһүә, 14 000 тонна сәй һәм башҡалар индерелгән. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, 2012-2013 йылдарҙа ситтән 47 мең тонна алма, 304 мең тонна груша, 44 мең тонна йөҙөм килтерелгән. Был һандарға ҡарап, 5 йылға һуҙылған гәрәсәтле һуғыш йылдарында ла гөрләп торған баҫыуҙарыбыҙ иҫкә төшә. СССР ваҡытындағы меңәрләгән колхоз-совхоздың юҡҡа сығыуы ла үҙ эшен эшләмәй ҡалманы. Шуға ла импорт тауарына күҙ төбәп тороуыбыҙҙың да ҡасандыр уйланмай яһалған аҙым һөҙөмтәһе булыуы менән күптәр килешер. Бөгөн буш ваҡыты күберәк булған ҡала халҡы ғына түгел, хатта ауыл кешеләренең дә виртуаль уйындарҙағы фермерлыҡ, баҡсасылыҡ, малсылыҡ менән шөғөлләнеүе тағы ла ҡыҙғанысыраҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сифаты, файҙаһы булмаһа, ризыҡтың күп булыуында ғына эш тормай. Ни тиһәк тә, туҡланыу - кеше тормошоноң мөһим бер өлөшө. Нимә һәм нисек ашауына ҡарап, халыҡтың йәшәйеше, холоҡ-ҡылығы һәм ғөрөф-ғәҙәте беленә, сөнки һәр милли кухняның үҙенә генә хас булған аҙыҡ-түлеге, уларҙы эшкәртеү юлдары була. Ғөмүмән, туҡланыу мәҙәниәте айырым бер халыҡтың бөтөн тарихын, матди һәм рухи донъяһын да асыҡ сағылдыра. Әлбиттә, быға тәбиғәт шарттары, социаль-иҡтисади хәлдәр ҙә үҙ өлөшөн индерә. Уға шул илдең географик хәле, тәбиғәте, иҡтисады һәм дини ғәҙәттәре лә ныҡлы бәйләнгән. Шуға күрә лә үҙенсәлекле тәбиғәт шарттарында йәшәгән беҙҙең халыҡ көньяҡтыҡылар кеүек емеш-еләк менән генә туҡлана алмай, уға мотлаҡ үҙебеҙҙең ерҙә етештерелгән аҙыҡ - мал һәм ҡош ите, һөт аҙыҡтары кәрәк. Сәләмәт быуын үҫтереү, милләтебеҙ киләсәге хаҡында уйлаһаҡ, нимә ашап, нимә эсеүебеҙгә лә ҙур иғтибар бүлергә тейешбеҙҙер.**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (5) дүшәмбе | 6:46 | 8:16 | 14:30 | 18:26 | 19:56 | 21:26 |
| 30 (6) шишәмбе | 6:47 | 8:17 | 14:30 | 18:23 | 19:53 | 21:23 |
| 1 (7) шаршамбы | 6:49 | 8:19 | 14:30 | 18:21 | 19:51 | 21:21 |
| 2 (8) кесе йома | 6:51 | 8:21 | 14:30 | 18:18 | 19:48 | 21:18 |
| 3 (9) йома | 6:53 | 8:23 | 14:30 | 18:16 | 19:46 | 21:16 |
| 4 (10) шәмбе | 6:55 | 8:25 | 14:30 | 18:13 | 19:43 | 21:13 |
| 5 (11) йәкшәмбе | 6:57 | 8:27 | 14:30 | 18:11 | 19:41 | 21:11 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

*ХЕҘМӘТ ҺАБАҠТАРЫ*

# СӨЙ ҘӘ ҠАҒА БЕЛМӘЙ, ТИМӘҺЕНДӘР...



**Алдағы һандарҙың береһендә иғлан иткән яңы рубрикабыҙҙы дауам итәбеҙ. Был юлы балта оҫталары һәм автоһәүәҫкәрҙәр кәңәштәрен тыңларбыҙ.**

Эре ҡаҙауҙы йоҡа таҡтаға ҡаҡкан саҡта ул ярылмаһын өсөн ни ҡылырға икәнлеген күптәр белмәй. Иң тәүҙә сөйҙөң структураһын өйрәнеү мотлаҡ. Атап әйткәндә, уның ҡырҡа торған үткер өлөшөнә күҙ һалығыҙ. Бөтөн сөйҙәрҙең дә осондағы ҡырҙарының бер яғы - үткер мөйөшлө (русса - "острый угол"), ә икенсе яғы - йәйенке мөйөшлө ("тупой угол") була. Тимәк, сөйҙөң үткер мөйөшө таҡтаны ҡырҡа, ә йәйенке мөйөшө - ҡырҡмай булып сыға. Ҡаҙауҙың тап ошо ҡырҡмаған яғы таҡтаның ярылыуына килтерә лә инде. Шуға күрә, йоҡа таҡта ("тёс") ярылмаһын өсөн сөйҙөң үткер ҡырын таҡтаның сүстәренә (волокна) арҡыры терәп ҡуйып ҡағырға кәрәк. Ул сағында таҡтаның сүстәре ҡырҡылып, сөйҙөң таҡтаға баҫымын аҙайта. Һөҙөмтәлә, сүс буйлап ярыҡ барлыҡҡа килмәй. Ошо ысул менән ҡағылған сөйҙәр бер ҡасан да таҡтаны ярмаясаҡ.

Был һабаҡты атайым Темәстә ғүмере буйы балта оҫтаһы булып эшләүсе ике туған ағаһы, баянсы, бейеүсе Шәфкәт Йосоповтың атаһы Рәфкәт Фәйзерәхмән улы Йосоповтан отоп алған. Рәфкәт апа (беҙҙең яҡта - атайҙан олораҡ ир кешегә ихтирам менән шулай өндәшәләр) ауылдағы йөҙәрләгән йортҡа ишек-тәҙрәләр эшләгән кеше булараҡ, был аҡылды, моғайын, үҙенән олораҡ оҫтанан өйрәнгәндер.

# "ДЕУ НЕКСИЯ"ҒЫҘ ҺЫУЫҠМЫ?



**Ырымбур өлкәһенән Фаил исемле бер танышым менән әңгәмәбеҙгә 3-4 йыл самаһы ваҡыт үтһә лә, уның алтын кәңәштәре хәтерҙән сыҡмай. Бөгөн шул һабаҡтарҙың береһен гәзит уҡыусыға ла ишеттерергә булдым.**

Ул ваҡытта Ырымбур егете "Юлдаш" радиоһы редакцияһында водитель булып эшләй ине. Мин унан:

- Ағай, тәжрибәле шофер булараҡ, әйт әле, ниндәй автомобиль беҙҙең һымаҡ яңы машина йөрөтә башлағандар өсөн таман булыр икән? - тип һораным.

- Хаҡының осһоҙлого, деталдәренең сифатлы булыуы яғынан бер генә автомобилде тәҡдим итә алам: "Деу Нексия", - тине ул.

Кешеләрҙең был автомобилде маҡтауына, урамда был маркалы "тимер аттарҙың" күплегенә шаһит булһам да: "Ул автомобилде ҡышын һыуыҡ тиҙәр бит", - тип, кемдәндер ишеткән дөгүәмде белдермәй булдыра алманым. Фаил ағай көлөп ебәрҙе:

- Һе-ее, тапҡанһың проблема! Уны ни, һә тигәнсе хәл итергә була: "Деу Нексия"ның термостатын "Шевроле Лачетти" маркалы автомобилдең алюминийҙан яһалған термостаты менән алыштырырға кәрәк...

**Илгизәр БУЛАТОВ.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ЗӨЛХИЗӘ АЙЫНЫҢ...



## тәүге ун көнөн ғибәҙәттә үткәр

**Мосолмандар тарафынан хөрмәт ителгән айҙарҙың береһе булған зөлхизә айының тәүге ун көнө бигерәк тә әһәмиәтле, үтә лә ҡиммәтле бер осор. Был турала Ҡөрьән аяттарында, Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙистәрендә, ғалимдарҙың һәм әүлиәләрҙең аҡыллы һүҙҙәрендә әйтелә. Ошо айға мосолмандарҙың ике бөйөк байрамдарының береһе Ид әл Әдхә, йәки Ҡорбан байрамы тура килә. Шулай уҡ ошо айҙа исламдың терәге булған бишенсе ғәмәл - хаж ғәмәле үтәлә. Айҙың туғыҙынсы көнө - Ғәрәфә көнө, шулай уҡ хөрмәт ителгән көндәрҙең береһе.**

### Ғәрәфә көнө

Хәҙистә әйтелеүенсә, Аллаһы Тәғәләнең яраткан иң яҡшы көндәре - зөлхизә айының тәүге ун көнө. Тәүге туғыҙ көндә, бигерәк тә Ғәрәфә көнөндә ураҙа тотоу хуплана (хажда булыусыларҙан тыш). Фәйшәнән (Аллаһы Тәғәлә уның менән риза булһын) килгән хәҙистә әйтелә: "Бер үҫмер зөлхизә айының тәүге туғыҙ көнөндә ураҙа тотҡан. Был турала Бәйғәмбәргә әйткәндәр. Һәм ул тегә егеттән ни өсөн улай эшләүен һораған. "Бәйғәмбәрем, был көндәрҙә мин хаж ҡылыусыларҙың доғаларының бәрәкәтенә өлгәшергә теләйем", тип яуап ҡайтарған үҫмер. Шул ваҡыт Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи үәсәләм был үҫмергә: "Һәр тотолған ураҙа көнө өсөн йөҙ ҡолдо азат иткән, саҙаҡа итеп йөҙ хайуан биргән, дин юлындағы көрәш өсөн йөҙ атты биргән кеүек сауап аласаҡһың", тигән. Башҡа хәҙистәрҙә Ғәрәфә көнөндәге ураҙа тотоусы ике йыллыҡ ураҙа әжерен ала, үткән һәм киләсәк йылдағы гонаһтарынан таҙарына, тип әйтелә. Был көндәрҙә "Ихлас" сүрәһен йыш уҡыу хуплана, ә Ғәрәфә көнөндә уны 1000 тапҡыр уҡырға кәңәш ителә. Шулай уҡ саҙаҡа биреү ҙә кешегә оло әжергә өлгәшеүгә булышлыҡ итә.

Тәүге ун көнөн ғибәҙәттә үткәреүселәргә Аллаһ ун ниғмәт бирә. Улар: фани донъяһағы бәрәкәт, килемдең һәм мөлкәттең артыуы, ғаилә ағзаларына именлек, гонаһтарҙың ғәфү ителеүе, изге ғәмәлдәрҙең арттырылыуы, үлем минуттарында еңеләр енеләйтелеүе, ҡәберҙең нур менән яҡтыртылыуы, Ҡиәмәт көнөндә изге эштәр мизанының ауырайыуы, йәһәннәмдең ҡурҡыныс кимәлдәренән алыҫайыу, йәннәттә юғарыраҡ дәрәжәләргә өлгәшеү.

Шулай уҡ ошо ун көндә мохтаждарға саҙаҡа биреүселәр барлыҡ бәйғәмбәрҙәргә малын фиҙа итеп биргән; ауырыуҙың хәлен белеүселәр - бөтөн әүлиәләрҙең хәлен белгән; йәназала ҡатнашҡандар - бөтә шәһиттәргә (Аллаһ юлында ғүмерен биреүселәргә) йыназа ҡылған кеүек әжер аласаҡ. Мохтажды кейендереүсене Аллаһы Тәғәлә үҙенсәлекле кейем менән (был осраҡта кейемгә матди ғына мәғәнә бирергә ярамай) бүләкләйәсәк, етемгә рәхимле мөғәмәлә итеүсегә Аллаһы Тәғәлә үҙе яҡшы мөғәмәлә итәсәк, дини дәресте тыңлаусы барлыҡ бәйғәмбәрҙәрҙең дәресен алған кеүек буласаҡ. Аллаһы Тәғәләгә хуш килгән һәр изге эш ғәмәл дәфтәрҙәренә йыл буйы ошо эште, ғәмәлде эшләгән кеүек итеп яҙыласаҡ.

### Ҡорбан байрам

Ҡорбан һүҙенең мәғәнәһе - "яҡынлашыу". Ул Аллаһы Тәғәләгә яҡынлашыу сараһы. Раббыңа үҙеңде, мөлкәтеңде, ғүмереңде фиҙа килтереү менән иҫбатлана. Уның нигеҙендә Аллаһы Тәғәләнең ихтыярына бойһоноу һәм ошоно тормошҡа ашырыу ята. Раббыһы әмеренә күнгәне өсөн генә мосолман изге ғәмәлдә үтәй. Изге Ҡөрьәндә: "Аллаға уларҙың (ҡорбанға килтерелгән малдың) ите лә, ҡаны ла һис барып етмәҫ, әммә уларға һеҙҙең тәҡүәлек барып етер", - тиелә.

Күп аяттарҙа, хәҙистәрҙә ҡорбан тураһында әйтелә. Уның мөһимлегенә Ислам ғалимдары айырым баҫым яһай. Үҙен мосолман тип һанаған һәм мөмкинлеге булған кешенең изге ғәмәлдән ситтә тороп ҡалырға хоҡуғы юҡ, тиҙәр. Ҡорбанға беҙҙең ерлектә ике йәше тулған һыйыр малын, йәше тулған һарыҡ, кәзәне килтерергә була. Һыйыр малын ете кеше, һарыҡ-кәзәне бер кеше ҡорбанға килтерә. Мал көр, сәләмәт булырға тейеш. Бер күҙгә йәки ике күҙгә лә һуҡыр булған, мөгөҙҙәренең береһе йәки икеһе лә төбөнә тиклем һынған, ҡолағы йәки ҡойроғоноң яртыһынан күберәге өҙөлгән, йәки мал аяғына баҫа алмаһа, ауырыу, үтә ябыҡ, хәлһеҙ булһа, тештәре булмаһа, имсәктәре боҙолһа, уны ҡорбанға килтерергә ярамай.

Малдың ите өс өлөшкә бүленә. Беренсе өлөш мохтаждарға таратыла. Шулай уҡ белем алған йәштәргә, дин юлында йөрөгән кешеләргә биреү хуплана. Шулай уҡ ҡорбан таратыу менән шөғөлләнгән махсус хәйриә ойошмаларына тапшырырға мөмкин. Икенсе өлөш туғандарға һәм яҡындарға таратыла. Өсөнсө өлөш ғаиләлә ҡалдырыла.

Зөлхизә айының 10-сы көнөндә, байрам намаҙынан алып өс көн дауамында, айҙың ун өсөнсө көнө башланғансы ҡорбан салырға була. Был сиктәрҙе теүәл үтәү мөһим. Сөнки байрам намаҙынан алда һәм байрамдың өсөнсө көнөндә ҡояш байығандан һуң килтерелгән мал ҡорбан итеп ҡабул ителмәй, ябай һуғым булып ҡала.

**Шулай итеп, Зөлхизә айы 25 сентябрҙә башланды, 3 октябрь - Ғәрәфә көнө, 4 октябрь - Ҡорбан ғәйете**

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Ышаныс: компетентлыҡ бер ваҡытта ла үҙ-үҙеңә ышанмаусылыҡты ҡаплай алмай**

**Улар һәр саҡ үҙ ойошмаһының мөмкинлеген сикләй.** Әгәр көсһөҙ лидерҙар артынан эйәреүселәргә аҫтыртын төрттөрөп тороп, тегеләре бер ниндәй маҡтау тапмаһа, ваҡыт үтеү менән улар ҡыҙыҡһыныуҙарын һәм сәмен юғалтып, үҙ мөмкинлектәре кимәленән түбәнерәк эшләй башлай. Һөҙөмтәлә улар ғына түгел, тотош ойошма зыян күрә.

Киреһенсә, үҙ-үҙенә ышанысы ҙур булған һәм үҙҙәрен һәр саҡ хәүефһеҙлектә тойған лидерҙар башҡаларға ла ышанырға һәләтле. Улар танау соймай - етешһеҙлектәрен дә, ҡаҙаныштарын да беләләр һәм, шуға ҡарамаҫтан, үҙҙәрен ихтирам итәләр. Ҡул аҫтында эшләүсе хеҙмәткәрҙәре яҡшы эшләп, уңыш ҡаҙана икән, улар бында үҙҙәре өсөн хәүеф күрмәй, ә мөмкин тиклем шундай хеҙмәткәрҙәр туплап, уларҙың юғары кимәлдә эшләүен тәьмин итергә тырыша. Үҙ-үҙенә ышанған лидерҙың командаһы еңеү яулаһа, был уға ҙур шатлыҡ килтерә. Бындай етәксе был фактты, лидер булараҡ, иң яҡшы маҡтау тип ҡабул итә.

**Уйланырға мәжбүр итеүсе һорауҙар**

Үҙегеҙҙе ниндәй кимәлдә аңлайһығыҙ һәм ихтирам итәһегеҙ? Ыңғай яҡтарығыҙҙы беләһегеҙме һәм улар һеҙгә ҡәнәғәтлек бирәме? Үҙегеҙ еңә алмаған етешһеҙлектәрегеҙ бармы һәм уларҙы нисек ҡабул итәһегеҙ? Кеше үҙенә үҙенсәлекле булыуы һәм бер кемдә лә булмаған һәләттәргә эйә икәнлеге тураһында отчет бирә икән, ул башҡаларҙың да ыңғай яҡтарын һәм уңыштарын баһаларға һәләтле. Лидер булараҡ, үҙегеҙҙе ни тиклем хәүефһеҙ һәм ышаныслы тояһығыҙ? Ҡул аҫтығыҙҙа эшләүселәрегеҙҙең ҙур идеяһы тыуһа, уны хуплайһығыҙмы, әллә кире ҡағаһығыҙмы? Хеҙмәткәрҙәрегеҙҙең еңеүҙәренә ҡыуанаһығыҙмы? Командағыҙ еңеү яулаһа, уны ябай хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәте тип баһалайһығыҙмы? Яуаптарығыҙ кире икән, һеҙгә эске ҡурҡыу ят түгел, ә ул һеҙҙе, командағыҙҙы, тотош ойошмағыҙҙы сикләп тора.

**Өйгә эш**

● Үҙегеҙҙе тәрәнерәк аңлағыҙ. Әгәр тыумыштан ыңғай яҡтарығыҙҙы һәм етешһеҙлектәрегеҙҙе белгәндәр иҫәбенә инмәйһегеҙ икән, үҙ-үҙегеҙҙе аңлау өсөн ваҡыт табығыҙ. Шәхси сифаттар буйынса психологик тестар файҙаланығыҙ. Һеҙҙе яҡшы белгән кешеләрҙән өс яҡшы һәм өс етди кире яғығыҙҙы атауын һорағыҙ. Уларҙың яуабын ишеткәс, аҡланмағыҙ ҙа, үҙегеҙҙе яҡламағыҙ ҙа; маҡсатығыҙ - күберәк мәғлүмәт туплап, шулар өҫтөндә эшләү.

● Эргә-тирәгеҙҙәгеләрҙе лайыҡлы баһалағыҙ. Командағыҙ башҡарған эш өсөн башҡаларҙы маҡтайҙар икән, моғайын, бының үҙегеҙҙең эшегеҙ икәнлегенә шикләнәһегеҙҙер. Быға ышанырға тырышығыҙ. Әгәр һеҙ тирә-йүнегеҙҙәгеләрҙең дөйөм эшкә һалған өлөшөн баһалайһығыҙ һәм уларға ярҙам итәһегеҙ икән, тимәк, карьераларын үҫтерәһегеҙ, рухи тороштарын күтәрәһегеҙ һәм ойошманың эшен яҡшыртаһығыҙ. Һөҙөмтәлә тирә-яҡтағылар күҙлегенән йогонтоло лидер булып күренәсәкһегеҙ.

Ситтән ярҙам булһа - баш тартмағыҙ. Әгәр үҙ-үҙегеҙгә ышанмаусанлыҡты үҙегеҙ генә еңә алмаһағыҙ, профессиональ ярҙамға мөрәжәғәт итегеҙ. Яҡшы психотерапевт консультацияһы ярҙамында проблемаларығыҙҙың төбөнә төшөгөҙ - был һеҙҙең өсөн генә түгел, ҡул аҫтында эшләүселәрегеҙ өсөн дә файҙалы булыр.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**

*✓ Ҡатын-ҡыҙ күҙҙәренә ҡом һибеүҙе ярата. Ҡом күберәк булған һайын, ул күҙҙәрен нығыраҡ аса.*

*(Альфред де Мюссе).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СИЛӘБЕ БАШҠОРТТАРЫ




**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**38-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Макарон. Абдразаков. Овал. Гамбург. Бикбов. Аҙнабаев. Балл. Ғәбитова. Мортазин. Левретка. Станция. Максима. Лама. Ратибор. Табанса. Ван. Ваза. Агроном. Амангилдин. Быҙаулыҡ. Раут. Алым. Ғауға. Терпе. Жгут. Варна. Тыуа. Аҙнағолов. Һыҙат. Каса.

**Вертикаль буйынса:** Ағас. Контрамарка. Апломб. Урт. Илион. Аромат. Иман. Амиго. Ҡалмантаев. Аврал. Аталғы. Мырҙабәков. Лимон. "Аманат". Рабле. Аналог. Нөҡот. Орск. Алма. БыҒау. Вал. Мерәҫов. Вена. Ауыҙ. Тырыз. Брасс. Антураж. Ишбаев. Араҡы. Ванна. Рейн. Ҡорт.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 октябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға"** (Т.Ғарипова), мюзикл

**2 октябрь "Шәүрәкәй"** (М.Буранғолов), музыкаль комедия

**3 октябрь "Эдип батша"** (Софокл), хаким ҡарашынан сәхифә

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 октябрь** филармония алдындағы майҙанда сәғәт 12-лә Ҡорбан байрамы айҡанлы ҙур концерт ойошторола. Мосолмандар өсөн иң оло байрамдарҙан иҫәпләнгән Ҡорбан ғәйетенә бағышланған байрамды дин әһелдәренең доғалары аса, унан һуң тамашасыларҙы БР-ҙың Халыҡ ҡоралдары милли оркестры, Эстрада-джаз оркестры, музыкаль-әҙәби лекторий тәбрикләйәсәк. Шулай уҡ байрам ашы - тәмле былау ҙа һеҙҙе көтә, дуҫтар! Күркәм байрам көнөндә туғандарығыҙ, дуҫтарығыҙ менән йырлы-моңло сараға ял итергә рәхим итегеҙ, мосолман ҡәрҙәштәр!

**7 октябрҙә "Беҙ ҡабыҙған уттар һүнмәһен"** концерты Башҡортостандың халыҡ артисы, билдәле йырсы Филюс Ғәрәевтың иҫтәлегенә арнала.

**Кем алыҡ?**

Һоҡланғыс шәхес Филюс Ғәрәевтың ижады менән танышырға теләүселәр һорауҙарға яуап биреп, тамашаға саҡырыу билеты ота ала.

**1.** Филюс Гәрәев ҡайҙа тыуған?

**2.** Йырсы ҡайһы композиторҙың ниндәй әҫәрен башҡарып, оло сәхнәлә танылыу ялай?

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 октябрь "Тылсымлы моң - илһам телендә..."** тип аталған концерт менән XXIV концерт миҙгелен аса.

КОТЛАЙБЫҘ!

**Хөрмәтле ШАМАЕВ Әмир Ғабдрахман улы!**

Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты һеҙҙе күркәм юбилейығыҙ менән ысын күңелдән тәбриклә. Һеҙ беҙҙең уҡыу йортоноң иң сағыу һәм яҡты йондоҙҙарының береһе. Һәр ваҡыт алға ынтылып, намыҫлы хеҙмәтегеҙ менән республикабыҙ һәм илебеҙ күләмендә ҙур танылыу алып, ысын мәғәнәһендә мәртәбәле, абруйлы шәхес кимәленә күтәрелдегеҙ. Һеҙ йәш быуынға һәр саҡ өлгө булдығыҙ. Артабан да ҡәҙерхөрмәткә күмелеп, яҡындарығыҙҙың йылыһын, мөхәббәтен, ихтирамын тойоп, ҡайғы-хәсрәтһеҙ, бәрәкәтле мул тормошта оҙон ғүмер кисерергә насип итһен.

* * *

Мәләүез ҡалаһында йәшәүсе **Рауза Йыһанша ҡыҙы ХАЖИЕВАны** 90 йәшлек күркәм юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ. Ғүмерен изге һөнәргә - балалар уҡытыуға арнаған ҡәҙерлебеҙ әле лә бик әүҙем, йүгереп йөрөй, олоһо ла, кеселе лә кәңәш һорап уға килә.

Әсәйебеҙ, өләсәйебеҙ, һинең фатихаң менән юлдарыбыҙ уң, бәхетебеҙ тулы беҙҙең. Алсаҡлығыңа, ихласлығыңа, тормошто яратыуыңа, һәр көндөн йәм табып йәшәй белеүеңә, көслө рухыңа һоҡланабыҙ. Күңел тыныслығыңда, именлектә-һаулыҡта, беҙҙең терәгебеҙ булып, тағы ла оҙаҡ йылдар йәшәргә насип булһын.

**Иң изге теләктәр менән, туғандары, балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, булә-бүләсәләре.**

* * *

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Өфө ҡалаһынан** Мәрфүғә Мостафина, Вадим Ҡунафин, Әхмәт Аҫылбәков, Миңлеямал Янбулатова, **Миәкә районы** Садовый ауылынан Фидалиә Садиҡова, **Ғафури районы** Яугилде ауылынан Рәфҡәт Аҫҡаров, Красноусол ауылынан Рәмзиә Монасипова, Юлыҡ ауылынан Нурсилә Ҡаҫҡынова, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Илнур Нәҙершин, Солтан Әйүпов, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Кинйәбикә Юлмөхәмәтова, Рәзилә Ҡотлогилдина, **Стәрлебаш районы** Мортаза ауылынан Минзиә Аллабирҙина, Ейәнсура районы Малай Муйнаҡ ауылынан Гөлназ Аҡбашева, Ибрай ауылынан Гөлдәр Аҡбутина, Байдәүләт ауылынан Гөлсөм Бикәнова, Рәнилә Байсурина, **Йылайыр районы** Сидоровка ауылынан Ф. Ҡотошева, Юлдыбай ауылынан Әнисә Алчинова, Ҡашҡар ауылынан Римма Байморатова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Мансур Ғәзелшин, **Бәләбәй районы** Иҫке Семенкин ауылынан Зарема Ғүмәрова, **Благовещен ҡалаһынан** Миләүшә Шакирова, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Рәмилә Юлсурина, **Әбйәлил районы** Ташбулат ауылынан Рауза Ҡужахмәтова, Ҡырҙас ауылынан Рәсимә Хәлилова, **Илеш районы** Үрге Йәркәй ауылынан Ғәлимә Ғәлиева, **Мәләүез ҡалаһынан** Рауза Хажиева, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Лариса Килмәтова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көндәре менән ҡотлайбыҙ! Һеҙгә һаулыҡтың иң ныҡлыһын, бәхеттең иң ҙурын, шатлыҡтарҙың мөлдөрөмә тулыһын, көндәрҙең иң сағыуын, ғүмерҙең оҙонон теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

Хеҙмәттәшебеҙ Фәүзиә Миҙхәт ҡыҙы Мөхәмәтшинаның, һөйөклө әсәһе **Мәрзиә Низам ҡыҙы Иҙелбаеваның** вафаты айҡанлы, ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

**"Киске Өфө"ләр.**

✔ *Йәшәгән ерең ҡотло булырға тейеш, ошоно тормошҡа ашырырға дәртең етһә, һин башҡа нәмәгә - ауылыңдың, халҡыңдың киләсәгенә лә битараф булмаясаҡһың.*



ИЖАДХАНА

# ЯҘМЫШТЫҢ ҺӘР ТӘҠДИМЕНӘ...

## "Эйе" тип яуап бир!

(Башы 11-се биттә).

### Йөрәктә дәрт булһа...

Шулай ҙа бөгөн мине ауылда йәшәгән халҡыбыҙҙың яҙмышы күберәк борсой. Донъя тотҡаһы булған ағайҙарҙы ниндәйҙер битарафлыҡ баҫты. Иртән тороп, сәй эсә лә, урманға эшкә китә, унан ҡайтып ашағас, йоҡларға ята. Араларында насар ғәҙәттәр менән дуҫ булғандары байтаҡ. Йорт-ҡураһын төҙөк тотоп, матур итеп йәшәргә ынтылыштың булмауы ла аптырата мине.

Бер йәй шулай, ауыл күркәмләнһен, тип, егеттәр менән тау башына ҡарағай бүрәнәләрҙән ауылыбыҙҙың исемен яҙып ҡуйырға булдыҡ. Буранғол ауылының рәсми атамаһы ни өсөндөр Боранғол булып йөрөй. Ауыл хакимиәтендә шуға Боранғол тип яҙырға ҡуштылар. Эшләй башлағайныҡ, халыҡ фекере икегә бүленде - бер яҡта - "у", икенсе яҡта "о" яҡлылар. Шулай ҙа эшләнек, буяп та ҡуйҙыҡ. Йәй буйына халыҡ ауылдың атамаһы тураһында ғына һөйләште, бәхәстәр тынманы. Бер көн төш күрәм, кемдер "о" хәрефен боҙорға маташа. Торҙом да, ҡараһам, ысынлап та берәү тау битендә йөрөп ята. Барһам, ауылдашым, актер Рәмзил Сәлмәнов. "Өйҙә лә, бесәндә лә бер генә тема, шул тиклем ялҡыттылар", - ти, бағтиһәң, ул ес төн буйы "о"-ны нисек итеп "у"-ға әйләндерергә мөмкин икәнлеген уйлап ятҡан. "О"-ны "у"-ға әйләндерә башлағайныҡ, "о" яҡлылар тауға менә башланы. Ә хәҙер был урын ауылдың матур бер еренә әүерелде.

Йәшәгән ерең ҡотло булырға тейеш, ошоно тормошҡа ашырырға дәртең етһә, һин башҡа нәмәгә - ауылыңдың, халҡыңдың киләсәгенә лә битараф булмаясаҡһың. Илдә ниндәй генә ваҡиғалар булмаһын, зарланмаҫҡа, изгелекле булырға, аптырамаҫҡа өйрәнергә кәрәк. "Эшләргә кәрәк!" ти торғайны экс-президентыбыҙ. Бөгөнгө замандың тарихи әһәмиәте шунда - халыҡ үҙенең тормошо үҙенең ҡулында икәнен аңланы. Ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙырһың, ҡырмыҫҡалар йүгерешә башлай бит әле, шуның кеүек, яйлап хәрәкәтләнә башланыҡ, тимәк, ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр ваҡыты алда әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Нисек кенә булмаһын, кешенең киләсәктә ниндәй шәхес булып үҫәсәген билдәләгән нигеҙ, Шәһит үҙе әйтмешләй арҡа бағанаһы, бала саҡта формалаша шул. Был кешенең бөтөн холоҡ-ҡылыҡтарына ла: уҡыуына ла, үҙгәрә һәм камиллаша алыуына ла, дуҫтар һәм, әлбиттә, һөнәр һайлай белеүенә лә йоғонто яһай. Тап шундайҙар ғына яҙмыштың бер тәҡдимен дә кире ҡаҡмайынса, һәр ваҡиғанан ыңғай тәжрибә алып йәшәй белә. Ир-егеттең ике юлдашы бар: береһе - батырлыҡ, береһе - тәүәккәллек, ти халҡыбыҙ ҙа. Тәүәккәл булайыҡ, шул саҡта киләсәгебеҙ яҡты буласаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# МӘСКӘҮ ТАМАШАСЫҺЫ ӨСӨН...

## башҡорт спектаклдәре

**Быйыл М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры 95 йыллыҡ юбилейын билдәләй. 1 октябрҙә 95-се ижад миҙгеле асылғандан һуң актерҙар Мәскәүгә юлланасаҡ. "Сатирикон" театры сәхнәһендә улар "Шәүрәкәй", "Аҡ пароход", "Эдип батша", "Ҡара йөҙҙәр", "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара юрға" спектаклдәрен уйнаясаҡ, гастроль сиктәрендә шулай уҡ театрлаштырылған концерт та ҡаралған.**

Юбилей миҙгеле тамашасы өсөн бик ҡыҙыҡлы булмаҡсы. Режиссер Айрат Абушахмановтың Мәжит Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр" повесы буйынса әҙерләгән спектакле миҙгелдең тәүге премьераһы буласаҡ. Бынан тыш, репертуарҙа Баязит Бикбайҙың "Ҡаһым түрә" спектакле (режиссеры Олег Ханов), Рәлиф Кинйәбаевтың яңы комедияһы (режиссеры Илнур Муллабаев) барлыҡҡа киләсәк.

Спектаклдәр, гастролдәр менән бер рәттән, театр төрлө фестивалдәрҙә лә ҡатнашырға өлгөрә. Әле генә Алмас Әмиров "Әлифбанан бер себеш" менән Петрозаводскиҙа үткән "Лифт Карелия 14+" Халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашып, үҙ эшенә ыңғай баһа алып ҡайтһа, октябрҙә "Руди - never off" спектакле Ҡаҙағстанға, V Халыҡ-ара Үҙәк Азия илдәре театр фестиваленә барасаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҒӘЙБӘТ КҮМЕР КЕҮЕК:

## көйҙөрмәһә лә буяй

Берәү бар - һүҙҙе күңеленә йыя, берәү бар - һүҙҙе ҡарынына йыя.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙ күҙҙәренә ҡом һибеүҙе ярата. Ҡом күберәк булған һайын, ул күҙҙәрен ныҒыраҡ аса.

**(Альфред де Мюссе).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер йәш кеше Аҡһаҡал янына килгән һәм үҙенең шундай үтенесен белдергән: " Мин үҙемде был тормошта иң йәл һәм түбән кеше тип иҫәпләйем, хатта йәшәгем килмәй китә. Тирә-яғымдағы кешеләр ҙә мине йүнһеҙ, ҡулынан бер эш килмәгән уңышһыҙ әҙәм тип иҫәпләй. Үтенеп һорайым, ярҙам ит миңә, аҡһаҡал". Аҡһаҡал йәш кешегә бер генә күҙ һирпеп ала ла:"Әле мин һиңә ярҙам итә алмайым. Миңә бик мөһим бер эште яйға һалырға кәрәк. Әгәр ҙә ризалашһаң, мин һиңә бер йомош ҡушайым..." - ти. Уның хәлен тағы ла икенсе планға күсереүҙәрен хупламаһа ла, "Ризамын инде..." тип мығырҙай ауыҙ эсенән генә йәш кеше. "Ярай, улайһа, - ти Аҡһаҡал һәм бармағынан матур ташлы алтын балдағын сисеп, егеткә һуҙа. - Минең атты ал да, баҙарға сап, ошо балдағымды тиҙ генә һатырға кәрәк. Лайыҡлы хаҡ ҡуй, алтын тәңкәнән түбәнерәккә ризалашма... "**

**Егет баҙар майҙанына барып баҫып, үткән-сүткән кешеләргә балдаҡты һатып алырға тәҡдим итә. Кемдәрҙер туҡтап, балдаҡты әйләндереп-әйләндереп ҡарай, үҙҙәренең хаҡын бирә. Ләкин улар биргән хаҡ баҡыр йә көмөш тәңкәнән күтәрелмәй. Егет Аҡһаҡалдың "Алтындан кәм хаҡ алма" тигәнен хәтерҙә тотоп, береһе менән дә ризалашмай. Шунан ул Аҡһаҡал янына кире әйләнеп килә һәм: "Хөрмәтле Аҡһаҡал, мин һинең йомошоңдо үтәй алманым. Сөнки уны берәү ҙә алтын тәңкәгә һатып алырға ризалашманы. Был балдаҡ алтын тәңкәгә торорлоҡ түгел..." - ти. "Бына әле генә һин бик мөһим һүҙҙәр әйттең, улым, - ти Аҡһаҡал.- Балдаҡты һатыр алдынан уның ысын хаҡын белергә кәрәк бит. Ә уның ысын хаҡын бары тик ювелир ғына билдәләй ала. Шуның өсөн һин хәҙер ювелирға бар, ул хаҡ билдәләп, балдаҡты үҙенә һатыуыңды һорар, ә һин ризалашма, ҡабат әйләнеп кил..." Егет тағы атҡа менә лә, ювелирға китә. Ювелир иһә балдаҡты лупа аша бик оҙаҡ тикшерә һәм егеткә мөрәжәғәт итә: "Аҡһаҡалға әйт, мин был балдаҡты унан етмеш алтын тәңкәгә һатып алам..." Егет шатланып, аҡһаҡал янына килә һәм уға ювелирҙың һүҙҙәрен тапшыра. Аҡһаҡал егетте янына ултырырға ҡуша һәм былай ти: "Улым, һин бына ошондай ҡиммәтле балдаҡ һымаҡһың. Һин дә берҙән-бер һәм бик ҡиммәтлеһең. Һәм иң тәүҙә һин үҙ-үҙеңде шулай ҡиммәтле итеп баһаларға өйрәнергә тейешһең..."**

БЫЛ ЙЫЛДА...

# ФИЛАРМОНИЯ КӨТӘ...

## сағыу тамашалары менән



**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы яңы миҙгелдә үҙ тамашасыһын ниндәй саралар менән ҡыуандырасаҡ?**

**Фәүзи САФИН, Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры:** Филармония 76-сы ижад миҙгелен "Дирижерҙар парады"ның гала-концерты менән аса. БР-ҙың Халыҡ ҡоралдары милли оркестры, республикабыҙҙың һәләтле дирижерҙары Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларынан саҡырылған ҡунаҡтар менән бер сәхнәлә сығыш яһаясаҡ. Орган залындағы концерт миҙгелен Мәскәү филармонияһы солисы, кларнетист Артур Нәзиуллин хәйриә концерты менән асасаҡ. Был ике тамаша Мәҙәниәт йылына бағышлана.

Һәр ваҡыттағыса, филармонияла миҙгел дауамында төрлө концерттар үтәсәк. "Далан", "Ҡарауанһарай" фольклор-эстрада төркөмдәре, оҫта ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов, йырсылар Марсель Ҡотоев, Фәдис Ғәниев, Радик Вәлмөхәмәтов, Әлфиә Юлсурина, Сәйҙә Ильясова, Миңзифа Иҫкужиналарҙың концерттары тамашасыларҙың күңеленә хуш килер, тип ышанабыҙ.

Республикала хор сәнғәтен пропагандалаусы берҙән-бер ижади коллектив булараҡ, БР-ҙың академик хор капеллаһы быйыл 45-се юбилей миҙгелен ҡаршылай. Үткән быуаттың 70-се йылдарында барлыҡҡа килгән был коллективтың концерттарында билдәле композиторҙар эшкәртеүендәге халыҡ йырҙары, классик һәм заман музыкаһы яңғырай. Хор миҙгеле "Төрлө төҫтәрҙәге тормош" тип аталған тамаша менән асыласаҡ.

"Ҡыҙыҡ менән Мәҙәк" эстрада театры барлыҡҡа килеүгә лә 25 йыл тула. Төркөмдөң юбилей тамашалары сиктәрендә Ғәлиә Тимербулатова, Хәмит Тләмов, Зөлфиә Әхмәтова, Фаяз Йәнтуриндарҙың сатира һәм юморҙан торған бенефистары көтөлә.

Быйылғы ижад миҙгеле фестивалдәргә лә бай. Йола буйынса, яҙ һайын джаз музыкаһын яратыусылар "Алһыу пантера"ға йыйылһа, Халыҡ ҡоралдары милли оркестрҙарының сағыу сығыштарын "Урал ораны" Халыҡ-ара фестивалендә күрергә мөмкин буласаҡ. Орган музыкаһына өҫтөнлөк биреүселәр Халыҡ-ара орган музыкаһы фестивалендә төрлө тарафтарҙан йыйылған оҫталарҙың сығыштарын тыңлай ала. Миҙгел М. Кәримдең әҫәре буйынса "Ташлама утты, Прометей" рок-операһы премьераһы менән ябыласаҡ. Филармония өсөн әлегә ят, әммә бик үҙенсәлекле булған был тамаша киләһе йылда иғлан ителәсәк Әҙәбиәт йылына арнала.

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | 253-25-44 |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | 246-03-24 |
| **Бухгалтерия** | 246-03-23 |
| **Хәбәрселәр** | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 26 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 3170